ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 май (һабанай)

2020

№ 19 (905)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреҡле

**Мөхтәрәм йәмәғәт! 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атай-олатайҙарҙың** ҡаһарманлыҡ өлгөләрен иҫләп



2-3

**Һуғыш еле...** беҙҙең ғаиләләргә лә ҡағылған



8-9

**Керчь**



10-11

**Тәгәрмәс өҫтөндәге кәлғәләр...** тыуған ил һағында



12

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һуғыш осоро балалары үҙҙәренең хәтирәләре менән бөгөнгө быуынға ниндәй ишара еткерә?

*Ғизетдин ИРҒӘЛИН, тарих фәндәре кандидаты, архив белгесе, журналист:* Һуғыш осоро балаларының, төрлө ерҙә тыуып, төрлө ерҙә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, бөтәһенең дә яҙмыштары бер үк төрлө, уртаҡ һәм оҡшаш инде ул: быуындары ла ҡатып етмәгән бәләкәй генә йәштәгеләренә тиклем һуғышҡа киткән атай, ағайҙары урынына көс етмәҫлек ауыр эшкә егелеп, аслығын да, яланғаслығын да күрҙе, "ҡара ҡағыҙ" ҡайғыларын да башынан үткәрҙе, ләкин булдыра алмайым, көсөм етмәй, хәлем юҡ, тимәне - әсәйҙәре, апай һәм инәйҙәре рәтендә фашисты еңеү өсөн бөтөн көсөн бирҙе. Һуғыш башланғанда миңә 12 йәш ине. Был яман хәбәр иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ, әсәйҙәр йөрәгенә барып ҡаҙалды: улар илаша башлаһа ла ир-егеттәр тәүҙә һыр бирмәне. Бер-бер артлы һуғышҡа алына башлағас та әле күңелле итеп йырлашып-бейешеп, тиҙҙән еңеп ҡайтырбыҙ фашисты, тип киттеләр. Тик бына тәүге үлем хәбәрҙәре килә башлағас, һуғыштың тиҙ генә бөтмәйәсәген, унын ҡот осҡос фажиғәләр килтерәсәген аңлай башланылар.

Минең бер туған ике ағайым да - Хөснөтдин (1921 йылғы) менән Фәсхетдин (1924 йылғы) бер-бер артлы фронтҡа китеп, хәбәрһеҙ ғәйеп булдылар. 1924 йылғылар ғына ла ете егет киткәйнеләр, шуларҙың өсәүһенә иҫән ҡайтырға насип булды. Беҙҙең ул ваҡыттағы Партизан колхозы Бөрйән районы буйынса алдынғы һәм ныҡлы хужалыҡтарҙың береһе иҫәпләнде. Уға тәжрибәле, яҡшы ойоштороусы Ғәйнеғәле ағай Сәфәрғәлин (киң билдәле талантлы йырсы Ғилман Сәфәрғәлиндың атаһы) етәкселек итте.

Бөйөк Ватан һуғышы башланырҙан алдағы йылдарҙа иген бигерәк ныҡ унды. Элек бит колхозда эшләгән өсөн эш хаҡы итеп аҡса түләнмәй ине, ә иген бирәләр ине. Шунлыҡтан, ул ваҡытта йорт башына байтаҡ ғына ашлыҡ таратылып сыҡты. Кешелә запас аҙыҡ бар ине. Халыҡ бик эшсән, тырыш булды, йырлап эшкә киттеләр, йырлап ҡайттылар. Шуға күрә лә ауыл халҡы һуғыштың тәүге йылдарында аслыҡтан әллә ни миктәмәһә лә тора-бара хәлдәр мөшкөлләнде. Беҙ, бала-саға, ана шул яҙ еткәнен көтөп ала инек тә ҡырға сығып, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, һарына кеүек үҫемлектәр менән тамаҡ туйҙырҙыҡ. Өлкәндәр менән бер ҡатар сығып эшләнек. Мин 12 йәшемдән тырмаға йөрөнөм, унан уҡыусы балалар менән күмәкләшеп иген утарға сығабыҙ.

1943 йыл бигерәк ныҡ ауыр килде. Колхоз аттары ҡорсаңғы менән сирләй башланы: йөндәре ҡойолоп, тиреләре һуйылып төштө, яланғас ҡалдылар һәм күтәртер хәлгә килделәр. Уларҙы дауалап тәрбиәләү өсөн өй беренсә бүлеп бирҙеләр. Аттарҙы эшкә егеү хаҡында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел ине, быҙауларға етешкән меҫкен һыйырҙарға көс төштө: уларҙы егеп, ҡырҙан аттар өсөн бесән ташыныҡ, баҫыуҙа ҡар тоттоҡ, кәрәк саҡта ер ҙә һөрҙөк. Бер заман шулай беҙгә - уҡыусы балаларға бергәләшеп бесәнде ҡырҙан бәләкәй саналарға тейәп, үҙебеҙгә һөйрәп тә ташырға тура килде. Ҡышҡы сатлама һыуыҡта таңғы 4-5-тә саналарҙы һөйрәп сығып китәбеҙ, унан ҡайтҡас, уҡыуға барабыҙ.

Әйткәндәй, беҙҙең ауылда мәктәп 4 класҡа тиклем генә, өлкән кластағыларға күрше Байназарға йәйәүләп, етмәһә, Ағиҙел аша йөрөргә кәрәк булһа ла уҡыуҙы ҡалдырмаҫҡа тырыша инек. Бер йыл шулай ҙа миңә мәктәпте ҡалдырып торорға тура килде, сөнки мине ат ҡараусы ярҙамсыһы итеп эшкә ҡуштылар. Ул ваҡыт һинән һорап торманылар - эшләргә тейешһең, беҙ ҙә ҡарышып торманыҡ, ҡайҙа ҡушһалар, шунда эшләнек - бөтәһе лә еңеү хаҡына икәнде аңлай инек. 14 йәшлек Ғәлимә апайым фермаға һыйыр һауырға төштө, һуғышҡа йәше етмәгән тағы бер ағайымды ФЗО-ға алып киттеләр. Баҫыусылыҡтан тыш урман эшенә лә ҡушалар ине: ағас ҡырҡыу, Ағиҙел буйлап шул ағастарҙан һал ағыҙыу - тыл хеҙмәтсәндәре эшләмәгән эш ҡалманы. Арып-талып ҡайтһалар ҙа кис һуҡыр шәм яндырып булһа ла клубҡа киске уйынға йыйылырҙар ине: уйын-көлкө, йыр-бейеүҙән клуб гөрләп, иҙән таҡталары һелкенеп торор ине. Бына ниндәй дәртле, оптимист халыҡ булған! Бер ниндәй ауырлыҡтарға, юғалтыуҙарға ҡарамайынса...

Ул замандарҙа, ғөмүмән, халыҡ иҫ китмәле асыҡ күңелле, мәрхәмәтле, бер-береһенә ярҙамсыл булды. Ҡышҡы кистәрҙә оҙон юлдан өшөп, талсығып кис ҡунып китергә ниндәй генә йорт ишеген ҡаҡма, һине белмәгән таныш түгел хужалар ҙа әйҙүкләп, йылытып, һуңғы һыныҒын бүлешеп йоҡлатып сығара ине. Аҙаҡ Темәс педучилищеһында уҡып, ауылыма ҡайтып-китеп йөрөгәндә ана шундай эскерһеҙ, шәфҡәтле кешеләрҙе бик күп күрҙем мин. Тап ошо ябай һәм эшсән халыҡ Совет Армияһының ышанығлы тылы, көслө союздашы булды ла инде. Еңеүҙе улар яуланы...

**(Дауамы 2-се биттә).**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һуғыш осоро балалары үҙҙәренең хәтирәләре менән бөгөнгө быуынға ниндәй ишара еткерә?

(Башы 1-се биттә).

***Сәйфулла ӘХМӘҘИЕВ, хеҙмәт ветераны, Шишмә районы, Горный ауылы:*** 1931 йылғымын, Ибраһим ауыл Советына ҡараған Бикәй ауылында тыуҙым, 1937 йылда ғаиләбеҙ ошо уҡ райондағы Ҡымыҙпром ҡасабаһына күсеп килде. Ҡәһәрле һуғыш башланғанда миңә 10 йәш ине, бөтәһе лә бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Һуғыш башланып, беҙҙең ҡасабаға эвакуацияланып килгән кешеләрҙе мәктәпкә урынлаштырҙылар һәм беҙ шул сәбәпле бер аҙ уҡымай торҙоҡ. И.И. Мечников исемендәге Мәскәү институты белгестәре ине улар. Беҙ, ауыл малайҙары, ошо институттың хужалығынан килтерелгән аттарҙы көттөк. Көндөҙ генә түгел, төндә лә: аттар һәр саҡ тук һәм сәләмәт булырға тейештәр, тип аңлаттылар беҙгә, сөнки уларҙан ҡан алалар ине. Аҙаҡ унан сыворотканы айырып алып, Өфөгә ебәрәләр. Был сыворотка фронт өсөн бик кәрәк, сөнки унан яралы һалдаттарҙы дауалау өсөн ҡиммәтле препараттар етештерелгән. Атайым, ат егеп, аҙнаһына ике тапҡыр ана шул сывороткаларҙы Өфөгә ташый торғайны, йыш ҡына йөктө тейәргә-бушатышырға тип ул мине лә үҙе менән алып барыр ине. Йәй көндәре беҙ, малайҙар, өлкәндәр менән бер ҡатар бесән эшләнек. Ҡыш еткәс, ана шул бесәнде ҡырҙан аттарға ташып ашаттыҡ. Аттарға бесән, ем әҙерләүҙә күберәк балалар эшләне.

Шуныһы ғәжәп: ул ауыр йылдарҙа күптәргә уҡыу теймәнә лә, аслы-туҡлы булһаҡ та, гел уҡырға, белем алырға, кеше булырға ынтылыш көслө булды балаларҙа. Мин дә, һуғыш бөтһә, агроном булаһаҡмын, тип хыялландым. Сөнки беҙҙең эргәлә һәр йәһәттән өлгө булырҙай өлкәндәр бар ине, улар беҙҙе хеҙмәткә өйрәтте, бер нигә ҡарамай, белем алырға өндәне. Минең өсөн ундай кеше - хужалыҡ директоры, яҡшы ойоштороусы, белемле агроном Аканаев тигән кеше ине.

Үҙ маҡсатыма оҙаҡ, ләкин ныҡышмалы рәүештә юл ярҙым. Һуғыш бөткәс, механиктар курсын тамамлап, ике йыл комбайнер булып эшләнем, унан трактор бригадаһы бригадиры курсын бөтәрҙөм дә шунда уҡ армия сафына алындым. Курил утрауҙарында дүрт йыл хеҙмәт иткәс, Свердловскиҙа тәҙөләштә эшләп алдым, ләкин тыуған яҡ гел үҙенә тартты. Шулай итеп, мин тыуған совхозыма ҡайттым, өйләндем, өс бала тәрбиәләп үҫтерҙек. Ун йыл Шишмә питомнигында эшләнем, ләкин бала саҡ хыялымды, ниһайәт, тормошҡа ашырҙым: уҡырға инеп, агроном һөнәренә эйә булдым һәм совхозда баш агроном булып 30 йыл эшләнем. Хаҡлы ялға сыҡҡас та әле яраткан эшемде дауам иттем. Шулай итеп, питомникта 53 йыл эш стажым йыйылып киткән. Бының менән шуны әйтергә теләйем: беҙҙе һуғыш сыныҡтырҙы, ул беҙҙе йәшләрҙән үк эшләргә генә түгел, ә хыялыңа ынтылып йәшәргә, бер ваҡытта ла ауырлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа, һайлаған юлыңдан сигенмәҫкә өйрәтте. Енеүҙәр фәҡәт шулай яулана.

***Әсмәбикә СӘМИҒУЛЛИНА, хеҙмәт ветераны:*** Һуғыш башланғанда миңә 9 йәш ине, унан алда үҙебеҙҙә башланғыс класты тамамлағайным, ә 5-се класҡа күрше ауылға йөрөп уҡырға кәрәк ине, мин уҡырға барa алманым. Атайым менән ике ҙур ағайым фронтҡа киттеләр, әсәйем ҡулында беҙ өсәү ҡалдыҡ, улар араһында өлкәне мин инем. Шуға ла әсәйем колхоз эшенә китһә, мин тугандарымды ҡарайым, бергәләп өй эштәрен бөтөрәбеҙ, картуф утайбыҙ, күмәбеҙ. Картуф сәсәк тә ул беҙҙең ризыҡҡа яҙмай ине барыбер: ҡаҙып алғас, өй һайын бирелгән йөкләмә буйынса шул картуфты телемләп, мейестә киптереп, фронтҡа оҙатабыҙ. Берҙәнбер һыйырыбыҙҙың мөсһөҙ генә һөтөнән йыйып эшләнгән май ҙа шунда оҙатыла. Етмәйерәк ҡалһа, районда килгән вәкил тәрмәгә алып китеү менән янап, ҡотто ала ине. Ашарға юҡ, аслыҡ үҙәктәргә үтә. Ике бәләкәй ҡустымды йәлләйем. Көҙ көнө колхоз баҫыуына сығып, башаҡ йыябыҙ йә өшөгән картуф эҙләп ҡаҙынабыҙ. Яҙ етһә, бер аҙ күнел күтәрелеп, енелерәк булып ҡала, үләнгә йомолабыҙ: алабута, кесерткән, ҡуҙғалаҡ, йыуа, ҡымыҙлыҡ - береһе лә ҡалмай.

Колхоз эшенән дә ҡалманыҡ, әсәйҙәр менән бергә эшләйбеҙ. Беҙ, бер үк йәштәрҙәге бер нисә ҡыҙ иген елгәрәбеҙ. Ул ваҡытта елгәргесте ҡул менән әйләндерергә кәрәк ине. Бик арыта, туҡтап торорға ярамай - ҡулдар талып, иҫ белмәй башлар ине хатта. Ҡуй инде, ул ваҡытта күргәндәрҙе хәҙер килештереп һөйләп тә булмай хатта, әйтерһең дә, ҡурҡыныс төш булған һымаҡ. Нисек түҙгәнбеҙ икән тип гел аптырайым хәҙер үҙем. Хоҙай бөгөнгө быуындарға ундайҙы күрһәтмәһен инде, аслыҡ булмаһын. Бөгөн халыҡ бер ниндәй ауырлыҡ күрмәгән, ил өҫтөнә килгән һынауҙарға ҡалайтып сыҙар? Әле бына яман сир ваҡытында ап-асыҡ күренде: кеше хәҙер элекке һымаҡ сабыр түгел бер ҙә генә, дөйөм тәртипте һанламаусылар, түҙемһеҙҙәр, үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртып йәшәүселәр күп. Шуныһы мине бик хәүефләндерә...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

УЙЛЫҒА - УЙ

# АТАЙ-ОЛАТАЙҘАРҘЫҢ

## ҡаһармалыҡ өлгөләрен иҫләп

**Әҙәм балалары ергә йәшәр, үҫер һәм ишәйер өсөн яралған. Әммә, был нисек кенә мәғәнәһеҙ һәм ҡот осҡос фажиғәле булмаһын, кешелек тарихы бер өҙлөкһөҙ барған һуғыштарҙан ғибәрәт.**

Тарих төпкөлдәрендә суҡмар, уҡ-һаҙаҡ, ағас һөңгө менән ҡоралланған ҡырағай кешеләр сит ҡәбиләләргә һөжүм итеп, уларҙың аҙыҡ-түлеген, башҡа мөлкәтен талап алған, бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡоллоҡҡа алып киткән. Берәүҙәр малмөлкәт өсөн йән ҡыйһа, башҡалары биләмәләрен, ғаиләләрен ҡурсалап, баштарын һалған. Беҙҙең, башҡорттарҙың, ата-бабалары башҡаларға баш бирмәҫ ҡәүемдәрҙән булып, уларҙың яугирлыҡ даны бик алыҫ илдәргә таралып, тарихи сәхифәләрҙә теркәлеп ҡалған. Әхмәтзәки Вәлиди башҡорттарҙың иҫ китмәле ҡыйыу, ғәййәр һәм ғорур халыҡтарҙан булып, һис бер йыһангирға баш бирмәүе хаҡында һөкланып яҙған. Әгәр шулай булмаһа, күп быуаттар дауамында, бар халыҡтарҙы тетрәткән, бәғзеләрен юҡ иткән тарихи катаклизмдар аша ата-бабаларыбыҙ ҙа үтеп сыға алмаҫ ине. Был тарихи хәҡиҡәт.

Башҡорт халҡы үҙ тарихында күп яу-ҡырылыштарҙа ҡатнашҡан, дошмандары яғынан һәр төрлө ҡыҫымға дусар ителгән, һанап-иҫәпләп бөтөрөп тә булмаған юғалтыуҙар кисергән. Әммә ул мәңгелек тарих юлдарында үҙ-үҙен, тыуған төйәген, киләсәген - йәш быуындарын һаҡлап-ҡурсалап йәшәтә алыу мөмкинлеген һис ҡулынан ысҡындырмаған. Хәҙерге Рәсәйҙә шундайын да шанлы, данлы, ғазаплы, аяныслы яҙмышлы, шул уҡ ваҡытта үтә трагик заманаларҙа ла йәшәүйәшәреү өмөтөнән ваз кисмәгән башҡа бер халыҡ бармы икән? Рәсәй составында ла башҡорттар үҙ мәнфәғәтенән ваз кисмәй, кәрәк сағында батша чиновниктарына ҡаршы сыға алған, баш күтәргән, батшаларҙы ла үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр иткән. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәре йәшәгән дәүләттән сағыры килгәндә, атҡа менеп, ҡоралын ҡулға алып, ил дошмандарына ҡаршы яу сапҡан, тиңдәшһеҙ ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәткән. Быныһы ла тарихи хәҡиҡәттер.

Замандаштарыбыҙ хәтерендә һуңғы осорҙа - XX быуат башынан бирле халҡыбыҙ кисергән тарихи ваҡиғалар шаһдауы әлегә тиклем һис тынмай яңырып-яңғырап торған кеүек. 1917 йылда башланған инҡилаб шарттарында Әхмәтзәки Вәлиди һәм башҡа бер төркөм зыялылар етәкселегендә халҡыбыҙ милли ерле мөхтәриәткә өлгәшеү маҡсатын алға ҡуйҙы, ошо нигеҙҙә яңы рухи күтәрелеш кисерел, ҡанлы граждандар һуғышы йылдарында үҙенең дәүләтселеккә хоҡуғын яҡлап-һаҡлап ҡала алды. Ҙур ҡорбандар килтереп булһа ла, тәү мәлендә үҙаллы иғлан ителгән Башҡортостан автономияһы совет власы тарафынан танылып, рәсмиләштерелде: был үҙе үк башҡорт рухының оло бер ҡаҙанышы булды, һәм быны бер нисек тә инҡар итеп булмаясаҡ.

1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы ла башҡорт халҡы өсөн етди һынау тотоу осоро булды, ҡанлы ғәрәсәттә дошманды енеү хаҡына үҙенең барса кешелек, матди һәм рухи ресурстарын ахырынаса ҡулланып, үҙ ул-ҡыҙҙарының һоҡланғыс ҡаһарманлыҡ өлгөләрен бар донъяға таныта алды.

Фашизмға ҡаршы ҡәһәрле һуғыш йылдарында Башҡортостандан фронтҡа 710 меңдән ашыу кеше китеп, уларҙың 300 меңе самаһы һәләк була, хәбәрһеҙ юғала. Ошо ҡырылыш йылдарында халҡыбыҙ оло юғалтыуҙар кисерһә лә, дошманды еңеүгә булған ышаныс, рух ныҡлығы фронтта ла, тылда ла тиңһеҙ сыҙамлылыҡ һәм фиҙаҡәрлек өлгөләре булып кәүҙәләнде. Дошман менән батырҙарса алышҡан тиҫтәләрсә мең башҡорт яугиры СССР орден һәм миҙалдарына лайыҡ булды, төрлө милләт вәкилдәренән 278 яҡташыбыҙға Советтар Союзы Геройы исеме бирелде, 35 яугир Дан орденының тулы кавалеры булып танылды.

Башҡортостанға, башҡорт халҡына бөтмәҫлек дан яулағандарҙың барыһын да бөгөн исемләп әйтергә булыр ине: немец фашистары баҫып килгән Мәскәүҙән, Сталинградтан, Советтар Союзының башҡа ауыл-ҡалаларынан алып Берлинғаса дауам иткән яуҙарҙа ир-егеттәребеҙ башын һалды, ғәзиз ҡандарын түкте, күптәре ауыр яраларҙан ыҙаланды. Бөгөн уларҙың данлы исемдәре һәр ауылда, һәр ҡасабала мәрмәр таҡтаташтарға уйылып яҙылған, батырҙарыбыҙ даны халыҡ хәтерендә мәңге һаҡланасаҡ. Тап ошо йылдарҙа башҡорттарҙың хәрби

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔8 майға Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 89 яңы осрағы теркәлгән һәм сирләләр һаны 1332-гә еткән. Бөгөнгә 397 кеше стационарҙа дауалана. Уларҙың 292-һенең хәле ҡәнәғәтләнерлек, 114 пациенттың хәле уртаса, 26-һы - ауыр хәлдә. Ауыр хәлдә булғандарҙың 18-е үпкәне яһалма еләтеү аппаратына тоташтырылған. 417 кешелә сир билдәләре юҡ йәки ул енел формала үтә. Хәбәр ителеүенсә, уҙған тәүлектә 48 кеше һауыҡҡан. Бөтәһе 409 кеше дауахананан сығарылған. Пациенттарҙың үлеме хаҡында хәбәр ителмәй.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика предприятиелары етәкселәрен һәм эшҡыуарҙарын коронавирус осоронда бизнесҡа ярҙам күрһәтеү өсөн субсидиялар алырға саҡырҙы. Һалым хеҙмәте сайтында теркәү башланды. Дәүләттән матди ярҙам марттағы хеҙмәткәрҙәр һанын 12 130 һумға (МРОТ) ҡабатлауҙан сығып иҫәпләнә.

✔Стопкоронавирус.рф сайты мәғлүмәттәренә ярашлы, һуңғы тәүлектә илдә 10 699 яңы коронавирус инфекцияһы осрағы раҫланған. Шуларҙың 4314 осрағында (40,9 процент) сирҙең клиник билдәләре юҡ. Бер үк ваҡытта 2 805 кеше һауығып сыҡҡан. Илдең 85 төбәгендә бөтәһе 187 859 сирле асыҡланған, ә һауыҡҡан пациенттар һаны 26 608-гә тиклем арткан. Шулай уҡ бер тәүлектә 98 үлем осрағы теркәлгән. Ошо осорҙа Рәсәйҙә 1723 кеше коронавирустан вафат булған.

✔Сәйәси һәм иҡтисади коммуникациялар агентлығының апрель өсөн төҙөгән Рәсәй Федерацияһы субъекттары башлыҡтарының йоғонто яһау рейтингында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров элеккесә "бик көслө йоғонто" позицияһын биләй, шул уҡ ваҡытта ул уҙған ай менән сағыштырғанда ошо рейтингта позицияһын көсәйтте: туғыҙынсы урындан алтынсыға күсте. Радий Хәбиров рейтингта Мәскәү һәм Тула өлкәләре губернаторҙарынан, Чечня башлығынан, Санкт-Петербург һәм Мәскәү мэрҙарынан ғына ҡалышты.

✔7 майҙа коронавирус буйынса оператив штаб ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әлегә сауҙа үҙәктәре асылмай тип белдерҙе. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, ҙур сауҙа-күңел асыу комплекстарын асыу 1 июнгә тәғәйенләнгән. Сауҙа үҙәктәре буйынса ныҡлы ҡарар 12 майҙа билдәле була.



АФАРИН!

# БӨЙӨК ЕҢЕҮ ГИМНЫ

**Композитор Давид Тухманов һәм шағир Владимир Харитонов ижад иткән данлыҡлы "День победы" йыры бөгөн илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә, төрлө телдәрҙә яңғырай. Уның шағирә Гүзәл Ситдикова тәржемәһендәге башҡортса вариантын Башҡортостанда ла бик матур яңғыраттылар.**

## ЕҢЕҮ КӨНӨ

Еңеү көнө, йыраҡта кеүек ине,
Өмөт ҡуҙы һирпеп торҙо ипкенен,
Көл-күмергә ҡалған күпме юл үттек,
Йән аямай көрәшеп, еңеү көттөк.

**Ҡушымта:**
Ут- даръя аша беҙ,
Килдек Еңеүгә,
Иртә сал төштө
Сикәләге сәстәргә.
Шатлыҡ-ҡайғы
Бергә ҡайнар йәштәрҙә.
Еңеү көнө!
Еңеү көнө!
Еңеү көнө!

Көнө-төнө һүнмәне ут мартенда,
Бар хыялдар булды Ватан хаҡында,
Еңеү өсөн хеҙмәттә беҙ тир түктек,
Йән аямай көрәшеп, еңеү көттөк.

**Ҡушымта:**

Һаумы, әсәй, ятып ҡалды яуҙаштар,
Еңеү өсөн ҡаһарман ватандаштар.
Ер шарының яртыһын йәйәү үттек,
Йән аямай көрәшеп, еңеү көттөк.

**Ҡушымта:**

батырлыҡтары бар илгә билдәле булды, Константин Симонов, Илья Эренбург кеүек билдәле совет яҙыусылары яугир башҡорттарға дан йырланы. Мариэтта Шагинян үҙенең һуғыш хаҡындағы яҙмаларында башҡорт халҡында ватансылыҡ рухының айырыуса көслө булып, беҙҙең яугирҙарыбыҙ араһында һатлыҡ йәндәрҙең бөтөнләйе менән осрамауын да билдәләп уҙа. Әлбиттә, 1941 йылда Ҡыҙыл Армияның трагик уңышһыҙлыҡтары арҡаһында байтаҡ ҡына башҡорт һалдаттары ла әсир алына, тик фашистар яғына сығып, полицай хеҙмәтен үтәгән бер башҡорт та тарихыбыҙ биттәрендә теркәлмәгән, сөнки ундайҙар булмаған да. Бына тағы ла билдәле бер рәсми мәғлүмәт: Башҡортостандан барлығы 2 265 кешенең әсирлектә һәләк булыуы документаль рәүештә раҫланған. Фронтовиктарҙың шундай хәтирәләре лә бар: фашистар йыш ҡына яралы башҡорттарҙы әсиргә лә алмаған, яу яланында уҡ атып үлтереп киткән. Был фажиғәле күренеш, әммә дошмандарҙың башҡорт яугирҙарынан айырыуса нык ҡурҡыуын да асыҡ белдереп тора.

Башҡортостандың һоҡландырғыс хәрби даны 112-се (16-сы Черниговъ) Башҡорт атлы гвардия дивизияһының Дондан алып Берлинғаса барған үлемесле алыштарында яуланды. Дивизия Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм Кутузов ордендары менән наградланды, уның 78 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелде, 5 кавалерист Дан орденының тулы кавалеры дәрәжәһенә өлгәште, 3860 яугирҙың батырлығы ордендар һәм миҙалдар менән билдәләнде. Был Бөйөк Ватан һуғышы барышында уникаль күренеш булараҡ тарихҡа инде, сөнки Ҡыҙыл Армияның шундай уҡ кимәлдә геройлыҡ күрһәтә алған башҡа милли частары булманы.

Еңеү еңел бирелмәне, тыуған ил азатлығы өсөн барған яуҙарҙа бик күптәр һәләк булды, яраланды. Брянск фронтында (хәҙерге Липецк өлкәһенең Тербуны районында), Сталинград фронтында, Донбаста, Украинала, Белоруссияла, Польшала һәм Германияла һәләк булған яҡташтарыбыҙҙың изге һөйәктәре иҫәпһеҙ күп туғандар ҡәберлектәрендә ятып ҡалған. Шуныһы мөһим: сәйәси хәлдәр үтә ҡатмарлашҡан саҡта ла ул ҡәберлектәр урындағы халыҡтар тарафынан ҡәҙерләп, ҡараулы тотола.

1941 йылдан башлап 112-се Башҡорт атлы дивизияһы халыҡ теленән төшмәне, уның данлы тарихы халыҡ хәтерендә йәшәй, башҡорт атлыларының батырлығы йырҙарҙа данлана, ул хаҡта китаптар яҙыла, спектаклдәр ҡуйыла, документаль фильмдар төшөрөлә. Ваҡыты еткәс, башҡортса художестволы фильм да төшөрөләр, Аллаһ бирһә. Бик күп йылдар буйына легендар генералыбыҙ, комдив Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовтың шәхси ҡаһарманлығы дәүләтебеҙ тарафынан тейешлесә баһаланмай ҡала килде, ошо хәл күңелдәребеҙҙе өйкәп тора ине. Әммә хаҡлыҡ барыбер өҫкә сыҡты: ошо күренекле шәхесебеҙгә үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме биреләүен халҡыбыҙ ҙур ҡәнәғәтләнеү һәм шатлыҡ менән ҡабул итте. Был бит генерал-майор М.М. Шайморатов исеме аҫтында бар башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлығына бирелгән рәсми баһа булып тора.

2011-2012 йылдарҙа Башҡортостанда 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 70 йыллығы киң билдәләнде. Ул саҡта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы аппаратында эшләй инем. Ҡайһы бер фекерҙәштәрем менән кәңәшләшкәндән һуң ошо данлы дивизиябыҙҙың яу юлдары буйлап автосәйәхәт ойоштороу тәҡдиме менән 2011 йылда Башҡортостан Хөкүмәтенә мөрәжәғәт иттем. Ул тәҡдим хупланды, әммә 2012 йылға күсерелде. Сәйәхәткә әҙерләнеү осоронда байтаҡ ҡына ҡаршылыҡтарҙы үтеп сыға алдыҡ, беҙҙең ул саҡта сит илдәргә сығыуыбыҙға ҡаршы булғандар ҙа бар ине. 2012 йылдың 7 авгусында юлға сыҡтыҡ. Һарытау өлкәһенең Хвалынск ҡалаһы (унда дивизиябыҙҙың элекке эскадрон командиры, Советтар Союзы Геройы Г.Ф.Платонов йәшәй) - Липецк өлкәһенең Тербуны районы - Ростов өлкәһенең Белая Калитва ҡалаһы - Украинаның Луганск өлкәһе Петровск ҡалаһы - Чернигов ҡалаһы - Днепр буйындағы Неданчичи ауылы (дивизиябыҙҙың Днепрҙы кисеп сыҡҡан урыны) - Белоруссияның дивизиябыҙ азат иткән ҡала-ауылдары - Брест - Польша ҡалалары - Бранденбург - Премниц (Эльба йылғаһы буйында дивизия яулап алған һуңғы ҡала) - Берлин маршруты буйынса атлы ғәскәребеҙ ҡан ҡойған, ҡаһарманлыҡ күрһәткән ерҙәрҙә туғандар ҡәберлектәренә Башҡортостан тупрағын һибеп, сәскәләр һалдыҡ, мөмкин булған бар төбәктәрҙә урындағы халыҡ ҡатнашлығында митингылар уҙғарҙыҡ, һәләк булғандар хәтерен яңыртып, концерт номерҙары менән сығыш яһаныҡ.

Әйтергә кәрәк, беҙ барып тапҡан яугирҙар зыяраттарының күбеһендә быға тиклем Башҡортостан вәкилдәренең булғаны юҡ ине әле. Әле лә хәтеремдә: ошо батырҙарыбыҙ ҡәберҙәренә тере сәскәләр, башҡортса-русса дивизия исеме яҙылған таҫмалы венoктарыбыҙҙы һалғас та, байраҡтарыбыҙҙы ҡәберҙәр өҫтөнәрәк төшөрә биреп, бер нисә минутҡа тын ҡалабыҙ. Күңелдәребеҙҙе ошо мәлдә ниндәйҙер әйтеп бөтөрһөгөҙ һағыш биләп ала ла, баштарыбыҙ үҙенән-үҙе аҫҡа эйелә, күҙҙәребеҙҙән йәш эркелмәһә лә, һәр беребеҙҙең ҡарашынан зыяратта ғына тыуа торған эске бер моңһоулыҡ һарҡыла. Йәнендә шундай хис-кисерештәр биләй, әйтерһең дә, бынан 70 йыл элек түгел, ә кисә генә беҙ үҙебеҙ күреп белгән иптәштәребеҙҙе юғалтып, һуңғы юлға оҙатҡанбыҙ...

Ҡайҙа ғына булһаҡ та, беҙҙең менән танышып һөйләшкән урындағы халыҡ беҙгә шулайыраҡ тип әйтә ине: "Беҙ башҡорттарҙы үҙебеҙҙең тыуған ерҙәребеҙҙе фашист ҡоллоғонан азат итеүселәр тип беләбеҙ. Һеҙҙең халҡығыҙ менән ғорурланабыҙ, яуҙа һәләк булғандарҙың ҡәберҙәрен ҡарап, матурлап тотабыҙ. Ә һеҙ бигерәк тә маладистарһығыҙ икән - үҙ геройҙарығыҙҙы онотмайһығыҙ, беҙҙең яҡтарға яугирҙар ҡәберлектәренә башҡорттарҙан башҡалар бик килеп тә йөрөмәй шул..." Шул саҡта беҙ ошо патриотик сарабыҙҙың маҡсатына өлгәшә алыуыбыҙға ысынлап тороп инандыҡ та инде - башҡорт батырлығын сит-ят ерҙәрҙә иҫкә алыу, хәтер яңыртыу үҙе үк беҙгә, халҡыбыҙға, мәртәбә өҫтәмәй ҡалмағандыр.

Үлемесле һуғыш тамамланыуға 75 йыл ваҡыт уҙып китте. Халҡыбыҙ "Батыр үҙе үлһә лә, бөтмәҫ даны ҡала" тигән. Эйе, батырҙарыбыҙ даны - мәңгелек. Йылдар бер-бер артлы үтә торор, әммә яҙҙар етеү менән һәр бер яңы быуын Бөйөк Еңеү байрамын хәтергә алаcаҡ, батырҙарыбыҙ иҫтәлегенә һәйкәлдәргә тере сәскәләр һаласаҡ. Киләсәккә ҡараш ташлап, һуғыштан тере ҡайтыу насип булған атай-олатайҙарыбыҙҙың теләктәрен ҡаттан-ҡат ҡабатлағы килә: "Еңеү байрамы һәр саҡ тыныслыҡ менән килһен, тик яңынан ошондай һуғыш ҡына булмаһын инде". Халыҡтарыбыҙҙың ирекле, тыныс тормошҡа хоҡуғы Бөйөк Еңеү менән бергә яуланды - беҙҙең өсөн был мәңгелек тарихи хәҡикәт булып ҡаласаҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин белдереүенсә, 1-ҙән 4-сегә тиклемге башланғыс класс уҡыусылары уҡыу йылын 22 майҙа тамамлай. Ә 5 -11-се класс уҡыусылары өсөн уҡыу йылы 29 майҙа тамамлана.

✓Башҡортостанда "Үлемһеҙ полк" виртуаль акцияһында 35 мең 953 яугир ҡатнаша, тип хәбәр итте республика Дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министрлығы. Быйыл "Үлемһеҙ полк" виртуаль акцияһында ҡатнашыу өсөн министрлыҡтың сайтына геройҙың фотоһүрәтен һалырға һәм ҡыҫҡаса мәғлүмәт (исем-шәрифен, йәшәгән йылдарын, наградаларын) ҡалдырырға кәрәк ине. Артабан сайт үҙ эшен дауам итә, 9 майҙан һуң да теләгән ваҡытта Башҡортостанда тыуып үҫкән ветерандар тураһында мәғлүмәт өҫтәргә мөмкин.

✓Рәсәйҙә быйыл коронавирус таралыуы сәбәпле туғыҙынсы кластар өсөн төп дәүләт имтиханын үткәреүҙән баш тартыуҙары мөмкин. Был хаҡта мәғариф министры Сергей Кравцов белдерҙе. Бынан алда туғыҙынсылар рус теленән һәм математиканан ғына имтихан тапшыра тип хәбәр ителгәйне. Ләкин хәлдең үҙгәреүе ихтимал. "Бәлки, беҙ уҡыусыларҙы йомғаҡлау аттестацияһынан азат иткән ҡарар ҡабул итербеҙ һәм аттестация ағымдағы баһалар буйынса үтер", - тип билдәләне ведомство башлығы.

✓Республика муниципалитеттарында подрядсылар "Башҡорт ихаталары" программаһы сиктәрендә ихата биләмәләрен төҙөкләндереү эштәренә тотонды. Уның маҡсаты - Башҡортостан биләмәһендәге күп фатирлы йорттарҙа граждандар өсөн уңайлы йәшәү шарттары булдырыу. Эштәр исемлегенә ихата юлдарына асфальт түшәү, өҫтәмә парковка урындары булдырыу, хәүефһеҙ резина япмалы балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөү, йәшелләндереү, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар контейнерҙары майҙансыҡтары булдырыу инә.

✓Башҡортостан Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетының ЗАГС бүлектәре 2020 йылдың майында эшләмәгән ял көндәрендә үлемде теркәү буйынса дәүләт хеҙмәте күрһәтеү өсөн граждандарҙы билдәләнгән график буйынса ҡабул итә. Ведомствоның матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, Өфө ҡалаһының махсуслаштырылған ЗАГС бүлеге 9, 11, 25 майҙа эшләй. Ҡала һәм районадарҙың ЗАГС бүлектәре халыҡты 4 майҙан ҡабул итә.

ҠЫҪҠАСА

# ЛАЙЫҠЛЫЛАР БҮЛӘКЛӘНӘ

✓ **Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған сығарылыш уҡыусылары әҙерләгән өсөн уҡытыусыларға премия тапшырыла.** Тейешле указға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, премия 2020 йылдан уҡ тапшырыла башлай. Уның күләме - 50 мең һум. Бүләкләнеүселәрҙең һанын йыл һайын Берҙәм дәүләт имтиханы йомғаҡтары буйынса республика Мәғариф министрлығы билдәләй. Премия уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү һәм белем биреү эшмәкәрлеген дәртләндереү өсөн булдырылды. Былтыр республикала 109 сығарылыш уҡыусыһы Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға тапшырҙы.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ике аҙна карантин шарттарында эшләгән социаль хеҙмәткәрҙәргә һәм педагогтарға бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.** 11 апрелдән - Хеҙмәт министрлығы ҡарамағындағы дәүләт социаль хеҙмәтләндереү учреждениеларында; 20 апрелдән - Мәғариф министрлығы ҡарамағындағы уҡыусылар тәүлек әйләнәһенә булған дәүләт учреждениеларында; 21 апрелдән - республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарамағындағы Республика махсуслаштырылған бала йортонда. Административ-идара итеү персоналына һәм социаль, белем биреү, медицина хеҙмәттәре күрһәткән хеҙмәткәрҙәргә 15 мең һум түләнә; хеҙмәт күрһәтеү өсөн шарттар менән тәьмин иткән хеҙмәткәрҙәргә - 5 мең һум. Әгәр социаль учреждениела яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың раҫланған осраҡтары булһа, бөтә хеҙмәткәрҙәргә лә 25-әр мең һум түләйәҙәр.

✓ **Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем министрлығы коронавирус арҡаһында вуздарҙа яңы уҡыу йылының башланыу ваҡытын күсерергә йыйынмай, ул 1 сентябрҙә башлана, тип хәбәр итте ТАСС.** Бынан алда киң мәғлүмәт сараларында уны 1 октябргә күсереү ихтималлығы тураһында яҙғайнылар. "Әлеге ваҡытта Рәсәй Фән һәм юғары белем министрлығы түбәндәге ваҡытты күҙ унында тота: бейыл абитуриенттарҙан бюджет урындарына доументтар ҡабул итеүҙең һуңғы көнө - 10 август. Уҡырға алыуҙың тәүге тулҡыны - 19 августа, ә икенсеһе 24 августа була. Беренсе сентябрҙә юғары уҡыу йортона инған бөтә студенттарҙың офлайн дәрестәре башлана. Уҡытыу форматы эпидемиологик хәлдән сығып һайлана", - тип белдерҙеләр министрлыҡтың матбуғат хеҙмәтендә. Фән һәм юғары белем министрлығында ҡабул итеү кампанияһы ваҡытының Берҙәм дәүләт имтиханы тамамланыуға ҡарата билдәләнеүен, ә абитуриенттың һәм ҡабул итеү комиссияһының аралашыу форматы онлайн-режимға күсерелеүен иҫкә төшөрҙәләр.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ВАХТАСЫЛАР ҠАЙТТЫ



**Мәғлүм булыуынса, 28 апрелдә Яҡутстандың Лена районында вахта ысулы менән эшләүселәр йәшәү урындарының карантин талаптарына тура килмәүе сәбәпле митингыға сыҡҡайны.**

Быға саҡлы был субъектта Башҡортостандан 1800 кеше эшләне. Улар Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа алынған анализ һөҙөмтәләрен белмәүҙәре, вирус менән зарарланыусылар һәм сәләмәт граждандар араһында бер нindәй сикләү булмауы, йәғни барыһының да бер ятаҡта йәшәүе тураһында мөрәжәғәт иткәйне. Бынан алда ОРВИ билдәләре булған 105 кешенең эш урынынан Ямал-Ненец автономиялы округына, Ноябрьск ҡалаһына сығарылыуы, һуңынан уларҙың 23-өндә коронавирус раҫланыуы, шулай уҡ 16 вахта эшсеһенең вахта ҡасабаларында изоляторҙарҙа дауаланыуы билдәле булғайны. Роспотребнадзор Чаяндин нефть-газ конденсаты яткылығы эшселәре араһында 39 сир осрағын рәсми раҫлағайны. 30 апрелдә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте яҡташтарыбыҙҙы ҡайтарыу тураһында ҡарар ҡабул итте һәм Рәсәй төбәктәренән беренселәрҙән булып Яҡутстандың Чаяндин яткылығында вахтала эшләгән яҡташтарыбыҙҙы ҡайтарыу буйынса эштәр башланы. 3 майҙа "Магнитогорск" аэропорты "Якутия" авиакомпанияһының 200 кешелек тәүге ике бортын ҡабул итте. Ҡайтыусылар Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондары һәм Сибай, Баймаҡ ҡалалары граждандары. Вахтанан ҡайтыусылар Әбйәлил районы шифаханаларының береһендәге обсерваторға урынлаштырылды. Улар унда 21 көн буласаҡ, профилактик дауалау терапияһы үтәсәк.

Махсус рейстың икеһен Өфө аэропорты ҡабул итте. 6 майҙа республикаға Чаянда яткылығынан тағы 179, 7 майҙа 295 вахтасы ҡайтты. БР Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Ринат Бәширов белдереүенсә, республикаға барлығы 1072 вахтасы ҡайтҡан, 11,12 майҙа ҡалған яҡташтарыбыҙҙы ла ҡайтарыу планлаштырыла. Ауырыуҙары раҫланған вахтасылар әлегә Чаяндала ҡала, ләкин киләсәктә уларҙы ла ҡайтарыу хәстәрлеге күреләсәк. Ҡайтыусылар флюорография үтә, ниндәйҙер проблема асыҡланғанда, етдирәк тикшереү башҡарыла, һәр көн медицина хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүендә ҡала. "Был осраҡта һәр граждан хәүеф усағынан ҡайтыусы булып тора, шуға күрә барлыҡ хәүефһеҙлек саралары ҡулланыла", - тине Ринат Рәшит улы.

# ПЛАЗМА ЭШЛӘЙБЕҘ

**6 майҙа Өфөлә коронавирус сирлеләрҙе дауалау өсөн ауырып һауыҡҡан донор ҡанынан беренсе иммун плазмаһы эшләнде. Республиканың ҡан биреү станцияһы Башҡорт дәүләт медицина университеты менән берлектә донор-реконвалесценттарҙың мәғлүмәт базаһын булдыра башланы.**

Әлеге, вирустан һаҡланыу өсөн вакцина саҡ әҙерләнгән ваҡытта, ауыр сирлеләргә ҡан плазмаһы биреү һөҙөмтәле дауалауҙың альтернатив ысулы булып тора. Рәсәйҙә был алымды бер нисә аҙна элек ҡуллана башланылар. Ил субъекттары араһынан Башҡортостан COVID-19 реконвалесцент донор ҡанынан плазма эшләүсе беренсе төбәк. Мәғлүм булыуынса, йоғошло ауырыу кисергән кешенең организмы антиматдәләр (сиргә ҡаршы тороусы матдә) эшләп сығара һәм инфекцияны енергә ярҙам итә, ұларҙа иммунитет барлыҡҡа килә. Шундай донорҙарҙан алынған плазмала яңы вирусҡа ҡаршы тороусы матдә титры бик юғары. Дауалауҙа башҡа һөҙөмтәле ысулдар булмағанда, плазма ауыр сирлеләрҙе ҡотҡарып ҡалыуға өмөт уята.

- Кем күптән түгел раҫланған COVID-19 сирен үткәргән, һауыҡҡандан һуң бер ай үткәс, барығыҙҙы ла плазма тапшырырға һәм башҡаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалырға саҡырабыҙ, - ти Республика ҡан тапшырыу станцияһы табибы Рәмил Хәмитов. Шулай уҡ Башҡорт дәүләт университеты клиникаһында ла мобиль күсмә ҡан әҙерләү комплексы урынлаштырылған. Плазма тапшырыу өсөн 8-927-089-89-02 номеры буйынса Республика ҡан тапшырыу станцияһының донор кадрҙарын комплектлау бүлеге мөдире Артур Ғүмәр улы Мусинға шылтыратырға кәрәк.

# БАЛАЛАР ЯЛЫ

**Башҡортостанда балалар лагерҙары 13 июлдән эшләй башлай. Ҡала ситендәге лагерҙарҙа 21 көнлөк ике смена йә иһә 14 көнлөк өс смена ойошторола. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә вице-премьер Фәнүр Йәғәфәров ошо хаҡта белдерҙе.**

Коронавирус таралыуына юл ҡуймау өсөн сикләү саралары индерелеүенә бәйле балалар ялы ойошмаларының эшмәкәрлеге һәм уларҙа йәйге миҙгелгә әҙерлек 28 марттан 1 июнгә тиклем ваҡытлыса туҡтатылды. Һауыҡтырыу ойошмаларына юлламалар ҙа һатылмай. "Әлеге ваҡытта республика биләмәһендә урынлашҡан балалар ялы һәм уларҙа һауыҡтырыу ойошмалары реестрын булдырыу эше алып барыла. Бөгөнгә асыу планлаштырылған 2630 лагерҙың 2081-е реестрҙа бар. Ҡалған 549 лагерға санитар-эпидемиологик һығымталар алырға кәрәк. Был процедура Гигиена һәм эпидемиология үҙәге хеҙмәткәрҙәренең урындарға сыға алмауына бәйле туҡтатылды", - тип билдәләне вице-премьер. Йәйге ял буйынса әҙерлек сараларын 12 майҙан, изоляция режимы тамамланғандан һуң башлау күҙаллана. Фәнүр Йәғәфәров балалар лагерҙарына һатып алған юлламаларҙы кире ҡайтарыу мәсьәләһенә лә аңлатма бирҙе. Ата-әсәләрҙең аҡсаны кире ҡайтарыу йәки икенсе сменаны һайлау мөмкинлеге бар.

# ХӘБӘР КӨТӘБЕҘ

**12 майҙа Башҡортостан Хөкүмәте республикала үҙизоляция режимын йомшартыу һәм "иҡтисадты асыу" буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙар хаҡында иғлан итә, тип белдерҙе республика Башлығы Радий Хәбиров.**

Атап әйткәндә, эшләгән предприятиелар һанын арттырыу, балалар һәм өлкәндәр өсөн изоляция режимын йомшартыу, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре үтәлгән осраҡта балалар майҙансыҡтарын асыу мөмкинлеге, шулай уҡ парктарҙы һәм скверҙарҙы асыу тураһында һүҙ бара. "12 майҙа иртән үҙизоляция режимын йомшартыу буйынса ҡарарҙарыбыҙҙы иғлан итербеҙ, - тине Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә үлтырышта. - Уға тиклем бөтә нәмәне ентекләп өйрәнеүҙе, муниципалитеттарҙағы коллегалар менән һөйләшеүҙәр алып барыуҙы, иҡтисадты асыу һәм үҙизоляция режимы буйынса тәҡдимдәр индереүҙе һорайым". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 31 мартта киске сәғәт 8-ҙә Башҡортостан Башлығының республика халҡын тулы үҙизоляция режимына күсереү тураһында указы ғәмәлгә ингәйне.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Сираттағы оператив кәңәшмәлә белдереүҙәренсә, Ағиҙел йылғаһының Өфө эргәһендә максималь кимәлдә - 700-800, Ҡариҙел йылғаһының Шаҡшала - 750-850, Димдең Бочкарева эргәһендә 570-670 сантиметрға күтәрелеүе фаразланған булһа, Ағиҙел - 328, Ҡариҙел - 652, Дим 214 сантиметрға ғына күтәрелгән. Әммә шулай булһа ла, Дим, Калинин, Киров, Ленин райондарындағы йорт алды участкалары һыу аҫтында ҡала әле.

✓2020 йылда Башҡортостанда 829 күп фатирлы йортто капиталь ремонтлау планлаштырыла. Ҡыйыҡты йүнәтеү элеккесә капиталь ремонт буйынса иң кәрәкле эш төрө булып ҡала. Муниципалитеттар, күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау республика программаһы сиктәрендә ҡыҫҡа ваҡытлы саралар планына үҙ тәҡдимдәрен индереп, тәү сиратта һыу үткәргән ҡыйыҡтар проблемаһын хәл итергә тырыша. Хәҙергә подряд ойошмалары кисектергеһеҙ эштәр генә башҡара, бөтәһе 120 объект асыҡ, башлыса ҡыйыҡтар ремонтлана.13 йортта эштәр тамамланған.

✓Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә "Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы янында урынлашҡан "Беренсе май" паркын төҙөкләндереү дауам итә. Быйылғы миҙгелдә һыу янында ял зоналары төҙөлә. Район ЗАГС-ы Йәштәр аллеяһы паркы менән берләштерелә, тематик арт-объекттар урынлаштырыла. Күп кеше ҡатнашҡан мәҙәни саралар зонаһында яңы заманса сәхнә ҡуйыла. Шулай уҡ паркта уйын зоналары һәм спорт объекттары, велосипед юлдары, сәләмәтлек һуҡмағы, дөйөм тукланыу зонаһы барлыҡҡа килә.

✓Майҙа Башҡортостан республикала тәүге дәүләт ябыҡ футбол майҙаны һалыу өсөн төҙөүсе менән килешеүгә ҡул ҡуйырға ниәтләй. Спорт министрлығы бынң өсөн "Спорт - йәшәү нормаһы" проекты сиктәрендә федераль бюджеттан 450 миллион һумдан ашыу аҡса йәлеп итә алды. Был заманса каркас-модуль павильоны Комаров урамындағы "Нефтсе" стадионы эргәһендә төҙөләсәк.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, танылған опера йырсыһы Аҫҡар Абдразаҡов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә һәммәһен дә миллиондарҙың яратҡан "Еңеү көнө" йырын (Давид Тухманов - Владимир Харитонов) туған телдә башҡарырға саҡырҙы. 9 майҙа pobeda-2020.ru йәки диктантпобеды.рф сайтына инеп, плеерҙы ҡабыҙырға, туған теленде һайларға һәм йырҙы башҡарырға кәрәк. Йырлау өсөн туғандарҙы һәм яҡындарҙы, дуҫтарҙы саҡырырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ УРАМДАРЫНАН...

**Әле генә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры Миңлеғәли Шаймуратовҡа, һәләк булғандан һуң 78 йыл үткәс, Рәсәй Геройы исеме бирелеүе тураһындағы яңылыҡ республика буйынса дан һәм хәҡиҡәт тантанаһы ораны булып яңғырағайны. Ә инде 9 Майҙа был оло наград мәңгелек һаҡлауға Өфөгә ҡайтарыласаҡ.**




Уны аэропортта ҡаршы аласаҡтар һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы "ГАЗ-67" автомобиле, К-750, М-72 мотоциклдары, хәҙерге БТР-ҙарҙан торған почетлы кортеж 16-сы Гвардия кавалерия дивизияһы, Еңеү байрағы аҫтында баш ҡаланың үҙәк урамдарынан үтеп, Совет майҙанында туҡталасаҡ һәм наград тантаналы шарттарҙа Милли музейға тапшырыласаҡ. "Сарала бик аҙ кеше ҡатнаша, халыҡ бөтөнләй булмай, ғөмүмән, барлыҡ ҡурсаланыу шарттары талаптары үтәләсәк. Тантананы Башҡортостан юлдаш телевидениеһы аша ҡарарға мөмкин", - ти БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Ирек Сәғитов. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы - Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәткән һәм илгә 78 Советтар Союзы Геройы биргән берләшмә. Бөгөн республикала кавдивизия яугирҙары ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалһа, берҙән-бер иҫән Советтар Союзы Геройы, 97 йәшлек Георгий Фёдорович Платонов Һарытау ҡалаһында йәшәй.

# ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН

**Башҡортостан Хөкүмәте кәңәшмәһендә Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуҙың 75 йыллығына арналған Еңеү көнөн байрам иткәндә ниндәй хәүефһеҙлек сараларын үтәргә кәрәклеген иғлан иттеләр.**

Барлыҡ үҙенсәлектәр хаҡында республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев һөйләне: сәскәләр һалғанда ҡатнашыусылар араһында 2 метрҙан ашыуыраҡ социаль дистанция һаҡланырға тейеш; өлкән класс уҡыусыларын һәм студенттарҙы почетлы ҡарауылға баҫтырырға тәҡдим ителмәй; байрам салюттарын халыҡ ҡатнашлығынан тыш үткәрергә; акцияла ҡатнашыусыларҙы шәхси һаҡланыу саралары менән тәьмин итергә; ветерандарҙы сараларҙа ҡатнаштырмаҫҡа; ветерандарҙы ҡотлағанда социаль дистанцияны һаҡларға; бүләк йыйылмаһын йәки ҡотлау открыткаһын тапшырғанда туранан-тура бәйләнешкә инмәскә. Муниципалитет башлыҡтарын ошо хәүефһеҙлек сараларын мотлаҡ үтәүҙәрен һоранылар.

# ЭСӘР ҺЫУЫБЫҘ...

**Яҙғы ташҡын осоро - баш ҡаланың эсәр һыу системаһы өсөн дә бер ни тиклем хәүеф тыуҙыра, сөнки һыуһаҡлағыстарҙа һәм торбаларҙа бер ниндәй авария ла, алдан күрелмәгән хәл дә булмаҫ, тип берәү ҙә әйтә алмай.**

Шуға күрә, сикләүҙәр ваҡыты булһа ла, "Уфаводоканал" МУП-ының барлыҡ хеҙмәттәре һәм лабораториялары штат режимында эшләй. Бары тик 65 йәштән өлкәндәр өйҙә ҡурсаланыуҙа, ә башҡа хеҙмәткәрҙәр өсөн һәр ерҙә иҫкәрмәләр эленгән, көн һайын улар эшкә ҡаты контроль үтеп инә, шик тыуҙырыусылар эш урынына үткәрелмәй. Бынан тыш, бина ла, бигерәк тә лабораториялар, һыу пробаһын алып йөрөгән транспорт салоны ентекле дизенфекциялана. 29 апрелгә ҡарата эсәр һыуҙың химик составы буйынса анализы иҫәбе 8500-ҙән, микробиологик күрһәткестәр буйынса 500-ҙән артып киткән. "Һыу йыйылған ҡорамалдарҙа (водозабор) эсәр һыуҙы әҙерләү ультрафиолет нурҙарярҙамында дезинфекциялана. Шулай уҡ даими рәүештә гипохлорит һәм хлор менән зарарһыҙландырыла", - тине предприятиеның генераль директоры Артем Чакиров. Таҙартыу ҡоролмаларында ла ағым һыуҙы механик таҙартыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡомташ "Этоксамин" дезинфекциялау сараһы иретмәһе ҡулланылып зарарһыҙландырыла.

# ПАРОМДАР...

**Йыл һайын, йылғалар боҙҙан асылыу менән "Өфө ҡалаһының йылға аша сығарыу хеҙмәттәре" эш башлай. Бөгөнгә баш ҡаланың ете кисеүенең (переправа) алтыһы эшләй. Йөк ташыуға тәғәйенләнгәне ташҡын тамамланғас эшләй башлаясаҡ.**

Паром кисеүҙәре иртәнге 8-ҙән киске 7-гә тиклем эшләй, хәрәкәт итеү арауығы - 15 минут. Коронавирус хәүефен иҫәпкә алып, судноларҙа даими рәүештә дезинфекция эштәре алып барыла, битлек режимы күҙәтелә. Юл хаҡы былтырғы кимәлдә ҡалдырылған: карта менән иҫәпләшкәндә - 25 һум, ҡулаҡсаға - 30 һум. "Алға" транспорт картаһы һәм социаль карта буйынса льготалы юл йөрөү ғәмәлдә. Пассажирҙар паромының техник торошо даими рәүештә тикшерелеп тора, судно менән тәжрибәле профессионалдар - капитан һәм матрос идара итә.

# ТАЛПАН МЕНӘН СЫСҠАНДАН...

**Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә Роспотребнадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина коронавирусты профилактикалау менән бер рәттән, миҙгел хәүефе - талпандар һәм сысҡандар тараткан инфекциялар тураһында ла һөйләне.**

6 майға ҡарата республиканың медицина учреждениелары на талпан ҡаҙалыу һөҙөмтәһендә 940 кеше мөрәжәғәт иткән, шул иҫәптән 344 бала. Баш ҡалала был һан 200 кеше, уларҙың 26 проценты - балалар. "Башҡортостан Республикаһының гигиена һәм эпидемиология үҙәге" ФБУЗ-ы лабораторияларында һәм уның филиалдарында барлығы 800 талпан тикшерелгән, уларҙың 1 проценты зарарлы тип табылған. Әммә әлегә ваҡытҡа сирләүселәр асыҡланмаған. 12 марттан республикала халыҡтың мөрәжәғәттәре буйынса көндәлек мониторинг алып барыла. Дөйөм алғанда, талпан ҡаҙалыуы буйынса йыл һайын 10 меңдән 20 меңгә тиклем мөрәжәғәт була, баш ҡалала - 1 меңгә тиклем. Галина Пермина белдереүенсә, талпан энцефалитынан һөҙөмтәле һаҡланыу сараһы булып вакцинация тора. Быйылғы миҙгелдә Өфө ҡалаһында 1,2 мең гектар майҙанда талпандарға ҡаршы эшкәртеү үткәрелә, уның 555 гектары - республика бюджеты иҫәбенә. Шулай уҡ сығыш һяаусы 10400 гектарҙа кимереүселәргә ҡаршы барьер дератизацияһы үткәреү тураһында ла бәйән итте. 2019 йылда геморрагик биҙгәк сире буйынса эпидемиологик хәл-торош ғәҙәттәгесә тип баһаланһа, быйыл өс айҙа 31 ауырыу осрағы теркәлгән, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 1,5 тапҡырға күберәк.

ҠЫҪҠАСА

# ЯНҒЫНДАН ҺАҠЛАНЫҒЫҘ!

✓ **Башҡортостан биләмәһендә тәүлек эсендә 25,4 гектар майҙанда өс тәбиғәт янғыны сыҡҡан (Йылайыр районы, Березовка - 6,1 гектар; Учалы районы, Бәләкәй Ҡаҙаҡкүл - 1,2 гектар; Учалы районы, Алтаныш станцияһы - 18,1 гектар).** Тәбиғәт янғындары һүндерелгән, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте. Быйыл янғын йәйһәтенән хәүефле осор башланғандан алып 27,4 гектар майҙанда дүрт тәбиғәт янғыны сығанағы барлыҡҡа килгән (уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда - 48 сығанаҡ, 44 сығанаҡҡа аҙыраҡ). Шаршамбы, 6 майҙа, Башҡортостан буйынса өсөнсө, урыны менән дүртенсе класлы янғын хәүефе фаразлана. Дүртенсе класс Хәйбулла районында көтөлә. 30 апрелдән Башҡортостан биләмәһендә янғынға ҡаршы махсус режим индерелде. Ул 10 майға тиклем дауам итә.

✓ **Дәүләт теркәүе хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы интернетта Дәүләт теркәүе хеҙмәте рәсми сайтының дублёры барлыҡҡа килеүе тураһында иҫкәртә.** Атап әйткәндә, бындай сайттар Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан мәғлүмәттәр биреү буйынса онлайн-хеҙмәттәр тәҡдим итә. Йыш ҡына улар үҙ майҙансыҡтарында рәсми символиканы файҙаланып, үҙҙәрен Дәүләт теркәүе хеҙмәте исеменән эш иткән агенттар тип таныштыра. rosreestr.ru сайты Дәүләт теркәүе хеҙмәтенең берҙән-бер рәсми сайты, дәүләт хеҙмәттәре алыу сығанағы булып тора. "Ведомствоның бер ниндәй ҙә вәкилдәре һәм аралашсылары юҡ. Ялған сайттарға мөрәжәғәт итеү финанс ҡаҙан юғалтыуҙарҙан тыш, күсемһеҙ милек өлкәһендә дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр алыуға килтереүе ихтимал", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓ **Башҡортостанда синоптиктар 9 майға һауа торошон фаразланы. Байрам көнөндә яуым-төшөм көтөлмәй, ел көньяҡ-көнсығыштан, көнсығыштан талғын, көндөҙ ҡиҫкен.** Һауа температураһы төндә +8,+13 градус, көнсығыш райондарҙа урыны менән +3 градусҡа тиклем, көндөҙ һауа 23-28 градусҡаса йылына. Эҫе һауа торошо көньяҡ кинлектәрҙән йылы килеү менән аңлатыла. Юғары һауа температураһы һәм яуым-төшөмдөң булмауы янғын хәүефһеҙлеген арттыра, айырыуса республиканың көньяҡ яртыһында. Башгидромет хәбәр итеүенсә, 10 майҙан ҡыҫҡа ваҡытлы йәшенле ямғырҙар көтөлә. Киләһе аҙнаның башында һауа температураһы түбәнәйә, ләкин юғары температура режимы һаҡлана.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сөйәл үләне

❖ Сөйәл үләне, кесерткән һәм календуланан әҙерләнгән төнәтмә матастаза таралыуына ҡамасаулай. Үләндәрҙе тигеҙ нисбәттә алып, ваҡлап бөтәһен бергә ҡушырға. 1 ҡалаҡ йыйылмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста бешерергә. Иртәнсәк ас ҡарынға ярты стакан эсергә, ҡалған яртыһын киске аштан алда ҡабул итергә.

❖ Сөйәл үләне шешкә дауа, инфаркт һәм инсульттан ҡалған йөйҙәрҙе бөтөрә. Дауаны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ сөйәл үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 15 минут бешерергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2 ҡалаҡ итеп эсергә.

## Бәшмәктән

❖ Һыуҙы 50 градусҡа тиклем эсетеп 200 мл аш һеркәһе ҡойорға. Һыу кимәле шайтанашыҡҡа тиклем етергә тейеш. Аҙнаһына 3 тапҡыр ошо һыу парында аяҡтарҙы 10-15 минут тоторға.

❖ Имән ҡайыры, вербена, баҫыу ҡырҡбыуыны, календула үләндәрен һәм ҡара бөрлөгән япрағын тигеҙ нисбәттә алырға. 2 ҡалаҡ әҙерләмәгә 200 мл һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. Көнөнә 5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

## Күңел төшөнкөлөгөнән

❖ 1-әр ҡалаҡ ваҡланған бөтнөк, шифалы ромашка һәм мелиссаны алып, 3 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 2 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

❖ Петрушка япраҡтары, шифалы һабын үләне һәм базилик япрағы һәм сәскәләренә 3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ашарҙан алда көнөнә 2 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

## Кәкүк емеше

❖ Кәкүк емеше (первоцвет весенний) йүтәлләгәндә дауа. 2 ҡалаҡ ваҡланған үләнгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 минут ҡайнатырға һәм 20 минут тоторға. Һөҙөлгән ҡайнатманы көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Тейешле миҡдарҙан күберәк эсергә ярамай, сөнки был концентрациялы ҡайнатма.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Сахих хәҙистәр йыйынтығынан алынған ошо доғаларҙы уҡып йөрөү кәрәк. "Мин бер сирҙе лә уға ҡаршы сараһыҙ барлыҡҡа килтермәнем", тип Раббыбыҙ әйткәне хаҡында ла Уның илсеһе беҙгә еткергәнлеген беләйек.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Ҡатын-ҡыҙҙар кейемен мәрйен һәм металл сулпылар менән биҙәү йолаһы быуаттар дауамында быуындан быуынға күсерелә килгән. Был бигерәк тә Көньяҡ Уралдағы һәм Волга буйы далаларындағы сарматтарға хас күренеш булған. Шуға күрә Г.П. Васильеваның төркмән һәм башҡорттарҙың өҫкө кейемде биҙәүҙәге уртаҡлыҡтарҙың башланғысы скиф-сармат традицияларына барып тоташа тигән фекере нигеҙһеҙ түгел. Мерв һәм Чичанлык-тепе территорияһында табылған терракот һындарға ҡарағанда, өҫкө кейемгә металл сулпылар тағыу ғәҙәте Төркмәнстандың көньяғында II-III быуаттарҙа барлыҡҡа килә. Г.П. Васильева Урта Азия һәм Көньяҡ Урал халыҡтары араһында тығыҙ мәҙәни бәйләнеш булдырылыуы һәм шул осорҙа уртаҡ мәҙәни традициялар барлыҡҡа килеүе тураһында ла әйтә. Кейемгә металл биҙәүестәр тағыу Көньяҡ Урал буйында ғына түгел, Көнбайыш һәм Урта Себерҙең көньяҡ өлкәләрендә лә киң таралған. Уны ошо территорияларҙа йәшәгән скиф-сармат халҡынан Урта Азиянан күсеп барған төрки ҡәбиләләр үҙләштергән булһа кәрәк.

Башҡорт костюмында, көньяҡ-көнсығыш төбәктәгенән тыш, сәйлән ҡулланыу һирәк осраған. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының иңгә ябынған кейемдәрен ҡайыуҙа сәйлән ҡулланыу үҙенсәлектәренә ҡарап, көньяҡ ханттар, бигерәк тә эвендар, эвенктар, долгандар менән ҙур оҡшашлыҡ табырға була. Эвенктар сәйләнде тарамыштан эшләнгән епкә теҙеп нигеҙ туҡымаға һәр пар сәйлән бөртөгө араһында сәнсем алып теккән. Башҡорттар сәйләнде ҡәҙимге епкә эш барышында теҙә барып теккән, әммә сәйлән бөртөктәрен икешәр итеп берләштереү иғтибарҙы йәлеп итә. Эвенк һәм долгандарҙа әйбер сите буйлап орнаментлы һыҙат "үткәреү" киң таралған, ә башҡорттарҙа салғыйҙың төҫлө ҡаймаһына сәйлән һыҙаты тегеү ғәҙәте булған. Тунгустарҙа үҙәктәш түңәрәктәрҙе сәйләндән эшләгәндәр, башҡорттарҙа уны мөһөр баҫҡанда (солярный знак) ҡайыу менән аралаштырғандар. Иңбашы сәйлән менән нағышланған байрам еләндәрен көньяҡ-көнсығыш үҫәргән ырыуы башҡорттарынан тыш, көньяҡ ханттарҙа осратырға була. Көнсығыш ханттар кейемендә эполеттар булған, уларҙа был деталь ниндәйҙер көньяҡ традициялар йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән. Погониңсәләр Согда, Варахши, Пенджикент храмдарындағы һүрәттәрҙәге персонаждар кейемендә төшөрөлгән (VI-VII б.). Шулай уҡ ундағы кейемдәрҙең ике яҡ ҡабырғаһында итәге буйлап уйымдар ҡалдырылған. Бындай уйымдар Ирандағы сасанидтарҙың өҫкө кейемдәренә хас булған; урта быуаттарҙа Иран халҡы кейеменең ҡабырға уйымдарын таҫмалар һәм нағыш менән биҙәгәндәр. Төркиҙәр кейемендә иһә, ҡабырғаһындағы уйымдар һәм уларҙы нағышлау ғәҙәте һуңыраҡ осор күренеше. Ҡабырғаларында уйымы булған иҙеүен асып кейгән ирҙәр кейеме, һирәгерәк ҡатындарҙыҡы, Иран һәм төрки халыҡтарында быуаттар дауамында һаҡланып килгән һәм бөгөнгө көнгә тиклем Урта Азияла тажиктарҙа, белуждарҙа, төркмәндәрҙә, үзбәктәрҙә, ҡарағалпаҡтарҙа ҡалған. Ҡырғыҙҙарҙа ҡабырғалары уйымлы халаттарҙы Тажикстан һәм Үзбәкстан йоғонтоһонда булған көньяҡ-көнбайыш райондарҙа кейгәндәр. Ҡаҙаҡ кейеменең ҡабырғаһында уйымдар ҡалдырыу үзбәктәрҙән үҙләштерелгән һыҙат тип иҫәпләнә. Уйымдарҙы биҙәү традицияһы үзбәк һәм төркмәндәрҙә булған.

Шулай итеп, ирҙәр сәкмәне ҡабырғаларында уйым яһау һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың туҡыма һәм буҫтау халаттары ҡабырғаларында уйымға оҡшатып яһалған семәрләп ҡайылған өҫкә ҡалҡып торған мөйөш йәки арка формаһындағы нағыш осраҡлы түгел. Ул ҡайһы бер төрки күскенселәрҙә Урта Азия халыҡтарының ҡәҙимге кейемдәре йоғонтоһонда киң таралған (шул иҫәптән башҡорттарҙа ла) урта быуат традицияларына ауаздаш. Башҡорттарҙа кейем биҙәгәндә бөтә билдәле техник алымдар һәм орнаменттар ҡулланылған. Ҡайһы бер нағыштар (мөгөҙгә оҡшаш ҡайыу һәм аппликация) Урта Азияныҡыларға яҡын, ҡайһылары (мөһөрҙәр) Себер орнаменталь сәнғәтенең боронғо ҡатламдарынан башланғыс ала.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КӨНАУАЗ*

**Бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар самаһы элек Ер йөҙөндә бығаса кешелек белмәгән СПИД (Синдром приобретенного иммунодефицита) тип аталған сир пәйҙә булып, уға ҡаршы бер ниндәй ҙә сара таба алмағас, уны тик профилактикалау мөмкин, тигән ҡарарға килделәр. Ышаныслы профилактик сара, әлбиттә, тиҙ табылды, хатта ике төрлө! Был "дарыуҙарҙы" илебеҙҙә юморға бай кешеләр ошолай тип атаны: беренсеһе - "Спидома", икенсеһе - "Спиодин".**



# ТУҒАНДАРҘЫҢ...

## һағынған сағы

Әлеге COVID-19 тип аталған сир барлыҡҡа килгәндән һуң һәр телепрограммала рекламаланған яҙыуҙар бер аҙ ана шул дәүерҙе хәтерләтеп ҡуя. Был яман сирҙе лә дауалау өсөн әлегә махсус дауа табылмаған, әммә профилактик сараларҙың атамалары илебеҙҙә әле бер, әле икенсе телдә йә ике телдә лә бер юлы яңғырап тороуы тынысландыра. Үҙәк телевидениела ул "Сидидома" тип аталһа, БСТ-ла - "Домаяҡшыраҡ". Ә беҙҙең Сибай телевидениеһы уны "Тышҡанеходи" тип атаған. Башта иҫкә алған ВИЧ инфекцияһының профилактик саралары бөгөнгө көнгәсә иң ышаныслыһы булып, үҙен аҡлап килгән һымаҡ, әлеге коронавирустан да бына ошо саралар ярҙам итер, тип өмөт ителә. Ҡыйын булһа ла, матур ҡояшлы яҙғы көндәрҙә тышҡа сыҡҡыбыҙ килһә лә, мөмкин тиклем әлегә өйҙә булырға тырышайыҡ инде, ҡәҙерле туғандар.

Туғандар, тигәндәй, хатта бер ҡалала йәшәгән яҡын туғаның менән дә айҙар буйы осраша алмау, бер яҡтан - ифрат ауыр. Әммә туғандарыңды һағыныу хистәре ошо арала уяныуының да ҡәҙерен беләйек. Бер ғаиләлә йәшәп, бергә үҫеп килгән дәүерҙә, унан бер-береҥ менән йыш ҡына күрешә алған мәлдәрҙә теге йәки был туғаныңдың ни тиклем ҡәҙерле икәне хаҡында әллә ни уйланмайһың. Ә инде әҙме-күпме оҙайлыраҡ ваҡытҡа алыҫҡа китеүеҥ була, шунда уҡ был яҡындарың һағындыра башлай. Сирек быуат тирәһе илдән ситтә йәшәгән кеше булараҡ, бындай хистәр миңә ифрат та таныш. Бөгөнгө көндә тап ана шуның һымағыраҡ тойғолар бер мине генә биләп алмайҙыр ул. "Араларҙың алыҫлығын кем яҡынайта?" тип элегерәк "Почтальон" йырын йырлай торғайныҡ. Бөгөнгө көндә бына ошо сир, киреһенсә, беҙҙең араларыбыҙҙы байтаҡ ҡына алыҫайтып тотоп торған һымаҡ. Бер-береҥ менән телефон аша хәл белешкән булаһың да ул, әммә, урыҫтар әйтмешләй, был барыбер - не то... Эйе, ел һәр саҡ караптар теләгән яҡҡа ғына иҫмәгәндәй, тормош та гел генә беҙ теләгәнсә бармай. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәләнең эштәренә риза булып, сабырлыҡ ҡылып, Уның фәҡәт Үҙенән генә ярҙам һорап йәшәйек. Раббыбыҙҙың һәр эшендә ниндәйҙер хикмәт бар. Ниндәй хикмәт икәнен беҙ бер ҡасан да белә алмаясаҡбыҙ. Шундай бер фәһемле хикәйәт иҫкә төшә: "Борон бер егет ҡырға сыҡҡанда ҡырағай ат күреп ҡала һәм уны ҡороҡлап тотоп, өйөнә алып ҡайта. Күршеләре был егеттең атаһына: "Ҡалай яҡшы, хәҙер атлы булдың", - ти икән. Ә аҡһаҡал быға: "Әллә инде, яҡшымы-насармы..." - тип кенә яуап бирә. Бер нисә көндән әлеге атты өйрәтергә маташҡан егет, йығылып, аяғын һындыра. "Улыңдың ат алып ҡайтыуы насарға булған икән..." - ти күршеләре. "Әллә инде, насарғамы, яҡшығамы..." - ти ҡарт тағы. Күп тә тормай, илдә һуғыш сығып китеп, бар йәш егеттәрҙе хеҙмәткә саҡыртып, һуғышҡа алып китәләр. Күптәре һәләк була. Ә аяғы һынған булыу сәбәпле ҡарттың улы әрмегә бармай ҡала. "Улыңдың аяғы һыныуы яҡшыға булған икән, шулай ҙа", - ти тағы күршеләре. "Әллә инде, яҡшығамы-насарғамы..." - тип яуаплай аҡһаҡал".

Бөгөн, бөтә донъяға ана шул тажлы микроб һөжүм иткәндә, күптән түгел генә дошманлашып, миллионлаған кешене бер нисә секундта юҡ итерҙәй ғәйәт көслө йәҙрә ҡоралын бер-береһенә тоҫҡап торған бәғзе ҙур дәүләттәрҙең пандемияға ҡаршы мобилизацияланып, ниндәйҙер кимәлдә татыулаша, хатта бер-береһенә ярҙам итешә башлауы, ысынлап та, бәлки, яҡшығалыр ҙа. Башта иҫкә алған ВИЧ инфекцияһы ла, моғайын, әллә күпме кешене зина гонаһынан ҡотҡарып алып ҡалғандыр, тип ышаныла... Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм, ниндәй генә ауырлыҡтар килеп тыуғанда ла: "Әлхәмдүлиллаһи ғәлә күлли хәл" (Һәр хәлдә лә Аллаһҡа маҡтау) тип зекер әйтергә ҡушҡан. Сабырлыҡ ҡылғаныбыҙ өсөн Раббыбыҙ әжерен ҡайтарыуына өмөт итәйек. Шул уҡ ваҡытта, һәр төрлө йоғошло сирҙәр, бөжәктәр һәм башҡа теләһә нимәнән һаҡланыу өсөн Аллаһ илсеһе ошолай тип доға ҡылырға ҡушҡан хәҙис бар: "Әғүҙү би-кәлимәтиллаһи-ттәмәти мин шәрри мә халаҡ" (Аллаһтың гүзәл һүҙҙәренә Ул барлыҡҡа килтергән нәмәләренең яуызлығынан һыйынам!). Сахих хәҙистәр йыйынтығынан алынған бына ошо ҡыҫҡа ғына доғаларҙы ятлап алып, һәр саҡ уҡып йөрөү кәрәк. "Мин бер сирҙе лә уға ҡаршы сараһыҙ барлыҡҡа килтермәнем", тип Раббыбыҙ әйткәне хаҡында ла Уның илсеһе беҙгә еткергәнлеген беләйек.

Бына шулай, ҡәҙерле туғандар, үҙебеҙҙе үҙебеҙ хәстәрләргә лә онотмайыҡ, хөкүмәтебеҙҙең талабын - үҙ сикләү ҡағиҙәләрен дә тотайыҡ. Иң мөһиме - төшөнкөлөккә бирелмәйек. Был пандемия ла үтеп китер, ин шәә Аллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ШУЛААЙ...*

# АУЫЛЫМДЫҢ...

## шахтер ҡыҙҙары

**Ҡәһәрле һуғыш йылдары Урал улдарын ғына түгел, ҡыҙҙарын да тәрән шахтаға төшөргә мәжбүр итә. Һуғыш башланғас, Учалы райкомы ҡарары менән Миндәк ҡасабаһы тирәһендә урынлашҡан ауылдарҙан 14-17 йәшлек мыҡтыраҡ кәүҙәле, таһыл һәм сос ҡыҙҙарҙы һайлап алып, рудникта төрлө эштәр башҡарырға ҡушалар.**

Быуындары ныҡынып та өлгөрмәгән йәп-йәш ҡыҙҙар кәйлә, көрәк, балға менән алтынлы руданы соҡоп, бер тәгәрмәсле арбаға (тачкаға), аҙаҡ вагонеткаға тейәп, шахтанан сығарғандар. Хөкүмәткә күберәк алтын тапшырып, фашисты тиҙерәк тар-мар итеп, Еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн көнө-төнө эшләгәндәр улар шулай. "Бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелмәнек", - тип һөйләй торғайны Хөснә әбейем. "Эштән арыһаң да, устарыбыҙ ҡабарып, тәндәребеҙгә таш ярсыҡтары ҡаҙалыуға ҡарамаҫтан, смена һайын эш аҙағында бер кило һоло менән бер буханка икмәкте әсәй-туғандарға, өйгә алып ҡайтыу беҙҙең өсөн оло ҡыуаныс була ине", - тип таш ярсығы ултырған күҙен йәшләндереп иҫкә ала ине Әминә әбей.

Бына улар - тыл батырҙары, Ғәлиәхмәр ауылы ҡыҙҙары һәм килендәренең исем-шәрифтәре: Һәҙиә Азаматова (Шәйәхмәтова), Мөнирә Баталова (Мәғәфүрова), Нәзирә Ғәлина, Йәнүзә Зиннурова (Йылҡыбаева), Әминә Ишбаева (Мөхәмәтова), Ғәлимә Ишбаева (Иҫтамғолова), Зәлифә һәм Нәғимә Кинйәбаевалар, Фәриҙә Ҡунаҡбаева (Мәғәфүрова), Рәшиҙә Ғимранова, Закира Мөғәллимова, Сәкинә Ноғоманова, Мәрхәбә Нафиҡова, Талиба Талипова, Фәриҙә Фәхретдинова, Ғәҙәнә Әхмәтова (Заһирова), Хөснә Әйүпова (Ибраһимова), Талиба Ямалетдинова. Күпме ауырлыҡтар кисереп, Еңеүгә тос өлөш индергән был ҡатын-ҡыҙҙар. Һуғыштан һуң бөтәһе лә ғаилә ҡороп, намыҫлы ул-ҡыҙҙар тәрбиәләне. Уларҙың да байтағы Учалы, Миндәк, Сибай йә Ҡаҙағстан рудниктарында эшләне.

**Нәҡип ӘЙҮПОВ.**

**Учалы районы Ғәлиәхмәр ауылы.**

**✓ XII быуаттың билдәле ғәрәп географы Мөхәммәт әл Иҙриси ҡырғыҙҙарҙың 4 ҡалаһы булыуын да телгә ала: был ҡалалар уның картаһында Хирхиз, Нашран, Хакан Хирхиз һәм Даранд Хирхиз тип исемләнә.**



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ҠЫРҒЫҘ, ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТ



Ҡытай империяһы һәм Ҡырғыҙ ханлығы араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләү мәсьәләһе менән Тан императоры Тай-цзун (627-649 йй.) үҙе шөғөлләнә. Ул тәүҙә үҙенең илсеһенә ҡырғыҙҙарҙы "тынысландырыу" бурысын ҡуйһа ла, ҡырғыҙ ханын ҡабул иткәндән һуң Цзянь-кунь, йәғни Ҡырғыҙ генерал-губернаторлығын ойоштора. Әлбиттә, бөйөк император Ҡытайҙы донъя үҙәге һәм варварҙар өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе дәүләт итеп танытыу маҡсатын ҡуя, шуға күрә башҡа дәүләттәрҙе үҙенең вассалдары итеп ҡарай. Тикшеренеүсе Г.П. Супруненко ошо хаҡта былай тип яҙа: "Ҡытай дипломатияһы күҙлегенән ҡарағанда, ҡырғыҙҙар йәшәгән территорияла генерал-губернаторлыҡ булдырыу уларҙың Ҡытай империяһына буйһоноуын күрһәтеү өсөн башҡарыла. Ысынбарлыҡта Тан империяһы ҡырғыҙ биләмәләрендә реаль власҡа эйә булмай. Тап шулай уҡ башҡа илдәр хакимдарының титул алыуы ла ниндәйҙер бурыстар йөкмәтеү менән бәйле булмай һәм уларҙың власын бер нисек тә сикләмәй". Ысынлап та, Ҡытай үҙе төркиҙәргә ҡаршы көрәштә ҡырғыҙҙарҙы союздаш итергә тырышып, Енисей үҙәненә илселек ебәрә.

682 йылда төрки принцы Ҡотлуғ Ҡытайға ҡаршы баш күтәрә, Көнсығыш Төрки ҡағанатын тергеҙеп, үҙен Илтериш ҡаған (ил тергеҙгән ҡаған), тип иғлан итә. Тап шул осорҙа ҡырғыҙҙар төркиҙәргә ҡаршы булған коалиция составында ҡала. Күлтегингә арналған Ҙур ташъяҙмала ошо хаҡта ла мәғлүмәт бар: "Уң яҡтан (көньяҡта) табғач халҡы дошман ине, һул яҡтан (төньяҡта) Баз ҡаған ҡулы аҫтындағы туғыҙ-уғыҙ халҡы дошман ине, ҡырғыҙҙар, ҡурыҡандар, "утыҙ татарҙар", ҡытай һәм татабтар барыһы ла дошман ине..."

Төркиҙәр Баз ҡағанды үҙҙәренең төп дошманы, тип ҡарап, 688 йылда уға ҡаршы хәрби экспедиция ойоштора, ошо һуғышта туғыҙ-уғыҙҙарҙың хакимы һәләк була. Әммә ошо саҡта ла ҡырғыҙҙарҙың хәрби яҡтан ҡеүәтле булыуын иҫәпкә алып, улар менән килешеү табыу юлы һайлана: ҡырғыҙ хакимы Барс бек ҡаған итеп таныла, ошо айҡанлы уға Ашин йорто принцессаһы ҡатынлыҡҡа бирелә. Күлтегингә арналған Ҙур ташъяҙмала былай тип әйтелә: "... Барс бег бар ине; беҙ ул шарттарҙа уға ҡаған титулын бүләк иттек һәм уға ҡатынлыҡҡа минең кесе һеңлемде - кенәз ҡыҙын бирҙек..."

Әммә ҡырғыҙ ҡағанын төрки ҡағанына тиңләү уның юғары шөһрәт ҡаҙаныу хаҡындағы ниәттәрен көсәйтеүгә сәбәп кенә була. Барс бек ҡаған төркиҙәргә ҡаршы яңы союз төҙөү маҡсатында Ҡытайға илселек ебәрә. Тоньюкуҡҡа арналған яҙмала ошо хаҡта былай әйтелгән: "Табғач халҡының ҡағаны беҙҙең дошманыбыҙ ине. "Ун-уҡ" халҡы ҡағаны беҙҙең дошманыбыҙ ине. Әммә ҡырғыҙҙарҙың көслө ҡағаны ҙурыраҡ дошманыбыҙ ине. Ошо өс ҡаған, фекерләшеп, әйттеләр: Алтун еренә поход менән барайыҡ әле. Шулай тип уйланылар һәм әйттеләр: көнсығышҡа төрки ҡағанына ҡаршы походҡа барайыҡ әле. Әгәр уға ҡаршы бармаһаҡ, нисек кенә булмаһын, ул беҙҙе еңәсәк: уның ҡағаны - баһадир, ә уның кәңәшсеһе - аҡыллы, нисек кенә булмаһын, беҙҙе еңеүсе булыуы бар. Өсәүләп беҙ берләшәйек һәм поход менән барып, уны юҡ итәйек..."

Әммә төркиҙәр дошмандарының берләштерелгән походы башланыуын көтөп тормайынса, уларҙы берәмләп тармар итергә ҡарар итә. Билге ҡағанға арналған ташъяҙмала шулай әйтелә: "Ә егерме етелә ҡырғыҙҙар менән һуғыш алып барҙым мин. Һөңгө тәрәнлегендәге ҡарҙарҙы үтеп, Тауҙарға күтәрелдем мин, Кёгмен тайғаһын Үттем - дошманыма һөжүм иттем, ул йоҡлаған саҡта. Алышҡа инеп һәм Сунгела улар ҡағанын үлтереп, Ҡырғыҙ илен төрки ҡағанатына индерҙем мин".

Ҡырғыҙ илен Төрки ҡағанаты составына ҡайтанан индереү уның дәүләтселеген юҡҡа сығармай. Дәүләт башлығы итеп Барс бектың улы, Билге ҡағандың ҡәйнеше ҡуйыла. 745 йылда Көнсығыш Төрки ҡағанаты туғыҙ-уғыҙҙарҙың һөжүме һөҙөмтәһендә тарҡалыуға дусар була. Элегерәк төркиҙәргә ҡаршы сыҡҡан кеүек, туғыҙ-уғыҙҙарға ҡаршы сығыусылар иҫәбендә байтаҡ ҡына ҡәүемдәр - татарҙар, ҡытайҙар (кидандар), чиктар, карлуктар, ҡырғыҙҙар була. Бер нисә хәрби операция һөҙөмтәһендә уйғыр (туғыҙ-уғыҙ) ҡағаны Моюнчур дошмандарын еңеүгә өлгәшә, ә ҡырғыҙ хакимдары артабан ҡаған титулын алыуҙан мәхрүм ителә.

795 йылда уйғырҙарҙың хакимлыҡ итеүсе Яглакарҙар династияһы өҙөлә, эдиз ҡәбиләһе кенәзе Ҡотлуғтың ҡаған вазифаһын алыуы менән, ҡырғыҙҙар баш күтәрә. Ҡарабаласағун яҙмаһы былай тип бәйән итә: "Элек төньяҡтағы Ҡырғыҙ дәүләте 400 мең самаһы кереш тарта ине (шул тиклем яугиры булған. - **Ред. иҫк.**). Уларҙың (уйғырҙарҙың. - **Ред. иҫк.**) ҡағаны бала саҡтан батыр, ҡыйыу, аҡыллы һәм ҡурҡыу белмәс, һуғышсан, үтә лә көслө булды. Бер атыуҙан уғы сәпкә тейә ине. Ҡырғыҙ ҡағаны (уның) уғын осратты һәм һәләк булды. Аяуһыҙ күп һыйыр һәм аттар ҡулға төштө. Ҡорал тауҙай өйөлөп ятты. Уларҙың дәүләте юҡ ителде".

Әммә ошо еңелеү ҙә ҡырғыҙҙарҙың рухын һындыра алмай, улар уйғырҙарға ҡаршы баш күтәреү өсөн уңайлы мәлде көтөп кенә тора. "Тан шу" хроникаһында ошо хаҡта ла мәғлүмәт бар: "...Хойху көсһеҙләнә башлағас, Ажо үҙен хан, әсәһен - ҡыҙ сағындағы Туцишины - тол ханша, ҡатынын, Гэлу-шеху ҡыҙын - ханша, тип иғлан итте. Хойхус ханы министрын ғәскәр менән ебәрҙе, әммә быныһы унышҡа өлгәшә алманы. Хан егерме йыл буйына һуғыш алып барҙы. Ажо, еңеүҙәренән тәкәбберләнеп, әйтте: "Һинең яҙмышың тамам булды. Мин тиҙҙән һинең алтын урҙаңды алырмын, уның алдында үҙемдең атымды ҡуйырмын, байрағымды элермен. Әгәр минең менән ярыша алһаң, хәҙер үк килеп ет; булдыра алмайһың икән, тиҙерәк кит бынан". Хойхус ханы һуғышты дауам итә алмай ине".

Уйғыр ҡағанатын өҙгөләгән үҙ-ара һуғыш-тартыштар ҡырғыҙҙарға өҫтөнлөк алыу мөмкинлеген бирә. 840 йылда уларҙың 100 меңлек ғәскәре ҡағанатҡа бәреп инеп, уның баш ҡалаһы Орду-Балык янында дошмандарын тар-мар итә. Уйғырҙар ҡағанаттың көнбайыш тарафтарына (Көнсығыш Төркөстанға) сигенеп, унда яңы дәүләткә нигеҙ һала. Уйғыр ҡағанаты тар-мар ителеү менән, академик В.В. Бартольд әйткәнсә, "ҡырғыҙ бөйөк державасылығы эпохаһы башлана".

IX быуат урталарына Ҡырғыҙ ҡағанаты бик киң территорияны биләп тора. "Тан шу" хроникаһында былай тиелә: "Хягас (Ҡырғыҙ. - **Ред. иҫк.**) көслө дәүләт ине; күләме буйынса тукюес биләмәләренә (Төрки ҡағанатына. - **Ред. иҫк.**) тиң. Тукюес Йорто үҙенең ҡыҙҙарын уларҙың старейшиналарына бирә ине. Көнсығышҡа табан - Гулиганиға (Байкал ҡурыҡандарына. - **Ред. иҫк.**), көньяҡҡа - Тибетҡа, көньяҡ-көнбайышҡа - Гэлолуға тиклем йәйрәп ята".

Ҡырғыҙ экспансияһы оҙаҡ дауам итмәй, сөнки улар үҙҙәре яулаған территорияларҙы көсләп тотмай, унда күсеп тә китмәй. Бындай хәлдәр тарихта һирәк осрай: яулап алыусы ҡәүем үҙ табышынан үҙе ваз кисеп, тыуған төйәгенә ҡайтып йәшәүҙе хуп күрә. Был хаҡта популяр тарихсы Л.Н. Гумилев шулай яҙа: "Уңдырышлы Минусин уйһыулығында ултыраҡ тормошҡа яраҡлашҡан ҡырғыҙҙар монгол далаларын бары тик хәрби батырлыҡ күрһәтеү, һуғыш табышына эйә булыу майҙаны итеп ҡарай ине. Ҡырғыҙ ғәскәре менән уйғыр төйәктәре араһында буш далалар башланғас, ҡырғыҙҙар өсөн һуғыш файҙаһыҙға әйләнә һәм аҡрынлап һүнә бара..."

Ҡырғыҙҙар хаҡында мосолман авторҙары (ғәрәп һәм фарсы) - географтар, тарихсылар, сәйәхәт ҡылыусылар бик ентекле мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған.

XII быуаттың билдәле ғәрәп географы Мөхәммәт әл Иҙрисиҙең ҡырғыҙҙарҙың яулап алыу походтары тамамланып, Енисей үҙәненә ҡайтып йәшәгән осорон тасуирлаған үтә ҡыҙыҡлы яҙмалары табылған. Ул биргән мәғлүмәткә ярашлы, ҡырғыҙҙар туғыҙ-уғыҙҙарҙан көнсығышҡа табан булған тарафтарҙа йәшәй, уларҙан төньяҡтараҡ кимаҡтар, көньяҡта - ҡытайҙар була. Бындай геоэтник бүленеш X быуатҡа ҡарай. Ғәрәп географы ҡырғыҙҙарҙың 4 ҡалаһы булыуын да телгә ала: был ҡалалар уның картаһында Хирхиз, Нашран, Хакан Хирхиз һәм Даранд Хирхиз тип исемләнә. Ошо хаҡта әл Иҙриси бына нисек яҙа: "Ҡырғыҙ батшаһы йәшәгән ҡала ныҡлы стена, тәрән соҡор һәм ҙур ҡойма менән уратып алынған ҡәлғәнән ғибәрәт... Ҡырғыҙ иленең (аль-Хирхизийа) бар ҡалалары ла бер тарафта булып, уның территорияны өс көнлөк юл менән үлсәнә. Барыһы дүрт ҡала: улар ҙурҙар, стена һәм ҡәлғә төҙөлмәләре менән уратылған. Унда йәшәүсе халыҡ тәүәккәл, көслө һәм ярһыу. Бөтәһенән дә бигерәк улар Кимакийа батшаһынан һаҡланалар, сөнки ул күршеләре, шул иҫәптән, Ҡырғыҙ иле менән дә дошман булған баҫып алыусы булып тора. Унда ат, һарыҡ, эре мөгөҙлө малдар аҫрала. Аттары ҡыҫҡа муйынлы һәм һимеҙҙәр. Уларҙы һуғымлыҡ итеп ашар өсөн һимертәләр. Күпселек эштәрҙә һәм күсеп йөрөүҙә эре мөгөҙлө малдар ҡулланыла".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 15, 18-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар китте һуғышҡа

Дивизияға килгәндән бирле М.М. Шайморатов бындай кәңәшмә үткәргәне юҡ ине әле. Был осрашыуҙа һүҙ фәҡәт мораль-политик темаға барҙы. Комдив һүҙен шулай башланы:

- Кисә беҙ бик мөһим кәңәшмәлә булдыҡ, даими политик эш аша личный составтың әхлаҡ, рухи кимәлен күтәрергә, берҙәмлекте, ойошҡанлыҡты, аңлы дисциплинаны, юғары патриотик тойғоларҙы көсәйтергә кәрәк. Беҙ шуға ирешергә тейешбеҙ, - тине ул. - Шунһыҙ һан яғынан, ҡорал яғынан өҫтөнлөк тә, ҡоралды яҡшы белеү ҙә еңеүгә килтерә алмай!

Бөгөн политруктар әҙерләү буйынса фронт курстарына беҙҙең полктан өс кеше оҙатылды.

Кисен яңы төҙөлгән полк мәктәбе курсанттарының йыйылышын үткәрҙек. Улар юғары аңлы, алдынғы егеттәрҙән һайлап алынғайны. Бына ул егетттәр: эскадрондарҙан - Фәиз Нафиков, Харрас Ситдиков, Әбделәхәт Иҫәнголов, Фазулла Зәйнуллин, Ғибаҙулла Хәлилов, Мәхмүт Хафизов, Хәнәф Хөсәинов, Йәнмырҙа Сәлимов, Әхмәтғәрәй Байғужин, Ғәләм Сәлихов; Мәһәҙи Иҙрисов (ПТР-ҙан), Насир Булдашев, Шәйхи Әминев, Вәли Хәсәнов, Хәнәфи Аҡҡәбәков, Ғәлиәскәр Көсәпҡолов, Ғәли Сираев, Миңнеғол Арыҫланов, Нурғәли Рысбаев, Лотфулла Әминев, Сәғит Хафизов, Хәниф Юлдашев, Мансур Исмәғилев, Абдрахман Әбүзәров, Миңнеяр Мөсәлимов, Ғәлимйән Шәрәфетдинов, Закир Насибуллин, Ҡотдос Абдуллин, Миңнеғәли Абыҙгилдин, пулеметсыларҙан - Сафый һәм Миңнеәхмәт Ғибаҙуллиндар, Ғиниәт Фәхретдинов, Ғәлиәхмәт Сәйфуллин, Мөхәммәтшәриф Хоҙайбирҙин, Ғәзизйән Ҡотдосов, Рәшит Сәлимов, полк батареяһынан - Барый Мөхәмәтов, Барый Ғибәҙуллин, Исмәғил Әбүталипов, Зәкәриә Ишкулов, Әхмәт Мәмбәтов, Хәҙҙәт Булатов, Варис Нәбиуллин, Латип Кәримов, Ғәлимйән Ихсанов, Ихсан Ғафаров һ.б., минометсыларҙан - Харис Хәмитов, Кәшфулла Ғиззәтуллин, Сәлим Шугаев, элемтәселәрҙән - Нәзиф Ғәниев, Хөббулла Әмиров, Мөхәмәтйән Ильясов, Зәйнулла Ҡорманғужин, Мансур Вәлиев, сапер Сәфәр Ғабдрахманов һәм башҡалар".

1942 йылдың йәйенә немец оккупанттары Көнсығыш фронтында яңы һөжүм әҙерләй. Улар фронттың көньяҡ ҡанатында, Воронеж һәм Сталинград йүнәлешендә, һан һәм техника яғынан хәл иткес өҫтөнлөккә өлгәшеп, Совет илен уның көньяҡ өлөшөнән, нефтҡә бай Кавказдан мәхрүм итеү маҡсатын ҡуя. 1942 йылдың май һәм июнь айҙарында ошо йүнәлештәге һуғыш хәрәкәттәренә немецтарҙың өр-яңы, баштан аяҡ ҡоралланған 25 дивизияһы йәлеп ителә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Ошо алышта немец илбаҫарҙарының техникаһын юҡ иткәне өсөн атайым III дәрәжә Дан орденына күрһәтелә, әммә ҡаты яраланыуы һөҙөмтәһендә наградаһын алып өлгөрмәй, тылға оҙатыла.***



# ҺУҒЫШ ЕЛЕ...

## беҙҙең ғаиләләргә лә ҡағылған

**Ниндәй генә һынауҙар үтмәгән ил өҫтөнән: аслығы ла, баҫҡынсылығы ла, ҡырғыны ла, һуғышы ла. Ләкин барыбер тормош дауам итә. Быйыл, ҡурсаланыуҙа ултырыуға ҡарамаҫтан, тағы ла Еңеүле май етте. Йырҙа йырланғанса, ул йәшкә мансылған оло байрамыбыҙ, сөнки донъяны фашизм ҡоллоғонан азат итеүҙең хаҡы - миллионлаған ҡорбан ителгән ғүмерҙәр менән баһалана. Рәсәйҙә Бөйөк Ватан һуғышы ипкене ҡағылмаған бер генә ғаилә лә юҡтыр, моғайын... Гәзит уҡыусыларыбыҙҙың яуаптары ла ошо хаҡта һөйләй.**

***Рөстәм ҒАТАУЛЛИН, Мәсетле районы:*** "Ҡабат һуғыш ҡына булмаһын, уландар!" - тип Нурыйәхмәт ҡартатайым бик йыш әйтә ине. Атайымдың атаһы 1895 йылғы, оло йәштә булыу сәбәпле һуғышҡа 1941 йылда алына. "Максим" пулеметы расчетында ул беренсе номер, ә ауылдашы һәм кейәүе Сабирйән Хәйбуллин икенсе номер була. Улар уҡсылар дивизияһында алғы һыҙыҡта һуғыша. Алыш ваҡытында немецтар тәү сиратта пулемет расчетын сафтан сығарырға тырышҡан, уларҙы маҡсатлы рәүештә миномет утына тотҡан. Ошондай бер һөжүм ваҡытында ҡартатайым окопка сүгәләп өлгөрмәгән, уның янында ғына шартлаған минанан ныҡ яраланған. Ярты йыл госпиталдә ятҡандан һуң, 1942 йылдың яҙында, ауылға ҡайтҡан. Һыңар ҡулының ҡулбаштан түбән һөйәге юҡ, мускулдарҙа ғына аҫылынып тора ине. Ҡабырға аша ҙур мина ярсығы үткән, арҡаһы ваҡ ярсыҡтар менән тулған. 60-сы йылдарға тиклем ул ярсыҡтар тәндән аҡрынлап сыҡҡан. "Ниместе беҙ ике һалдатҡа бер мылтыҡ, унар патрон менән еңдек бит ул" - тип һөйләгәне, "Снайпер" фильмын ҡарағас, ҡылт итеп иҫкә төшкәйне. Һуғыштан ҡайтҡас, ферма мөдире, бригадир булып эшләгән. Көслөрәк ҡатындарҙан, өлкәнерәк үҫмерҙәрҙән "теневой" бригада төҙөп, төндәрен Әй йылғаһында йылым менән балыҡ һөҙҙөрткән. Уны ауыл халҡына таратҡан, күрше урыҫ ауылдарында картуфҡа һәм онға алмаштырған. "Шулай ауылды аслыҡтан ҡотҡарып ҡалды ҡартатайың", - тип күрше бабай һөйләгәйне.

Әсәйемдең атаһы, Рамазан ҡартатайым да оло йәштә була, һуғышҡа 1943 йылда алына. "Һуғыштың ҡыҙған мәлендә китәм, ҡайтыуҙары икеле", - тип әйтеп киткән. Шул уҡ йылдың йәйендә "Хәбәрһеҙ юғалды" тигән хат килгән. 90-сы йылдарҙа нәшер ителгән "Хәтер китабы" аша ғына Рамазан ҡартатайымдың юғалмағанын, ә 1944 йылда Польшала вафат булыуын белдек. Һуңынан, Оборона министрлығы архивтарын интернетҡа һалған осорҙа, уның юғалыу һәм вафат булыу тураһындағы документтарын эҙләп таптым. Һуғыш яланында ҡайҙа ерләнгәнен, һуғыштан һуң ҡайҙа күсерелгәнен асыҡланым. 2017 йылда Казимиж Дольны ҡалаһындағы совет һалдаттары ерләнгән мемориалға барып, Рамазан ҡартатайымдың ҡәберенә Башҡортостан тупрағын һалып ҡайттым. Ундағы исемле һәр ҡәберҙе фотоға төшөрҙөм, Башҡорт Википедияһында мемориал тураһында мәҡәлә яҙып, фотоларҙы шунда ҡуйҙым. Казимиж Дольнылағы ҡәберлектә 8676 мәйет ерләнгән, ә Польшала ундай дөйөм ҡәберлектәр ҡырҡтан ашыу. Улар ерле хакимиәт ҡарамағында, бик матурлап тәрбиәләйҙәр. Ә үҙ илебеҙҙә һалдат мәйеттәрен яу яланынан йыйып бөтмәгәнбеҙ әле, шуныһы ҡыҙғаныс.

Аталары һуғыштан ҡайтмағандарға был һуғыш икеләтә-өсләтә ауыр булған. Улар үткән һуғыштың тере ҡорбандары. Үкһеҙ етем үҫкән әсәйемдең әсенеп һөйләгәндәрен бәйет итеп яҙғайным.

***Һуғыш ҡорбаны бәйете***

*Етмеш биш йыл үтте быны,*
*Ҡәһәр һуғыш бөткәненә,*
*Бөтмәгән шул, минең өсөн*
*Әле һаман дауам итә.*
*Һәр йыл һайын Еңеү яҙын*
*Ҡабат халыҡ байрам итә,*
*Ә мин һүнмәҫ өмөт менән*
*Әтейемде яуҙан көтәм.*
*Бәғзе берәү майҙандарҙа,*
*"Ҡабатларға!" - оран һала.*
*Һорағанмы ҡорбандарҙан,*
*Еңеү хаҡы күпме тора?*
*Эй, кешеләр, байрамдарҙы*
*Сама менән байрам итең,*
*Иҫәбе юҡ етемдәрҙең*
*Һүҙен һеҙгә бәйән итәм.*
*Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ берҙә*
*Герман башлап һуғыш асҡан,*
*Барса халыҡ берҙәм булып*
*Ил һаҡларға яуға баҫҡан.*
*Һуғыш бит ул уйын түгел,*
*Аямаған кеше башын,*
*Етемдәрҙе зар илатып,*
*Ҡырған бит ул йәшен-ҡартын.*
*Оло йәшкә ҡарамаҫтан,*
*Әтейгә лә сират еткән,*
*Арҡаһына тоҡсай аҫып,*
*Ҡырҡ өстә яуға киткән.*
*"Һуғыштың бик ҡыҙған мәле,*
*Ҡайтыуҙары, һай, икеле,*
*Кеше ит, - тип, - балаларҙы",*
*Әнейгә ул васыят әйткән.*
*Ябай һалдат елкәһенә*
*Күпме яфа-михнәт төшкән,*
*Меңәр саҡрым йәйәү үткән,*
*Тиҫтәләгән йылға кискән,*
*Тик Висланы сыҡҡан саҡта,*
*Юрағаны юшҡа килгән,*
*Ҡорбан булған, әтекейем,*
*Ер ҡуйынын фатир иткән.*
*Төҫө лә юҡ хәтеремдә,*
*Сабый инем ул йылдарҙа,*
*Әтей ниндәй булғанын да,*
*Белдем күреп күршеләрҙә.*
*Әтекәйем, ник ҡайтманың,*
*Наҙға күмеп яратманың,*
*Байрамдарҙа күкрәк киреп,*
*Орден-миҙал сыңлатманың?*
*Ҡушҡаныңды үтәй алмай*
*Әней иртә үлеп китте,*
*Дүрт баланы - дүрт тарафҡа,*
*Әсе яҙмыш юлы илтте.*
*Һикһәнде лә уҙҙым инде*
*"Етем" тигән исем менән,*
*Ҡәһәр һуғыш беҙҙе лә бит*
*Тере килеш ҡорбан иткән.*
*Атайҙары ҡайтҡандарҙың*
*Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн.*
*Хөкүмәттән тамып тора,*
*Еңел инде донъя көтөү.*
*Ауыр булды үкһеҙҙәргә*
*Ғаилә ҡороп, мандып китеү,*
*Үҙебеҙҙе генә түгел,*
*Балаларҙы кеше итеү.*
*Ин ша Аллаһ, бирешмәнек,*
*Илгә тоғро хеҙмәт иттек,*
*Теймәй кеше өлөшөнә,*
*Ғәҙел генә ғүмер үттек,*
*Дәүләттән дә күрмәгәнде*
*Балаларҙан күрәмен.*
*Инәлмәйем, һорамайым,*
*Әммә теләк теләйем.*

*Оран һалған аңлаһын ул -*
*Киләсәктә һуғыштарҙы*
*Ҡабатларға яҙмаһын шул!*
*Ҡабатларға яҙмаһын!...*
*Һуғыш ҡорбаны бәйете*
*Етмеш биш юл көйләнде.*
*Яҙып алды ишеткәнде*
*Рөстәм - һалдат ейәне.*

***Иншар АСҠАРОВ, Стәрлебаш районы Үрге Аллағыуат ауылы:*** Ҡағылған тип кенә әйтеү бик дөрөҫ булмаҫтыр, өйөрмә кеүек үткән беҙҙең ғаиләнән был быуат ғәрәсәте... Беренсе булып өлкән ул, ҡатынын, балаларын ҡалдырып, Яһанур бабай китә фронтҡа, күп тә үтмәй похоронкаһы килә. 1942 йылда, Федоровка районының Юлдаш ауылында уҡытыусы булып эшләгән Хәсән бабайыма ла сират етә ил һаҡларға сафҡа баҫырға. Ул данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғыша, Сталинград өсөн барған һуғышта батырҙарса һәләк була... 1943 йылда 17 йәшлек Хөсәйен бабайыма ла повестка килә. Ул офицерҙар мәктәбендә уҡып сығып, 1944 йылда лейтенант дәрәжәһендә башлай үҙенең хәрби хеҙмәтен. Прибалтиканы, Белоруссияны азат итеүҙә ҡатнаша, Еңеү таңын Кенигсберг ҡалаһында ҡаршылай. Капитан дәрәжәһендә өйгә ҡайта.

Һуғыш башланғанда 50 йәше тулған олатайым Йыһангир ҙа трудармияла, Урал урмандарында еңеүгә үҙ өлөшөн индерә, 1947 йылда тыуған йортона әйләнеп ҡайтырға насип була...

Өләсәйем Зөлҡәғиҙә был йылдарҙа өс бәләкәй балаһы менән йорт йылыһын, усаҡ утын һаҡлай, колхоздың төрлө эштәрендә лә эшләй. Танкығамы, самолетҡамы тип, үҙенең барлыҡ биҙәүестәрен тапшыра, үҙенә бер нисә бөртөк кенә алып ҡала. Ҡыҙҙары кейәүгә сыҡҡанда шуларҙы берәмләп тарата. Бына шулай, Советтар Союзының меңдәрсә ғаиләләре кеүек, бер төптән, Еңеү өсөн көрәшә минең тоҡом. Мәңгелек Дан уларҙың бөтәһенә лә, беҙҙең яҡты киләсәк өсөн һаулығын, ғүмерҙәрен дә йәлләмәгән Совет иленең ябай ғаиләләренә!

***Миңһылыу АБДУЛЛИНА, Салауат районы:*** Атайым Фәссәхетдинов Фәйзрахман Фәссәхетдин улы 1943 йылдың мартында Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһына саҡырыла. III Украин фронты армияһы составында Украина ерҙәрен дошмандан азат итеүҙә ҡатнаша. Йәш сержант башта автоматсы, артабан пулемётсы булып хеҙмәт итә. Алты ай дауамында Әлкә хәрби часында хәрби күнекмәләр ала. Был осорҙо бик аяныс итеп хәтергә ала торғайны, сөнки унда буласаҡ яугирҙар аслыҡтан яфалана.

1943 йылдың сентябрендә 2 мең һалдатты Өфө станцияһынан теплушкаларға тейәп оҙаталар. Атайым, өлкән сержант, III Украин фронтына ҡараған 170-се уҡсылар полкы составында отделение командиры вазифаһында һуғыша. Днепр йылғаһы аша тимер юл күпере емерек хәлдә була. Ары-бире терәтелгән свайҙарҙа ғына торғанлыҡтан, бер юлы тик икешәр вагонды ғына сығарып булған. Юғалтыуҙар кисереп, ғәскәрҙе ҡаршы ярға сығарып бөтәләр. "Вагондарҙан төшөүгә, киҫәкләп, сей ит тараттылар. Кем нисек әтмәләштерә ала, шулай итеп ризыҡланы был өлөштәрҙе. Шул саҡ, ялтырауыҡ күк төҫкә буялған тәреле немец самолёттары килеп сыҡты һәм, утлы ямғыр менән ҡойондороп, осоп үтте. Күп кенә иптәштәр, алышта ҡатнаша ла алмай, һәләк булды", - тип хәтерләй торғайны ул.

Кәрәк булған һайын, окоптар ҡаҙып, оборонаға әҙерләнеп, өшөп-туңып, ҙур ауырлыҡтар менән үтәләр һалдаттар көҙгө юлды. Ҡыш тыны һиҙемләнһә лә, яугирҙарҙың күбеһенең өҫтөндә йоҡа гимнастерка, шинель һәм аяҡтарында обмотка була. 1943 йылдың 5 декабрендә атайымдың һул ҡалаҡ һөйәге аҫтына снаряд ярсығы инеп ултыра. Күп ҡан юғалтып өлгөргән 19 йәше менән барған йәш егетте Дружковка ҡаласығы госпиталенә алып киләләр. Дауаланып сыҡҡас, 15-се айырым мотомехбригада составында тағы алғы һыҙыҡҡа оҙаталар. Көньяҡ Украина, Молдова ерҙәрен дошмандан азат иткән Карпат-Днепр стратегик һөжүм итеү сиктәрендәге Одесса хәрби операцияһында ҡатнаша. Көньяҡ Буг йылғаһы ярында, Тирасполь ҡалаһы ҡаршыһында оборонала ятҡанда дауахананан һуң нығынып та өлгөрмәгән организм тағы бирешә. Яу-

гир ҡурҡыныс диагноз - үпкә плевриты менән тағы госпиталгә эләгә. Был юлы Одесса ҡала госпиталендә ярты йыл дауалана һәм табиптарҙың иҫ киткес ныҡышмаллығы арҡаһында ғына тере ҡала. Бигерәк тә йәһүд милләтле өлкән йәштәге табип әбейҙе йыйылы итеп хәтерләй торғайны. Атайым 1950 йылда, 7 йыл хеҙмәт иткәндән һуң, демобилизацияланған. 1951 йылда инәйем Сафия Нәғим ҡыҙына өйләнеп, беҙгә, биш балаға: минә һәм Әгзәм, Флорида, Альфрида, Гүзәл иркәләрмә ғүмер биргәндәр. Барыбыҙ ҙа педагогтар.

***Рәзиф ВӘЛИЕВ, Ҡырмыҫҡалы районы:*** Атайым Ғафуан Ғәлимйән улы Бөйөк Ватан һуғышына 18 йәше тулғас, 1942 йылда саҡырыла. I Украин фронты армияһында һуғыша, атлы разведкала хеҙмәт итә. Күп тапҡырҙар дошман тылына "тел" алырға бара. Бер ваҡыт разведкала немец офицерын ҡулға төшөрәләр, дошман атайыма ете тапҡыр сәнсеп өлгөрә, әммә яраланыуына ҡарамаҫтан, ҡанһырап булһа ла, офицерҙы үҙебеҙҙекеләр яғына һөйрәп алып сығалар. Ошо батырлығы өсөн "Каһарманлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ була. Ай ярым госпиталдә дауаланғандан һуң, ҡабат фронтҡа китә. 1943 йылда башы яралана һәм 4 ай дауаланғандан һуң ҡабат разведкаға түгел, ә артиллерияға төҙәүсе итеп ебәрелә.

1944 йылда Киев эргәһендәге һуғыштарҙа ул хеҙмәт иткән подразделение "Тигр"ҙар һөжүмен кире ҡаға. Ошо алышта немец илбаҫарҙарының техникаһын юҡ иткәне өсөн атайым III дәрәжә Дан орденына күрһәтелә, әммә ҡаты яраланыуы һөҙөмтәһендә наградаһын алып өлгөрмәй, тылға оҙатыла. Госпиталдә ете ай булғандан һуң, сәләмәтлеге буйынса демобилизациялана. Ә наградаһы уны 32 йылдан һуң эҙләп таба.

Тыуған Нуриман районының Бүләк ауылына ҡайтҡас, башҡолләй колхоз эшенә сума: ҡултыҡ таяғында булһа ла, 10 йыл дауамында "Ҡыҙыл Натис" хужалығын етәкләй. Һуңынан сауҙа өлкәһендә эшләй. Намыҫлы хеҙмәте өсөн бик күп Маҡтау ҡағыҙҙарына, "Совет сауҙаһы отличнигы" знагына лайыҡ була.

***Роза РӘСЕМБӘТОВА, Хәйбулла районы:*** Әсәйемдең атаһы Ишбулат ҡартатайым (Хәйбулла районынан) 20 йәшендә Темәс педучилищеһын тамамлап, уҡытып йөрөгән сағында 1939 йылда әрме сафына алына. Шунан һуғышҡа инеп китә. Кавалерия дивизияһына эләгә. 1941 йылда ҡылыс менән төшкән фотоһы буйынса, 74-се кавалерия дивизияһында булғандыр, тип фаразлайбыҙ. 1943 йылда радистар курсына ебәрелә. Гармунсыларҙы һайлап алдылар, тигән. Шулай Алыҫ Көнсығышҡа эләгә. Япония менән һуғышта ҡатнаша. Политрук була. Капитан званиеһы ала. 1947 йылда иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Кәримә өләсәйем менән биш бала үҫтерәләр. 50 генә йәшендә вафат була. Иң үкенеслеһе, уның тураһында мәғлүмәт юҡ тиерлек. Заманаһында әһәмиәтен аңламағанбыҙ, ти әсәйем. Миҙалдарын да һаҡламағандар.

Атайымдың әсәһе Тәнзиләгә (Дүртөйлө районы) һуғыш сыҡҡанда 9 ғына йәш була. Сибек кенә ҡыҙ ҙа тыл эшенә егелә. Ас булһаҡ та намыҫ менән эшләнек, ти ине. 12 йәшлек сағында өйҙәге туғандарына бер ус иген алып ҡайтырға була. Тикшереүсегә юлыҡҡас, ҡыҙсыҡ ризыкты тиҙ генә юл ситенә һибә, тик сепрәк моҡсандың тегелгән буйында ҡалған иген бөртөктәре өсөн хөкөм ителә. 6 ай подвалда һалдаттар өсөн кейем тектем, фронттағы атайым Сталинға хат яҙҙы, шунан ғына мине ҡайтарҙылар, тип һөйләр ине. Ул хат кем ҡулына эләккән, өлкән ҡартатайыбыҙ унда нимә тип яҙғандыр - беҙгә ҡараңғы. Ҡайтҡас та тылда эшләй. Һуңынан ФЗУ-ға эләгә. Шул ҡыҙ баланы йәлләп үҙәгем өҙөлә хәҙер. Ул ваҡытта шундай ҡаты тәртип тә кәрәк булғандыр инде. Ҡәртәсәйем зарланманы. Тырышып донъя көтөп йәшәне. Тыл ветераны булараҡ хөкүмәт хөрмәтен күрҙе.

***Фәнүә ФӘЙЗУЛЛИНА, Шишмә районы:*** Еңеүҙең 75 йыллығын байрам иткән көндәрҙә мин дә балалыҡ хәтирәләрем менән уртаҡлашып, атайым Юлдашбаев Шакирйән Шәйхислам улы тураһында бер кәлимә һүҙ әйткем килә. Ул 1908 йылда Шишмә районы Яңы Усман ауылында тыуған. 1934 йылда әсәйем Суфия менән өйләнешеп, беҙгә, өс ҡыҙына, ғүмер биргәндәр. Икеһе лә колхозда эшләгән. Атайым колхоз бригадиры, трактор бригадаһы бригадиры булған. Бик етеҙ, уңған кеше ине, тип иҫкә алалар уны. 1941 йылдың июль айында хәрби комиссариаттан атайыма саҡырыу килде. Уларҙы Авдон ауылында дүрт ай һуғышҡа әҙерләнеләр. Әсәйем йәше лә тулмаған һеңлемде, беҙҙе ҡалдырып, арбаға бесән, һалам төйәп, Авдонға 17 мәртәбә барҙым, тиеп һөйләй торғайны. Бер барыуында ул мине лә үҙе менән бергә алырға булды. Йөк башына ултырып, әсәй менән 50 км йыраҡлыҡтағы Авдон ауылына юлға сыҡтыҡ. Икенсе атта Насих ағай бара. Аҙаҡ ул да һуғышҡа китте, тик әйләнеп ҡайтманы. Авдонға кискә генә барып еттек. Йөктө бушатҡас, урамдан теҙелешеп килгән һалдаттарҙы күреп, ҡаршыларына сыҡтыҡ. Шул ваҡыт атайым йүгереп килеп, мине күтәреп алып үпте лә, яңынан иптәштәре янына йүгерҙе. Командирҙан бер минутҡа ғына сафтан сығырға һораған икән. Һуңғараҡ биш минутҡа һорап, тағы янтыбыҙға килде. Юлда тағы әллә күпме эҙалар күрһәк тә, атайым менән күрешеүҙән бик тә ҡәнәғәт булғаным хәтерҙә.

Апрель айында атайҙарҙың фронтҡа китәсәге тураһында хәбәр алдыҡ. Әсәй эштән ҡайтты ла шунда уҡ бешеренә башланы, төндә поезд үтәсәк Шөңгәккүл станцияһына киттек. Унда төнө буйы ултырҙыҡ, иртәгәһенә көндөҙгә 12-лә генә состав станцияға килеп туҡтаны. Вагондарҙан һалдаттар, улар менән бергә атайым да килеп төштө. Состав киске 9-ҙа ғына ҡуҙғалып китте. Атайымды һуңғы тапҡыр күреүем шул булды. Беренсе класҡа уҡырға барғас, фронтҡа, атайға көн дә тиерлек хаттар яҙа башланым. Атайымдан да өсмөйөшлә хаттар йыш килде лә, 1942 йылда ҡапыл туҡтаны. Ауыл советына уның хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында хәбәр килде. Һуңыраҡ атайымдан хаттар яңынан килә башланы. Ул еңелсә яраланыуы, госпиталдә дауаланыуы, миҙал алыуы тураһында яҙҙы. 1943 йылда тағы бәйләнеш өҙөлдө. 1944 йылдың йәйендә беҙҙең өйгә бер һалдат ағай килде. Әсәйем эштә ине. Ағай атайҙың фотоһын һораны. Мине күтәреп алып, урындыҡҡа баҫтырып, арҡамдан ҡағып яратты ла, сығып китте. Сентябрь айында был ағай ҡабат килде. Сталинград өсөн барған һуғышта атайҙың ҡаты яраланыуы, яҡында ғына ярҙам булмағас, өс сәғәт кукуруз һаламы өҫтөндә ҡанһырап ятыуы, "Иҫән ҡайтһаң, минең балаларҙы барып күр, арҡаларынан ҡағып ярат", тип васыят әйтеп, күҙҙәрен йомоуы тураһында һөйләне. Атайҙы Будерлиновка ауылында ерләгәндәр. Был ағай (исем-шәрифен белмәйем, Дәүләкән районы Мереҫ ауылында колхоз бухгалтеры булып эшләгәне тураһында ғына хәтерҙә) беҙгә атайымдың хәрби билетын, миҙал документын, ҡанлы фотоларҙы тапшырҙы. Ләкин был документтар әллә штабҡа барып етмәгән, әллә ҡанлы булып танырлыҡ булмаған, атай хәбәрһеҙҙәр исемлегендә тороп ҡалды шулай...

***Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА, Өфө ҡалаһы:*** Олатайым менән өләсәйемдең бер-бер артлы дүрт улы тыуып, бишенсе сабыйҙарын көткәндә олатайым: "Их, ҡыҙым булһа, ебәккә генә төрөп йөрөтөр инем!" - тип хыялланған. Уның әйткәне фәрештәләрҙең амин тигән сағына тура килгәнме - инәйем донъяға килгән. Ысынлап та, олатайым ҡыҙын әллә ни иткән, хатта ашаған ваҡытта уны ҡаршыһына һалып ҡуйыр булған. Әммә барлыҡ хыялдарын һуғыш емергән - олатайымды 1941 йылдың июнендә һуғышҡа алалар. Был ваҡытта иң өлкән улына 10 йәш, иң бәләкәйенә - инәйемә - 10 ғына ай булған була. Шул уҡ йылдың декабрендә олатайымдың хәбәрһеҙ юғалған тигән хәбәре килә. Өләсәй аслыҡта ла, яланғаслыҡта ла биш балаһының береһен дә үлтермәй һаҡлап алып ҡала. "Беҙ ҙә башҡалар кеүек бер баҡса бәрәңге ултыртабыҙ, көҙөн берәр балалылар 300 биҙрә уныш ала, минең 90 биҙрә сыға. Аптырайым. Эштән ҡайтыуыма малайҙарым, инәй, беҙ бәрәңге таптыҡ, тип көтөп тора торғайны. Тамырын өҙөп бөткәс, бәрәңге әллә ни уңмаған да инде", - ти торғайны өләсәй беҙ картуф алғанды баҡсаға сығып, беҙҙең эшләгәнде ҡарап ултырғанда. "Ил ҡайғыһы - бразник, башҡа ҡайғы килмәһен", - тип үҙ күңелдәрен үҙҙәре күреп йәшәнә лә, беҙҙең замандағы мулыҡты күреп, "Хәҙер аңлайым, элек ирҙәренең похоронкаһы килгәндәргә балалары мәктәпкә барһа ла ярҙам күрһәтәләр, башҡа ваҡытта ла. Мин бик бала үҫтерҙем, бер ярҙам да булманы. Хәбәрһеҙ юғалғандарҙың балаһына бирергә ҡушмағандар инде", - ти торғайны.

Атаһын 10 айлыҡ ҡына сағында күргән инәйем иһә ғүмер буйы атай тип әйтеү бәхетен татымаған. Беҙ, өс балаһы, сыр-сыу килеп, атайыбыҙҙың елкәһенә менеп шаяра, өйҙә булмаһа, ҡайтыуын дүрт күҙ менән көтөүебеҙҙе күреп, "Аптырайым һеҙгә, атайҙы ла инәйҙе яратҡан кеүек яраталармы икән?" ти торғайны. Ә беҙгә уның һорауы аптырау тыуҙыра - нисек инде үҙе инәй, үҙе бала атайҙы нисек яратҡанды белмәй...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ
яҙып алды.**

*ҠОМАРТҠЫ*

# ҠУРАЙ ҠЫНЫ

**Күгәрсен районы Түбәнге Һаҙ ауылы халҡы бөтәһе бер тамырҙан - мең ете йөҙөнсө йылда, бынан өс быуат ярым йыл элек йәшәгән Ғәле ҡарттың улы Мусаның балаларынан таралған: Искәндәровтар, Мусиндар, Вәлитовтар.**



Берҙәмлеге менән дан алған Түбәнге Һаҙҙар йор һүҙле, алсаҡ, шаян холҡло, эшкә сымыры һәм булдыҡлы булыуы менән айырылып тора. Һунарға, балыҡҡа, урман эшенә, аҙығыкөҙгө иген сәсеү-утау һәм йыйыу-урыу эштәренән тыш, халыҡ йыр-бейеүгә, шаян һүҙгә, лаҡаптар-көләмәстәр һөйләргә лә оҫталар. Ауылда һәр заманда ла башланғыс мәктәп булған. Унда Башҡортостанға билдәле фән докторҙары, ғалимдар, хәрбиҙәр, атҡаҙанған уҡытыусылар һәм табиптар, ауыл хужалығы, төҙөлөш һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре уҡып сыҡҡан. Шулай уҡ бында боронтан ауыл моңон арттырыусы ҡурайсылар, йырсылар, гармунсылар күп була.

Уҡ-янының ҡыны булған кеүек, башҡорттар ҡурайҙы ла ҡында һаҡлаған. Түбәнге Һаҙ ауылы ҡурайсыһы Ғиззәтулла Вәлиулла улы Мусиндың да ҡурай ҡыны, йәғни футляры булған. Йыла ағасының туп-тура ғына үҫкән олонон үҙәге буйлатып үтәнән-үтә соҡоп алған да бер яҡ башын тимер ҡалай менән көпләп, ваҡ тимер сөй менән нығытып ҡуйған ул. Ундай ҡындың асыҡ яғына ағас бөкө тығыла. Бындай ҡын эсенә бер ҡурай иркен һыя, ҡорола торғас, яҡшы һаҡлана, һынмай. Ҡурайсы ҡын эсенә ҡурайын һалып, ҡунаҡҡа бара, юл йөрөй ала. Кәрәк булһа, ҡурайын сығарып, гөрләтеп уйнап ебәрә.

Кем һуң ул Ғиззәтулла ҡурайсы? Ул Һаҙ йылғаһы буйлап ике саҡрым өҫтәрәк ятҡан Үрге Һаҙ ауылынан Ғилмикамал тигән ҡыҙға өйләнә (Ғәбитулла Мәзитовтың Етеболаҡтан алған ҡатынына эйәреп килгән үгәй ҡыҙы була ул). Ғиззәтулла менән Ғилмикамалдың Әлфиә, Фәүзиә, Рәшит исемле балалары тыуа. Бөйөк Ватан һуғышы сыҡҡас, Ғиззәтуллаға ла һуғышҡа китергә повестка килә. 1938 йылғы улы Рәшит атаһынан айырылып ҡала алмай, район үҙәге Мораҡҡа хәтле утыҙ биш саҡрымды ат арбаһынан төшмәй эйәреп килә. Алты йәшлек малай атаһына эйәреп фронтҡа барырға теләй, мине лә алып кит, тип инәлә. Юл буйы улын әүрәтеп-йыуатып ҡурай уйнап бара атай кеше. Ул улына ҡурайын да, ҡынын да бирә, үҙе ҡайтҡансы ныҡлап ҡурай уйнарға өйрәнеп торорға ҡуша. "Юҡ, атай, исмаһам, ҡурайыңды алып кит, һин бит ҡурай уйнамайынса бер көн дә түҙмәйһең", - тип шарлап илаған Рәшитте атаһынан саҡ йолҡоп айырып алып ҡалалар. Ҡурайсы ҡурайын һуғышҡа алып китә, ә улғынаһы, ҡурай ҡынын күкрәгенә ҡыҫып тотоп, үкһей-үкһей ауылға кире ҡайта. Ғиззәтулла Мусин һуғышта һәләк булып ҡала (1917-1943). Улы Рәшит уҡыуға шәп булып сыға, Күгәрсен ете йыллыҡ мәктәбенә биш саҡрымға яҙлы-көҙлө йүгереп, ҡышын саңғы менән елдерә, спорт ярыштарында ал бирмәй, уҡыуҙан бик яҡшы өлгәшә, айырыуса математиканан көслө була - ҡатмарлы мәсьәләләрҙе оҫта сисеп, бөтә кешене аптырата. Үкенесҡә ҡаршы, алтынсы класта уҡыған сағында саңғы ярышынан һуң ныҡ тирләгән көйөнсә ҡар ашай һәм үпкәһе шешеүҙән вафат була. Шундай башлы, отҡор малайҙың ваҡытһыҙ әрәм булыуына ауыл халҡы ныҡ көйөп, зар илай. Был үкенес яҡташтарының йөрәген һаман да әрнетә.

Бөгөн Түбәнге Һаҙ ауылында Ғиззәтулла ҡурайсының ҡыҙы Фәүзиә Мусина иҫән-һау йәшәп ята, һикһән биш йәшен тултыра. Ҡурай ҡыны Фәүзиә инәйҙә һаҡлана, ул уны Күгәрсен районының Тыуған яҡ тарихы музейына бүләк итмәксе. Түбәнге Һаҙ ауылында һаҡланған ҡурай ҡыны - ул хәтер һәм тарих ҡыны, Ватан өсөн яуҙа һәләк булған ҡурайсылар тураһында иҫтәлек һаҡлаусы ла... Тормошҡа ашмайынса өҙөлөп ҡалған бихисап яҡты хыялдың бер символы, башҡорт балаларының илаһи һәләттәренә бөгөн дә ҡурсыуға мохтаж булыуына ишара ла ул.

**Сәрүәр СУРИНА.**

***✓ Башҡорт тоҡомонан булған киң һөйәкле, көслө, сыҙамлы өйөр айғыры менән бейек нәҙек сираҡлы Орлов сабыш тоҡомонан яралған йәш айғыр баш бирмәç холҡо, йылғырлығы, уçаллығы менән ат заводында дан алып та өлгөрә.***



# КЕРЧЬ

*Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА*

*(Хикәйә)*

Кәртә эсендә көсөргәнеш артҡан-дан-артты. Һоло тараҡан ат ҡараусылар ҙа, оло ҡапҡа төбөндә быçҡылдатып тәмәке һурған ветврач менән зоотехник та тыштан ғына тыныс күренделәр, ә эстәрендә сараһыҙлыҡ үçкәндән-үçә барҙы. Хатта аттар ҙа ниндәйҙер хәүефме, кешеләр күңелендәге тулҡынланыуҙымы һиҙемләп, сәбәпһеҙгә кешәнәп-кешәнәп алды, фырылдап тауыш бирҙе.

- Булды, етәрлек көттөк, - ниһайәт, ветврач халаты кеçәһенән оҙон еңле резина бирсәткәләрен алып кейә-кейә, ферма осондағы айырымланған аҙбарға йүнәлде. Зоотехник һурып бөтөрмәгән төпсөгөн мөйөштәге ҡалай биҙрәгә ташлап, ашығып уның артынан эйәрҙе. Быларҙың ҡыбырлағанын күргән малсылар ҙа, эштәрен ташлап, шул тирәгә эркелеште.

Ҡолон тулғағында тартышҡан йәш бейә, ирҙәрҙең килеп инеүен әллә оҡшатмауын белдереп, әллә, киреһенсә, ярҙам һорапмы, аçҡы иренен генә дерелдәтеп тауыш бирҙе. Был өнө үңәс буйынан килгән хырылдау булып сыҡты.

- Их!.. Хәле етмәй бит быны, - зоотехник әйткәнен дәлилләтергә теләп, ветврачҡа ҡарап алды. Уныһы, тәжрибәле мал докторы, ризалашып, баш ҡына ҡаҡты.

Бейәләр ҡолонлағанда, ғәҙәттә, ҡыçылмайҙар бында. Малдар үҙҙәре лә кеше күҙенән йәшерен тыуҙырырға тырыша ҡолондарын. Ҡайһы бер олораҡтар хатта мал тыуым мәлен ир-егеткә күрһәтергә теләмәй, ҡарап торғанда уңайһыҙлана ла, тиҙәр. Шулайҙырмы-түгелдерме, бындай ырымдарҙы иçкелек ҡалдығы тип кире ҡаҡһалар ҙа, шул ғөрәфәттәрҙе тыңлап үçкән халыҡ балалары ҡайһы бер йолаларҙы тота. Малтыуарға, әлеге хәл кеүек булмағанда, тыуым мәлендә ҡамасаулап, артыҡ күҙ булып йөрөмәçкә тырышалар. Был һылыу бейәне лә, ҡолонлар мәлен самалап, айырып ҡуйғайнылар, иртәнән бирле тулғаҡта, бушана алмай әле. Быға са көнөнә әллә нисәшәр бейә ҡолонлап торғас, бейәләрҙең тап артым ваҡыты булғас һәм быйыл береһе лә ҡатмарлылыҡ тыуҙырмағас, йәш бейәгә лә артыҡ иғтибар бирмәгәйнеләр. Тик малсыларҙың береһе, төшкә ҡарай, белгестәрҙе ҡуҙғатты: Ҡырым бейәһе ҡолонлай алмай оҙаҡ ята.

Былтыр республикаға Ҡырымдың Керчь ҡултығы буйында үрсетелгән тоҡом аттарын һатып алғайнылар, шуларҙан бер бейәне Өфө ат заводы ла эләктереп ҡала алды. Төн шикелле ҡара, ҡарға ҡанатылай шыма йылтыр, ҡыҙҙар сәсендәй ҡабарынҡы ялбыр ялдары нәҙек бәкәлдәренә һуғылып ялпылдап йөрөй ине малҡайҙың. Бейек янбашлы, аҡҡош муйынлы, бәләкәй генә ҡупшы башлы. Ваҡ ҡына аҙымдар менән бейеп-юртып йөрөгән был йәш бейәне күргән завод директоры ла, малсылар ҙа тел сартлатыуҙан үтә алманы. Ирҙәр телмәрендә йылҡының бындай гүзәллеген һүрәтләрлек һүҙҙәр юҡ ине.

Ят малҡайҙы кешеләр генә түгел, өйөрҙәге башҡа йылҡы ла аңғарҙы. Улар "был кем" тигән шикелле таçырайышып торһа, сысҡан һыртлы, киң күкрәкле ғәййәр айғыр ерҙе һеңдерә баçып елдереп килеп тә етте. Киң танау тишектәрен ҡуржыратып, башта морон тирәһен еçкәне, унан, бер уратып әйләнеп сыҡҡас, яурынбашы менән этәрә биреп үтеп, өйөр эсенә әйҙәне. Ҡара бейә, артыҡ ихлас ҡабул итмәгән оло бейәләрҙән шикләнеп, өйөр башына һырынып тигәндәй ҡушарлап китте лә, бынан ары ҡайһы мәл ҡараһаң да уның йәнәшәһендә генә булды. Атап ҡына исем дә бирмәнеләр уға, Ҡырым бейәһе, Һылыу бейә, Керчь бейәһе тинеләр ҙә ҡуйҙылар. Һәм ошо Һылыу бейә төптән йыуан эре һөйәкле уçал айғырҙың айырылмаç юлдашына әйләнде. Яратҡан ҡатыны булып алды, ахыры, башлыҡтың, тигән һығымтаға килде малсылар ҙа.

* * *

Ветврач менән зоотехник бейә ҡорһағындағы арҡыры килгән ҡолондо ыңғайлатҡансы ла хәтһеҙ ваҡыт үтте. Хәҙер эш йәйләнер кеүек ине лә, малҡайҙың бөтөнләй хәле ҡалмаған. Ул үҙаллы көсәнеп, этеп сығарырлыҡ түгел эстәгеһен. Ирҙәр хәҙер бейә кәүҙәһен арҡан менән ҡороҡлап, өç яғын быуа биреп күтәртеп ҡаранылар. Аттың ҡарышырлыҡ та, хатта артыҡ туларлыҡ та ҡөҙрәте тойолманы.

- Ай, әттәгенәһе... Нишләп кенә былай булды һуң? - ветврач, өҙгөләнеп, Һылыу бейәнең йомола барған күҙ ҡабаҡтарын алмаш-тилмәш аçҡылап ҡараны ла, артҡа әйләнә барған күҙ алмаларынан хәлде төшөнөп, фарман бирҙе:

- Нәҙек бау алып килегеҙ, ҡолондо һөйрәп алам.

Алғы тояҡтарынан эләктерелгән ҡолонсаҡ тартып сығарылғас, уның дерелдәп торған һау кәүҙәһен әсәһенең морон төбөнә алып килеп терттөләр:

- Бына ҡолонон, Һылыу бейә... Йәйә, терел, әйҙә, тор... баланды кем имеҙә?

Балаһының еçен һиҙгән бейә, күҙен асмаһа ла, башын ҡалҡытырға итеп бер-ике талпынды ла, тынды. Ул шулай шым ғына ятып йән бирҙе. Ә әсә еленен бер тапҡыр ҙа төртөп ҡарамаған һәм яҡтыға оҙаҡ сыға алмауҙан тонсоғоп, мәлйерәп өлгөргән ҡолонсағы, әсәһенең ни эшләп һаман уны йылытып яламағанын аңламай, һыуынып етмәгән һыртына һырынып ятып ҡалды. Уларға ярҙам итә алмаған ирҙәр сараһыҙ булышып ҡарап тора бирҙе.

* * *

Бейәнең үлеүен документтарҙа теркәп, ат заводы директорының килеп күҙ һалыуын көткән ферма хеҙмәткәрҙәре үле кәүҙәне алырға тип ингәндә, йәнһеҙ бейә эргәһендә нәҙек тояҡтарында бәүелә биреп баçып торған ҡолонсаҡты күреп аптырап киттеләр. Был ҡолон бая ғына баш-тояғын тота алмаған сепрәк хәлендә, әсәһе яҙмышын ҡабатлары көн кеүек асыҡ ине. Шуға уны хатта салып та тормай ҡалдырып киткәйнеләр бит. Әле килеп... тороп баçҡан.

- Икеһе лә үлде тигәйнегеҙ бит? - завод директоры аңлатма талап итте.

- Үлгән кеүек ине... - ветврач яурынбаштарын ғына күтәрә алды.

- Бөгөн үлмәгәндә лә... Яңы тыуған ҡолондо инәһеҙ мал итеп алыуы... белмәйем, - зоотехник та ни әйтергә белмәй ыуаланды.

- Шундай тоҡомло малдарҙың орлоғон булһа ла ҡалдырырға ине, - директор ҡолондоң муйын-яңаҡтарын ҡапшап ҡарарға иткәйне, тегеһе ҡомһоҙ ирендәре менән уның бармаҡтарын эләктереп алды. - Оһо! Был ҡолон үлмәçкә лә ҡалмаçҡа итә. Барығыҙ, шешә алып килегеҙ.

* * *

Икеһен уҙып, дүнән ҡорона инеп барғанда Керчты тоҡом яҡшыртыу маҡсатында колхозға - ауылға ебәрәләр. Башҡорт тоҡомонан булған киң һөйәкле, көслө, сыҙамлы өйөр айғыры менән бейек нәҙек сираҡлы Орлов сабыш тоҡомонан яралған йәш айғыр баш бирмәç холҡо, йылғырлығы, уçаллығы менән ат заводында дан алып та өлгөрә. Йәше етер-етмәçтән бейәләрҙе өйөрөргә, йәштәштәренә ҡаршы сығырға ынтыла ғына түгел, өйөр башы булған атаһына ла буйһонмай ыҙалата. Бындай характерлы атты мотлаҡ өйөр айғыры итеп кенә тотонорға була ине. Шулай иттеләр ҙә.

Киң туғайҙарҙы иңләп, үҙ өйөрөн алып йөрөй хәҙер Керчь. Менеп йөрөгән хужаһы ла председатель. Уны, әсәһе Һылыу бейә хөрмәтенә, бейәнең тыуған яғы - Керчь ҡултығы атамаһы менән исемләгәндәр ине, ауыл халҡы үҙенсәләп "Кириш"ҡа әйләндерҙе. Әммә Кириш булып китеү генә айғырҙың кәрен ҡайтарманы, киреһенсә, йылдан-йыл ғәйрәтләнеп, тулы көскә ултырып, бөтөн-тирә яҡҡа даны таралған сабыш айғыры булып алды. Һуңғы һабантуйҙа ла ул еңгәйне. Ҡара-һоро йөнө тиргә төшөп йылтырап, кирелеп сабып килеп ҡыҙыл таçманы өҙөп үткәндә, артындағы юртаҡтар күҙ күреме арала ятып ҡалғайны. Эйәрендәге малай, өйрәтелгәнсә, уны ҡапыл туҡтатмай бер килке саптырып алып китте, унда ла халыҡ ҡыуып етеп, өçтөндәгеһен һөйрәп төшөрөп күккә сөйҙө, йылҡының муйынын-һыртын шапылдатып һөйҙө.

- Ай, Кириш! Уай, Кириш! - тип һоҡландылар уға.

- Ҡанатлы ҡара толпар был! - тип маҡтанылар.

Һуңғы һабантуй тип иçләй Керчь, сөнки был байрамдың ахыры булманы - һуғыш башланыуы хаҡында хәбәр килде. Председатель уны атланып, районға сапты. Унан киләһе көндәр ҙә ғауғалы, ығы-зығылы булып, айғыр өйөрөнә йоҡмай ҙа йөрөнө.

* * *

Ҡышҡа һарайға ингәндә өйөрө ярайһы кәмегәйне Керчтың. Сөнки һуғыштың тәүге көнөнә үк ауылдар илгә һалдатын да, атын да, ризығын да ебәрә башлағайны. 1942 йылдың башында, уның үҙен дә, тиçтәләгән өйөрҙәштәре менән бергә кешнәтә-кешнәтә кәртәнән етәкләп алып сыҡҡандарында, эстә бары оло бейәләр ҙә, тай-ҡолондар ғына ҡалды. Аттар тынысһыҙланды, үрәпсене, ниндәйҙер ҡотолғоһоҙ бәлә, ҡиәмәт хәтәре тойҙо уларҙың һиҙгер күңеле. Ауылдары күҙҙән юғалғансы боролоп ҡараған, ҡул болғаған эйәрлеләренә ауаздаш булып улар ҙа сарбаулап кешнәне, тыуған төйәктәре менән хушлашты.

Өс айҙай һуғышҡа өйрәтеү алып барылды. Кешеләр менән бер рәттән аттар ҙа күнекмәләр үтте. Стройҙа тороу, шул уҡ теҙем менән хәрәкәт итеү, бойороҡҡа ҡапыл туҡтау, ятыу, тороу, кәртәләрҙе һикереп сығыу... Тик быларҙың барыһы ла беренсе атакала уҡ баштан сығып осто. Ерҙә-күктә-эргә-тирәлә геүләгәндән, йәнәшәлә генә тупраҡ ҡутарылып һауаға осҡандан, алдағы аттар йән-фарман сапҡанда тиктомалға тәкмәс итеп киткәндән, һыбайлылары ҡолап ҡалған йәки өҙәңгегә һөйрәлеп барғандан ҡот осто, күҙ алдары ҡараңғыланды, аяҡ аçты бәүелде. Тик ҡасыр, йәшенер урын юҡ. Алға, тик алға ғына барырға ҡала. Һыбайлыһының балтырҙарын ҡабырғаһына ҡуша ҡыçҡанын ғына тоя ла, туҡтауһыҙ ярылған снарядтар утын урап үтергә икәнде генә белә Керчь. Бөтөн был геүләү-шартлау тауышынан, ҡан-үлем еçенән һәм ошо ҡурҡыныс эсендәге сабыш ҡомарынан ярһыған атты был ваҡытта, һыбайлыһы туҡтатырға теләгәндә лә, башын ҡайыра алмаç ине. Толпар был халәтендә үлә лә, еңә лә, ҡанатланып осоп китә лә ала ине. Ул кирелеп сапты ла сапты. Бөтөн уттар, шартлауҙар, ҡысҡырыуҙар ялпылдап ятып ҡала барҙы. Аттың маҡсаты бөтөн был ғауғаны алыçта, күрмәç-ишетмәç арауыҡта ҡалдырыу ине. Бөтөн был тауыштар уға бәйге ҡыйғыуы һымаҡ була башланы. Уны әйҙәләйҙәр! Унан бәйге көтәләр! Керчь тағы ла ҡыҙыбыраҡ, тағы ла көсәнеберәк йомолдо. Унда толпар асылы уянғайны.

* * *

Ауылды фашистарҙан азат итеп, ял итергә туҡтағас, һыбайлы аты янында оҙаҡ ҡына торҙо. Күптән түгел генә ауылынан сығып, һалдат шинеле кейгән йәш егет ине ул кавалерист. Егеттең бармаҡтары ҡалтырағанын да, тауышына ҡарағанда илай икәнен дә тойҙо шул саҡ юртаҡ.

- Керчь... Керчь, әгәр һин булмаһаң... мин ҡурҡып ҡаса инем... оят миңә, Керчь... Ҡурҡтым мин... Ә һин мине алға алып киттең... Иң беренсе барып индең ауылға... Беҙҙе күргән немецтар автоматтарын ташлап ҡасты... Пулемет менән ҡаршы сыҡҡанын бәрҙереп үттек... Командир минең ҡулымды ҡыçты... батырһың икән тине... Мине һин батыр иттең, Керчь... Ҡаһарман атым, ҡара толпарым минең.

Тик был йәш, тәжрибәһеҙ ҡуллы эйәһе менән оҙаҡ бергә булырға яҙманы Керчҡа. Сираттағы шундай утлы сабышта хужаһын ел осороп алып ҡалғандай булды. Өçтөндәге еңеллектең сәбәбен аңлаған ат, тиҙлеген ҡапылдан ташлай алмай саба бирҙе лә, йүгәне алға төшөп сайҡала башлағас, ҡайырылып артҡа ҡараны. Унда, бәйге үткән яланда, уның бейәләре лә, ырыуҙаштары ла, кешеләр ҙә сәселешеп ята... Ер яна... төтөн...

Егетен шулар араһынан эҙләп тапты ат. Еçкәп ҡараны - шул. Снаряд ярсығы түбә осон алып киткәндән урғып аҡҡан ҡаны битен ҡыҙыл пәрҙәләй ҡаплаған. Ат уның ибәтәйһеҙ ятҡан кәүҙәһен ҡыбырлатырға теләп томшоғо менән улай-былай этәргеләп ҡараны, эргәһендәге тупраҡты сапсыны, күҙҙәрен астырырға теләпме, әленән-әле йөҙөнә ҡағылып, морон-яңаҡтарын ҡанға буяп бөттө. Егет ҡуҙғалманы. Һиҙгер йәне менән эйәһенең хәлен төшөнгән толпар йүгән тимер-биҙәктәрен сылтыратып башын сайҡаны ла, ян-яҡтың ғәрәсәт геүен телеп әсе кешнәне:

- Ииһо-һо-һо-һооо!

**✓ Таныш һыҙғырыуҙан йөрәге ҡупҡан толпар бөтә тәне менән талпынып, ер тетрәтеп кешәнәне лә, көтмәгәндә артҡы аяҡтарына үрә баҫып, алғылары менән һауаны төйгәс, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй алға йомолдо.**



* * *

Икенсе эйәһенең теҙгенен алыуынан уҡ йылҡы малы менән эш итеп өйрәнгән әҙәм икәнлекте аңланы ат. Тупаҫ түгел, әммә ҡаты, ышаныслы, көслө ине был ҡулдар. Тауышы ла йәшәгән ирҙәрсә ҡалын, төптән килә. Йыш ҡына Керчь менән һөйләшә йә шым ғына йырлай. Ана шул саҡтарҙа ирәүәнләнеп тыныслана һәм ҡарышҡырлығы әллә ҡайҙа юғалып, йыуаш малға әйләнә лә ҡуя атың. Эйәһе уның тояҡтарын алмаш-тилмәш күтәртеп дағаларын тыҡылдатып тикшерә, эйәр аҫтындағы һуғылған урындарын майлай, ҡутыр-талпандарынан таҙалай, ҡойроҡ-ялын ҡырҡып тигеҙләй. Яйы тура килгән, яу-фәлән булмаған саҡтарҙа, йылға-күл тирәһендә торғанда, йүкә йыуғысын күпертеп ышҡып-ышҡып йыуа ла. Бындай мәлдәрҙә ҡабаттан ауылында, конюхҡа ярҙам итеүсе малайҙар тәрбиәһенә ҡайтҡандай тойола Керчҡа. Әйтерһең, был ҡанлы һуғыш булмаған, әйтерһең, уны һәм өйөрөн тыуған ерҙәренән айырып, йәһәннәм төбәгенә алып китмәгәндәр, әйтерһең...

- Керчь, малҡай, бына беҙ һинең менән Донда ла, Днепрҙа ла ҡойондоҡ...

* * *

Ерҙә ниндәй генә афәттәр, яу-ҡырылыштар, үлем-ҡиәмәттәр барғанда ла, йәшәү дауам итә. Тәбиғәт йәшәй. Ул бөрөгә тулыша, сәскә ата, кибә лә тағы йоҡоға тала, яҙға тағы ла баш күтәрә. Ундағы барлыҡ йән эйәләре лә шулай: үлән-ағастар ҙа, кейек-йәнлектәр ҙә, кешеләр ҙә...

Ҡар асылыр асылмаҫтан дивизияның йылҡы өйөрөндә ҡолондар тауышы сыңғырай башланы. Шундай саф, саңҡыу, сөңгөр уларҙың һалҡын һауаны телеп ебәрер әсе ауазы. Ялан кәртәлә сабышҡан ҡолоҡайҙар кешнәгән һайын әсәләре һағайып баштарын күтәрҙе, ҡолаҡтарын ҡайсылатты. Ҙур тупта уның кеүек тоҡом айғырҙары күп булмағанлыҡтан, ниндәй бейәләр үҙенеке икәнен дә, ҡайҙа сыңраған ҡолонда уның ҡаны тирткәнен дә белә Керчь. Ана, урынында тороп сыҙай алмаған, туҡтауһыҙ уйнаҡлап, әле арт һынын, әле башын сойорғотоп сапҡылаған сысҡан һыртлы ҡара-көрән бәләкәс тә уныҡы. Үткән аҙнала ғына тыуған булһа ла ҡалай теремек, ала-ҡола инәһенә лә, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәй.

Керчь ауыр башын ҡойма тәртәһенә һалып, күпте күргән хәсрәтле ҡарашы менән ҡолондарын һәм бейәләрен күҙәтә. Бейәләр әсә булыу бәхетенән донъяларын онотоп, ҡолондары әле был ерҙә үлем һәм бәлә барлығын белмәй ирәйеп йөрөй. Тик айғыр ғына тыныслана, онотола алмай. Уның һиҙгер танауы көнбайыштан килгән елдә дары, ут, ҡан еҫтәрен тотоп ала, көслө мускулдары араһында ҡыҫылып дарҫлаған йөрәге яҡынлашып килгән шомдо һиҙә. Был байманлыҡ күпмегә һуҙылыр?..

* * *

Атака алдынан ҡолондарҙы айырып ҡалдырырға тигән бойороҡ булды. Юлда осраған ауылдарҙа, таныш булмаған кешеләргә таратылды ҡолонсаҡтар. Уларҙы нәҙек муйындарына ҡороҡ һалып ҡайырып алып ҡалдылар. Тулап сыңрашты, аҙарынып кешнәп өйөр артынан атылырға теләп, ҡолап ҡалдылар. Дивизия рәтендә тәртип китте. Бейәләр алға барырға теләмәй ҡарышты, уларҙы балаларының тауышы кирегә борҙо. Үксә типкеһен дә, ҡамсы ярыуын да, ауыҙлыҡ шаҡарыуынан ауыҙ ситтәре йыртылыуын да тоймай айҡашты улар. Бер урында тапанған һәм туҡтауһыҙ өйөрөлгән аттарҙың аҙарынып кешәнәүе, сорлап үрәпсеүе дәшһәтле бер күренешкә әүерелде. Тик был алыш оҙаҡҡа һуҙылманы. Әҙәмдәрҙең ҡулы ҡаты булды. Уларҙы алға ҡыуҙылар. Ҡолондарҙың тауышы алыҫайғандан-алыҫая барып, йылға, урман шауы, күмәк ат тояғы тауышы артында ҡалды. Еҫкәп-ялап та туймаған бәләкәстәренән айырылыу хәсрәтенән шаңҡыған бейәләр, улар зарын яҡшы тойоп барған башҡалары, артабан бер өнһөҙ баштарын эйеп атланы ла атланы. Эйәрҙәге ир-егеттәр ҙә шым. Хатта тәмәке лә көйрәтмәйҙәр. Берәүҙәре шинел осо менән йәшертен генә күҙҙәрен һөрттө, икенселәре ҡаштарын емереп, ирендәрен ҡымтып, үҙ уйҙары солғанышында ҡалды.

* * *

Атакала... юҡ, бәйгелә саба ине Керчь. Ҡапыл алдында ер убылды ла, уны эйәһе менән бергә ҡом ямғыры япты. Яуын аҫтынан сыҡҡанда толпарҙың эйәре буш, ҡараштары аларған, танау-ҡолаҡтарынан ҡан киткән, үҙе тояҡтарының ҡайҙа нисек баҫҡанын аңларлыҡ хәлдә түгел ине. Күпме йөрөгәндер ул шулай ут-төтөн араһында. Эргә-тирәһендә снарядтарҙың ерҙе ҡутарып күккә ташлауын күрҙе - тауышын ишетмәне. Көбәктәренән ут бөркөп килгән танкыларҙың өҫкә менеп килгәнен аңғарҙы - тауышын ишетмәне. Танк артына йәшеренеп боҫоп килгән автоматсыларҙың үҙенә ҡарай йүгергәндәрен һәм уратып алырға иткәндәрен самаланы - тауыштарын ишетмәне.

* * *

Керчты һәм тағы ла ике тиҫтәләгән атты бер ихатаға йыйып бикләне немецтар. Докторҙары малдарҙы ҡарап-тикшереп сыҡҡас, яралары ауырыраҡ булғандарҙы ситкә алып китеп аттылар. Керчты тотоу өсөн әллә нисә һалдатҡа арҡан осонда һөйрәлеп йөрөргә тура килде. Шулай ҙа уны аҙбар мөйөшөнә ҡыҫырыҡлап, тешен, ҡолаҡтарын, тояҡтарын ҡаранылар. Доктор, осмотр үткәргәс, бөтөн был эште ойоштороған һәм тамаша күҙәтеп урам уртаһына ҡуйылған артлы ултырғыста ултырған түрәһенә яҡын уҡ барып, баш ҡаға-ҡаға отчет бирҙе:

- Был мал сабыш аты булырға оҡшай. Тик бик уҫал һәм ҡырағай. Аңлауымса, рустарҙың Орлов тоҡомона тартым, тик ниндәйҙер тағы ла бер көслө ҡушылмаһы бар...

- Яҡшы, яҡшы, - тине уға хужаһы, - мин был атты Германияға ҡайтартам. Унда минең фермам бар. Бик шәп трофей буласаҡ.

- Хәүефле идея, кәңәш итмәҫ инем, оберст әфәндем, был ат буйһона торғанға оҡшамай. Әлегә ул контузияла ғына.

- Ҡурҡмағыҙ, доктор, мин бер атты ғына түгел, күрәһегеҙ, әллә күпме ғәскәрҙе буйһондорҙом. Ошо ҡаланы алғас та был аттарҙы тимер юлына сығарып тейәтербеҙ. Бына һеҙ күптән отпуск һорай инегеҙ, яйы сыҡты, ошо айғырҙы минең фермаға алып барып тапшырғас, ялға китерһегеҙ. Ундағы беҙҙең ҡупшы бейәләргә шәп тоҡом бирәсәк был ҡырағай...

Аҙна-ун көн кәртәле урам эсендә ирекен йөрөгән, яҡшы һолола һәм һыуҙа ғына торған, доктор дауаһын алған Керчтың ҡолаҡтары яйлап асылды, ҡарашы асыҡланды. Ул хәҙер эргәһендәгеләрҙең яттар икәнен дә, уға аңлашылмаған тел-ауаздар менән аралашыуҙарын да төшөнә. Еҫтәре, биргән бойороҡтары, ҡыланыштары башҡа быларҙың. Уны менәм тип килбәтһеҙ ҡыланыуҙары, ҡойма башынан өҫтөнә һикереүҙәре, тояҡ аҫтында ятып ҡалыуҙары, әүрәтәм тип ҡулдарын һуҙып сутылдап килеүҙәре - барыһы ла башҡа. Керчь ундай мөнәсәбәткә өйрәнмәгән. Ул ҡысҡырғанды, сыбыҡ болғағанды, ҡурҡып ҡалтырап торғандарҙы өнәмәй. Ул һыҙғырыуға, өҙләүгә, йыр-моңға, шыбырлап иркә һөйләшеүгә, ҡыҫҡа киҫкен командаларға, ышаныслы ҡулдарға күнеккән. Быларҙан сыҡҡан татлы еҫ тә, эргәһендә туҡтауһыҙ сәбәләнеүҙәре лә ялҡытты, ярһытты айғырҙы. Господин оберстың һалдаттарына атҡа атланып, урамда бер түңәрәк әйләнә алыусыға приз иғлан итеүе уғата ҡуҙғытты фрицтарҙы. Хәҙер улар менгегә сиратҡа баҫты. Әле берәһе ырғыны, әле икенсеһе ҡолап ҡалды, әле өсөнсөһө теҙгенгә йәбеште, дүртенсеһе тапалды, бишенсеһе тешләнде... Генерал-офицерҙар бейек болдорҙан тамаша ҡылып көлдөләр, шаулап ҡул саптылар, ставканы күтәрҙеләр. Шулай ҡайнашҡан мәлдә Керчтың ҡолағына бер өн салынды. Ул талымһыҙ ғына сабып йөрөгән еренән шып туҡтаны, ҡолаҡтарын ҡайсыланы. Өн тағы ҡабатланды:

- Фьюууу...

Ул арала, күнде, тип уйлап, атҡа берниҫә һалдат килеп тә йәбеште. Кемеһеләр теҙгенгә аяғын тыға һалырға ашыҡты.

- Фьюююуу...

Таныш һыҙғырыуҙан йөрәге ҡупҡан толпар бөтә тәне менән талпынып, ер тетрәтеп кешәнәне лә, көтмәгәндә артҡы аяҡтарына үрә баҫып, алғылары менән һауаны төйгәс, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй алға йомолдо. Бимазалаусыларҙың ҡайһылары ситкә һибелеп өлгөрһә, теҙгенгә эләгеп киткәне һуғылып барып, айғыр ҡойма аша һикергәндә ырғытылып ятып ҡалды. Тояҡ тауыштары алыҫая башлағас ҡына оберст әфәнде аңына килеп аҡырҙы:

- Ҡыуып етергә! Тоторға! Мотоциклдарға!

Тик ҡайҙа ул! Һалдаттар мотоциклдарын ҡабыҙып сыҡҡанда ауыл тирәһендә аттың әҫәре лә юҡ ине. Ул һыҙғырыусыһының йылға буйындағы ағаслыҡта икәнен аңлап, тура шунда елдереп, инде атлы-һыбайлы булып, фронттың ҡаршы яҡ һыҙығына етеп тә баралар ине.

- Стой! Кто идет?

- Свои!

Часовойҙар атты танып ҡаршы килде:

- Маладис, тәки алып ҡайттың бит!

- Мин уны юғалтмаҫҡа, ташламаҫҡа тип һүҙ биргәйнем...

Һүҙендә торҙо майор, ташламаны.

* * *

Әшулай ҙа бер мәл, ант боҙола, сабырлыҡ һына яҙған мәл булды. Хужаһы ҡаты яраланып госпиталгә оҙатылғас, айғыр инде уның еҫен һәм тауышын онота башлаған, һағыныуҙан ябыҡҡан, башҡаларға баш бирмәй ҡарыулашып арыған һәм инде һындым ғына тигәндә, күҙ алдында таныш һын пәйҙә булды. Ял араларына таныш бармаҡтар инеп батты, танауға таныш еҫ тулды.

- Керчь, толпарым минең... Бына мин ҡабаттан терелеп килдем.- Айғыр дымлы томшоғон ирҙең йөҙөнә терәп, тынып ҡалды. - Һин мине ут эсенән алып сыҡҡанһың... Миңә һөйләнеләр, беләм. Барыһы ла белә һинең батырлыҡты, малҡай, хатта тыуған яҡтарҙа ла ишеткәндәр...

Ә йылҡы, тоҡомо ергә яратылғандан алып ир-егеткә тоғро юлдаш һәм яуҙаш булыу ҡанына һеңгән йылҡы малы, дәшһәтле атакаларҙың һуңғыһында эйәһе ҡолап ҡалғас, уны эҙләп кире боролғайны. Яртылаш ергә күмелеп ятҡан кешеһен тапҡас, уны иҫенә килгәнсе төрткөләне, битенә ҡайнар тынын бөрктө, нимәлер һөйләп аңлатырға теләгәндәй булып ҡолағы төбөндә фырылданы, әкрен генә кешәнәгән ауаздар сығарҙы. Ниһайәт, иҫенә килде майор, тик арҡаһына инеп ҡалған һәм балтырын үтә сыҡҡан пуля яралары ҡуҙғалырға, баҫҡан тупраҡты йырып сығырға бирмәй. Шулай ҙа ирҙең ҡулдары иҫән һәм көсөн юғалтмаған. Ул аттың йүгәненә йәбешә лә шыбырлай:

- Артҡа, Керчь, артҡа...

Ат ипләп кенә артҡа сигенә. Кеше бер ҡарышҡа ҡуҙғала, әммә ыңғыраша ла тағы иҫен юя. Малҡай тағы ла уны төрткөләй, мороно менән битен ыуалай. Күпмелер ваҡыттан майор яңынан телгә килә:

- Керчь... арт-ҡа...

Бер аҙым, ике аҙым... тағы ла аҙ ғына... Ирҙе соҡорҙан ситкәрәк һөйрәп һалғас, уның саҡырыуына яҡын уҡ килеп, аяҡтарын бөкләп эргәһенә ятты, ә хужаһы көскә эйәргә үрмәләп менеп, бөтә кәүҙәһе менән елкәһенә ауҙы. Кәрәкле йөгөн тейәп алған толпар еңел ҡуҙғалып, кирегә, бығаса тороп өйрәнгән төйәгенә ҡарай юртты. Ә үҙенең снаряд ярсығы йыртҡан янбашынан һәм муйын тәңгәленән леркелдәп йылы ҡан һарҡып килгәнен аңғарманы ла малҡай.

* * *

Еңеүҙе Германия янындағы Бранденбург провинцияһында ҡаршыланы Керчь. Һыбайлыларҙың кәпәс сөйөп ҡыуанғандарына, тик атакаларҙа ғына ҡысҡырған орандар яңғырауына ҡарап, һабантуйҙан да ҙур байрам икәнлеген аңланы.

- Хәҙер ҡайтабыҙ! Ҡайтабыҙ, Керчь! Үлем бөттө, ҡайғы бөттө, - тип ҡат-ҡат ҡабатлаһа ла хужаһы, айғырға тағы бер ауыр ҡайғы кисерергә тура килде. Вагондарға тейәлеп килгән дивизия аттары юлдан арынып, күҙ-баш алып та өлгөрмәне, уларҙы ҡабаттан поездға тейәй башланылар. Кавалеристар был юлы сөбөрләп аҡҡан йәштәрен тыя алмай, аттарының муйындарын һыға ҡосаҡлап илаштылар.

- Хуш бул, Бурат, үпкәләп китмә инде, зинһар...

- Бойороҡ шундай, Ҡолас... бойороҡ был...

- Яуҙашым минең... Күксәйем... онотмам һине, үлгәнсе онотмам...

- Турысай...

- Аҡбәкәл...

- Саптар...

Ә аттар яуап итеп сорнашып кешнәне лә кешнәне. Әйтерһең, баш осонан хушлашып торналар тубы үтте. Яу юлы, утлы һуғыш, юғалтыу, үлем ғазабын үтеп сыҡҡан аттар тағы ла йыраҡҡа, Украина, Кавказ яҡтарының ауыл хужалығын күтәреүгә оҙатылды. Уларҙың тыуған тупраҡтарына тояҡ баҫыр хыялы тормошҡа ашманы. Вагон тәҙрәләренән баштарын сығарып тилмерешеп ҡарап китте улар. Аттарының үпкәле күҙҙәрен оҙаҡ, бик оҙаҡ онота алманы кавалеристар. Был ҡараштар уларҙы ғүмер буйына эҙәрлекләне. Был ҡараштар станцияла кешеләр менән бергә ҡалдырылған Керчҡа ла тынғы бирмәне һәм ул киләһе тыныс көндәрҙә лә өйөрө араһында шул күҙҙәрҙе, шул аттарҙы - яуҙаштарын күрҙе.

* * *

–Иһо-һо-һо-һоой! - айғырҙың кинәнеп кешнәгәне йылғаялан өҫтәрен генә түгел, ҡаршы тауҙарҙы ла тетрәтте. Улар ҡайтауаз булып тауыш бирҙе:

- Һо-һо-һоой!

Өйөрөп килгән өйөрөн урап үтте лә, алға сығып башҡа торҙо Кириш. Уның һуңғы йылдарҙа үҫеп киткән ҡап-ҡара ялдары елдә туҙғыны, йыуан муйыны дәшһәтле дуғаланды, танауҙары ҡуржырап көҙгө һауаға пар бөрктө, ауыр кәүҙәһе бөтөн көс-ҡөҙрәтен күрһәтеп мөлкөп, уйнап килде. Өйөр уға буйһоноуын белдереп, беренсе ауазынан уҡ ҡуҙғалып эйәрҙе. Улар уны ғәйрәтле, алыштырғыһыҙ, еңелеү белмәҫ башлыҡ итеп белә. Ә тәненең ике урынында мина ярсығы ышҡылып сәңкетеп барғанын һәм алғы аяҡ төбөндә яңылышыраҡ уңалған һөйәктең һыҙлауын... һәм төштәрҙә һаман да утлы атакаларға күтәрелеүен ул үҙе генә белә.

Данлыҡлы толпар өйөрөн һыулауға әйҙәне...

БЕЛӘ ИНЕГЕҘМЕ?

# ТӘГӘРМӘС ӨҪТӨНДӘГЕ ҠӘЛҒӘЛӘР...

тыуған ил һағында

**Бөйөк Еңеүгә табан юл ҡаты алыштар, ҙур ауырлыҡтар һәм һынауҙар аша һалынған. Был юлдың һәр аҙымы, 1418 хәрби көндөң һәр минуты фронттағы һәм тылдағы миллионлаған кешенең Ватанды фашизмдан ҡотҡарыуға йүнәлтелгән тиңе булмаған ҡаһарманлығы. Ул ваҡытта ҡәһәрле дошманды еңеү өсөн фронттың һәм тылдың берҙәм булып көрәшеүе мөһим икәнлеген һәр кем яҡшы аңлаған.**






## Өфө паровоз ремонтлау заводы

Илбаҫарҙарҙы еңеүҙә фронт һәм тыл өсөн мөһим йөктәрҙе тәғәйен еренә үҙ ваҡытында алып барып еткереүсе тимер юлы транспорты мөһим роль уйнаған. Дошман тәүҙә беҙҙең илдәге тимер юлды халыҡ хужалығының иң йомшаҡ, тиҙ бирешеүсән урыны тип һанаған, ләкин быны дөрөҫләккә тап килмәүен тиҙ үк аңлаған. Һуғыштың тәүге көндәрендә үк илдең тимер юлы эшселәре фашизмды еңеүгә бар көстәрен һаласаҡтарын апаҫыҡ күрһәтә алған. Ошондай фиҙаҡәрҙәр араһында Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһе эшселәре лә була. Бүлексәнең бөтә ойошма һәм предприятиеларында ла хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу өсөн көрәш әүҙем бара. Эшселәр үҙҙәре өсөн дә, фронтҡа киткән иптәштәре өсөн дә тырышып эшләй.

Өфө паровоздар ремонтлау заводы эшселәренә лә юғары патриотлыҡ рухы хас була. Һуғыштың тәүге көндәренән үк бында оборона продукцияһы - снаряд, мина, хәрби ҡорамалдар - эшләү яйға һалына. 1942 йылда бөтә етештерелгән продукцияның 42 проценты оборона өсөн тәғәйенләнгән була. Профилле продукция эшләү төрө буйынса ла йөкләмә бермә-бер арта - Өфө паровоздар ремонтлау заводы Мәскәүҙән алып Красноярскиға тиклемге арауыҡта ФД сериялы ҡеүәтле паровоздар ремонтлай алыусы берҙәнбер завод була. Ашығыс заказдарҙы атҡарыу өсөн эшселәр төҙлөктәр буйы заводтан ҡайтмай эшләй.

## Фронт өсөн дүрт бронепоезд

Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға Ҡыҙыл армия сафында 78 бронепоезд була. 1941 йылдағы артҡа сигенеүҙәр мәлендә уларҙың күбеһе юҡҡа сыға һәм бронепоездар паркын тулыландырыу иң мөһим мәсьәләләрҙең берененә әйләнә. "Тәгәрмәс өҫтөндәге ҡәлғә" тип йөрөтөлгән бронепоездар кәрәкле ваҡытта һәм бер урында күпләп утлы көс туплау мөмкинлеге арҡаһында юғары баһалана. ГКО ҡарарына ярашлы, 1942 йылдың 1 ғинуарына 32 яңы бронепоезд эшләү планлаштырыла. Сәнәғәт предприятиеларына фронт өсөн кәрәкле заказдарҙы өҙлөкһеҙ еткереү бурысы йөкмәтелгәнгә күрә, бронепоездарҙы эшләү башҡа ойошмаларға, тәү сиратта хәрәкәттәге составтарҙы төҙәкләндереүсе предприятиеларға тапшырыла.

Өфө паровоздар ремонтлау заводы ОБ-3 (еңеләштерелгән вариант №3) тибындағы майҙансыҡлы ике бронепоезд етештереүгә тотона. Бронемайҙансыҡтың нигеҙе итеп йөк вагондары алына, уларға бронеплитка менән көпләнгән металл каркас беркетелә. Бронепоездар үҙҙәре 30-40 миллиметрлы броня менән һаҡланған һәм ошондай уҡ бронемайҙансыҡлы паровоздарҙан торған. Һәр майҙансыҡта биш пулемет һәм 75 миллиметрлы иҫке өлгөлә поляк тубы ҡуйылған була. Тәжрибәле төҙәкләндереүсе белгестәр бронепоездарҙың конструкцияһын бер ни тиклем камиллаштыра. Мәҫәлән, ныҡ эҫе йәки һыуыҡта металдың температура үҙгәрешенән броня ысҡынып китмәһен өсөн болтҡа тишекте түңәрәк түгел, ә эллиптик формала эшләгәндәр. Вагондарға броня һаҡлауы ҡуйылыу һөҙөмтәһендә уларҙың рессорлы подвескалары нығытылған, ә һуғыш ваҡытында маневрлыҡты яҡшыртыу өсөн уларға пневматик тормоздар ҡуйғандар. Шулай итеп, "Александр Невский" һәм "Полководец Суворов" исемле броенепоездар 17 апрель кисендә фронтҡа китә.

Уларҙың экипажы Көньяҡ Урал хәрби округының төрлө частәренән йыйыла, ә локомотив бригадалар, башлыса, Өфө паровоздар ремонтлау заводы эшселәренән туплана. Улар шулай уҡ хәрби платформаларҙың орудие расчеты составында ла була.

1943 йылдың 18 һәм 29 июнендә Өфө паровоз ремонтлау заводы эшселәре төҙөгән БП-43 тибындағы тағы ике бронепоезд - "Салауат Юлаев" һәм "Өфө" - фронтҡа китә. Тәүге ике бронепоезд ярты йыл тирәһе эшләнһә, әлеге икәүһе бик тиҙ сафҡа индерелә. Мәҫәлән, "Өфө" бронепоезы ни бары һигеҙ көн эсендә йыйыла. Яңы броня майҙансыҡтары 76 миллиметрлы орудиелы Т-34 танкыһының башнялары менән ҡоралландырыла. Был уның хәрби көсөн бермә-бер арттыра.

Әҙер бронепоездар 60-сы айырым дивизия составына индерелә. Бронепоездарҙағы хәрби посҡа Курск дуғаһындағы алышта ҡыйралған 737-се һанлы һәм "Мәскәү метрополитены" исемле бронепоездарҙың иҫән ҡалған яугирҙәры баҫа.

Фронтҡа ебәрелгән дүрт бронепоезд да республика халҡы йыйып тапшырған аҡсаға төҙөлә. Мәҫәлән, "Өфө" бронепоезын төҙөүгә генә 890 меңдән артыҡ аҡса йыйыла.

## Башҡорт бронепоездарының хәрби юлы

"Полководец Суворов" менән "Александр Невский"ҙы 25-се айырым тимер юлы бронедивизионға берләштерәләр. Улар Сталинградҡа яҡын алыштарҙа ҡатнаша. Беренсе булып "Полководец Суворов" һуғышҡа инә. 15-16 июлдә ул немец уты аҫтында ҡала, бронемайҙансыҡтарының береһенә бомба төшә, паровоз һәм тендеры ҡыйрала, һуғыш припастары һаҡланған вагонда янғын башланғас, ундағы снарядтар шартлай. Ике авиаһөжүм ваҡытында "Полководец Суворов" экипажындағы 30 һалдат һәләк була, 41-е яралана. Һуңынан ул Саратов ҡалаһына ремонтҡа ебәрелә. Был мәғлүмәттәр Максим Коломийцтың Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан бронепоездар тураһындағы махсус эҙләнеүҙәренә таянып алынды.

1942 йылдың 31 августында "Александр Невский" бронепоезы командиры, 64-се армия частәренең оборонаһына 15 танк ярҙамында немец пехотаһы йырып инеүен ишеткәс, һөжүм итеүгә бойороҡ бирә. Воропоново станцияһы янында ул алышҡа инә һәм 40 минут эсендә дошманға 400 ярсыҡлы снаряд ташлай. Алыш барышында "Александр Невский" хәрәкәтсәнлеген юғалта. 1 сентябрь бронепоезд командаһы имен ҡалған пулеметтарын һәм башҡа һуғыш ҡоралдарын алып, йәйәүләп артҡа сигенә. Ике көн барған алыштарҙа экипаж 18 яугирын юғалта, 8-е яралана. Шулай ҙа, ауыр юғалтыуҙарға ҡарамай, дошмандың алға барыуын кисектереп тороу бурысын бронепоезд экипажы тулы кимәлдә үтәй.

"Салауат Юлаев" һәм "Өфө" бронепоездарының хәрби юлы 1944 йылдың февралендә, 1-се Прибалтика фронтында башлана. 1944 йылдың 3-4 мартында бронепоездар немец позицияларын биш тапҡыр утҡа тотоп, боеприпаслар складын юҡҡа сығара һәм ике артиллерия батареяһын ҡыйрата. Яҙ айҙарында бронедивизион һөжүм итеүсе 332-се пехота дивизияһы частәренә утлы ярҙам күрһәтеүҙә ҡатнаша. Шулай уҡ "Салауат Юлаев" һәм "Өфө" бронепоездары Обеляй станцияһы өсөн һәм Клайпеда йүнәлешендә алып барылған алыштарҙа, Прибалтика һәм Көнсығыш Германия биләмәһендәге ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнаша.

60-сы бронедивизиондың һуңғы хәрби операцияһы Кенигсберг (хәҙер Калининград) ҡала-ҡәлғәһе өсөн барған штурм була. "Салауат Юлаев" һәм "Өфө"нөң орудиеһы фронттың артиллерияһы менән бер рәттән, танктар һәм пехотаның һөжүменә ярҙам итеп, дошманды утҡа тота.

## Мәңгелек хәтер

Һуғыш тамамланғас, бронепоездар күпләп резервҡа сығарыла башлай. 1945 йылда 60-сы бронедивизион Брянск ҡалаһына күсерелә һәм ике йылдан һуң таратыла. Поезд һәм бронемайҙансыҡтар складҡа тапшырыла, ә һуңынан уларҙы металл итеп ташып бөтәләр.

Бөгөн Өфө бронепоездарының хәрби юлын тик һирҙайған фотоһүрәттәр һәм хәрби отчеттарҙағы юлдар ғына иҫләтә. Ләкин был хәтер мәңгелек, сөнки "тәгәрмәс өҫтөндәге ҡәлғәләр" Өфө тимер юлы оҫтаханалары эшселәре ҡулы менән эшләнгән, бөтә нәмәгә ҡытлыҡ кисергән, әммә һуңғы тинен тапшырған халыҡтың аҡсаһына төҙөлгән. Һис шикһеҙ, Өфөлә төҙөлөп, һуғыш яланына ебәрелгән дүрт бронепоезд да Еңеүгә үҙенең тос өлөшөн индергән.

**Гөлназ МАНАПОВА,**
**Куйбышев тимер юлдарының Башҡортостан буйынса территориаль идаралығы матбуғат секретары.**

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# ИҪӘП. ИҪӘП БЕЛМӘГӘН - ИШӘК.

**Рамаҙан айында сәхәргә торған һайын төнгө тынлыкты ярып кемуҙарҙан әтәстәр ҡысҡырышыуын ишетәм дә, уйға ҡалам. Көнсығыш календарында хатта йылға исем биргән был ҡош ниндәй үҙенсәлеккә эйә? Нимәгә өйрәтә, нимәнән иҫкәртә беҙҙе таң әтәсе?**



Имамдар Мөслим, Әл-Бохари, Әт-Тирмизи Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең: "Әгәр ҙә әтәс ҡысҡырғанды ишетһәгеҙ, Аллаһтан бәрәкәт һорағыҙ, сөнки ул фәрештәләрҙе күрә", - тип әйткәнен иҫтә ҡалдырған. Был хәҙистән аңлауыбыҙса, әтәстең күҙ төҙөлөшө кешенекенән айырыла. Ысынлап та, ҡайһы бер йән эйәләренең күреү, йә ишетеү, хатта йөрәк менән тойоу мөмкинлектәре уғата үҙенсәлекле һәм көслө була икән. Бәйғәмбәрҙәр тарихынан билдәле булыуынса, Сөләймән бәйғәмбәр хайуандар, ҡоштар телен аңлау, улар менән идара итә алыу һәләтенә эйә булған. Төрлө дини сығанаҡтарҙа ошо турала риүәйәттәр күп кенә һаҡланған. Сөләймән бәйғәмбәр әйтеүенсә, әтәс үҙ телендә ошондай тәсбих әйтә икән: "Эй һеҙ, ғәмһеҙҙәр! Аллаһты иҫкә алығыҙ, мөһимдән ситкә тайпылмағыҙ!" Тимәк, дөрөҫ ниәт менән башла һәр көнөңдө һәм уны файҙалы үткәр. Миненсә, бөгөнгө көндә ололар түгел, хатта балалар ҙа ваҡыттың тиҙ үтеүен тоя. Ваҡыт иҫәбендә һаҡсыллыҡҡа ынтылыу кәрәк һәммәбеҙгә иртүк тороусы әтәс өлгөнөндә!

Тағы ла бер хәҙистә әтәскә хас эшһөйәрлек һәм тырышлыҡ сифаттарына эйә булған ҡырмыҫҡа тураһында бәйән ителә: бер ваҡыт Сөләймән бәйғәмбәр ҡырмыҫҡанан бер айҙа күпме аҙыҡ ашауы тураһында ҡыҙыҡһына. Ҡырмыҫҡа уға ай буйына бер бөртөк бойҙайҙан артыҡ ашамауын белдерә. Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм бөжәктең шул ғына миҡдарҙа ризыҡланыуына ышанып бөтә алмай һәм уны тикшереп ҡарарға була. Бының өсөн тин керерлек кенә тишек ҡалдырылған бяыла һауыт эсенә бер бөртөк бойҙай орлоғо һалып, ҡырмыҫҡаны шунда бикләп ҡуя. Ай үтә. Әлеге һауытты ҡулына алған Сөләймән бәйғәмбәр аптырашҡа ҡала. Унда бикләнгән ҡырмыҫҡа тере, ә бойҙай бөртөгөнөң яртыһы ғына ашалған булып сыға. Сөләймән ғәләйһиссәләм: "Һин ай буйына бер орлокто ашап ҡуям, тигәйнең. Әле ниңә уның яртыһын ҡалдырҙың, бөтәүләй ашамаҡың?" - тип һорағас, ҡырмыҫҡа былай ти: "Эй, Аллаһтың Илсеһе! Ирektә сағымда Хоҙайҙың ниғмәттәренә өмөт итә һәм биргәндәренә шөкөр итә инем. Уның мине онотмаҫына, ас ҡалдырмаҫына һәр саҡ ышаныста торғас, өлөшөмә тейер ризыҡтың алдама килерәнә бер ваҡытта ла шигем булманы. Ә был юлы, Аллаһ Тәғәләнең биреренән тыш, мине туйындырыу бурысы һинең яуаплылығыңда ине. Бәлки, һин минең турала онотоп ҡуйырһың да, һауытты асмаҫһың, тип уйланым. Шуға күрә, нисек кенә ҡыйын булмаһын, бойҙай бөртөгөн һаҡлап ҡына тотонорға ниәтләнем".

Хәҙистәге был ваҡиғаны тыҡланыусылар "Туйғансы ашама, ҡуйғансы аша" тигән иҫкәртеүгә ярашлы, үҙенсә аңлар. Аҙ ашауҙың сәләмәтлеккә ҙур файҙа килтергәнен белеп, хәҙер күптәр уны йәшәү рәүешенә әйләндерергә тырыша. Был хәҙистең тағы ла бер хикмәтен беҙҙең халыҡ "Аллаға ышан, үҙең ҡымшан" тигән мәҡәлгә һыйҙырған. Донъяуи диндәрҙә артығын тотоноу, сама белмәү турaһында хәҙистәр күп кенә. Тормош һабаҡтарымы, халыҡ ижадымы, дин тарихымы - барыһы ла әҙәм балаһын алтын урталыкты табып, һәр нәмәлә сама белеп, аҡыл менән йәшәргә өйрәтә. Э быға үҙ сиратында иҫәп-хисап менән татыу булмаҡ кәрәк! Секундтарҙан - минуттар, минуттарҙан - сәғәттәр, сәғәттәрҙән тәүлектәр йыйыла, уларынан - айҙар, йылдар китә... Ғүмер үтә. Бөгөн кешелек донъяһы коронавирус менән бәйле оло һынау алдында тора. Изге Рамаҙан айында һәр ҡайһыбыҙ ғүмеребеҙҙең һанаулы бер мәлдәрҙән генә торғанын иҫкә төшөрәйек әле. Шул ғүмеребеҙҙә ҡылған ғәмәлдәребеҙ өсөн әлегә үҙаллы яуап бирерлек иҫәп-хисап биреп ҡарайыҡ. Ул да, сәғәт кеүек, 12-шәр йыллыҡ ҡулсаларҙан тора, имеш. Әммә һәр берененең үҙ тәғәйенләнеше, үҙ йөкмәткеһе. Донъя - ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа, тип тигенгә әйтмәгән боронғолар. Дөрөҫ үткәрҙек микән беҙ шул осорҙарыбыҙҙы? Ҡарағыҙ, һәр ҡайһыбыҙға ураҡ икән уның дөйөм талаптары:

**0-12 йәш.** Бала саҡ. Кеше ғүмеренең тәүге ҡуласаһы, ғүмер башы, ғүмер таңы, тормош даръяһының йәншишмәһе. Ул кешегә әйләнә-тирәне, ысынбарлыкты таныу, донъя менән тәүбашлап танышыу, тормош ҡағиҙәләрен үҙләштереү өсөн тәғәйенләнгән. Ошо миҙгелдә тәпәй баҫып, тәүге һүкмаҡтарынан атлап китергә, һөйләшергә, кеше менән аралашырға өйрәнергә, уҡый-яҙа-иҫәпләй белеү алымдарын үҙләштерергә өлгөрә әҙәм балаһы. Был осор балаға ата-әсәһен, туғандарын, дуҫтарын, илен яратырға өйрәнеү өсөн дә бүленгән. Бала ни нәмә яҡшы, ни нәмә насар икәнде айыра, үҙенең мөмкинлектәрен аса, көсөн-һәләтен һынай. Ошо арауыҡ сифатлы үтелмәһә, балала шәхес тәрбиәләнмәй. Йәғни, ул дөйөм кешелек ҡиммәттәрен, идеалды бик һайҙан - ҡалаҡтағы һыу төбөнән генә эҙләргә өйрәнә. Матди байлығы ғына түгел, рухи даръяһы ла бик ярлы буласаҡ уның киләсәктә. Ваҡсыллыҡ - уның төп һыҙаты. Беҙҙең илдә 99 процент кеше шулай тәрбиәләнә! 100-ҙән бер балаға ғына рух бөйөклөгә, күңел һыйҙырышлылығы бирелә: һыу икән - ул океан, һауа икән - ул йыһан киңлегендә өйрәнелә, фән дә уның өсөн икһеҙ-сикһеҙ арауыҡ, мөхәббәт тә - уның өсөн бөйөк төшөнсә. Ошондай өлөш аҙһын балаларыбыҙға!

**13-24 йәш.** Ғүмер иртәһе. Ғүмер яҙы. Асылыу, төргәктән, һәр төрлө ҡыҫымдарҙан сығып, киҙелеү, яҙылыу, үҙаллылыҡҡа өлгәшеү. Йәшлек. Сәскә атыу осоро. Мәле, әмәле, ғәмәле- барыһы ла бирелә үҙеңә. Кеше үҙенә бирелгән бөтә көс-ҡеүәтен, мөмкинлектәрен үҫтерергә, тормошоноң нигеҙен, шәхесенең үҙҙеген төҙөргә тейеш. Үҙаллы тормош юлына баҫып, уҡыуҙы тамамлап, һөнәр ала, ғаилә-ояһ төҙөй. Был бурыстарҙы ул ошо арауыҡта үтәмәһә, уның алдағы ғүмере ҡағылыпһуғылып үтәсәк. Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында һыңғырашырһың, ти халыҡ мәҡәле был турала.

**25-36 йәш.** Ғүмер йәйенең тәүге яртыһы, йәйелеп китеп донъя көтөр сағың! Сәскә атыу осоро туҡталып, емештәр яралыу мәле. Пландар тормошҡа ашырыла, үҙ яҙмышыңа үҙең яуап бирәһең, үҙ йөгөндө үҙең тартаһың. Кеше үҙен-үҙе аямай эшләй, көс-ғәйрәте ташып тора. Ҡабаланыу, яныльшыуҙар ҙа был осорға хас әле, ләкин уларҙы ошонда уҡ хәл итеп өлгөрмәһәң, киләһе тормошоң өсөн бик күп юғалтыуҙар, үкенестәр килтерәсәк улар.

**37-48 йәш.** Ғүмер уртаһы, йәйге селлә сыға торған осор. Кеше инде яулайһы үрҙәрен яулаған, абруй ҡаҙанған. Үҙе һайлаған тормош юлын ҡабаланмай-сәбәләнмәй генә үтә бирә. Быға тиклем үҙ юлың тапалмаған, шымартылмаған, йортоң төҙөлмәгән булһа, ҡапыл үҙгәртеп ҡороу һәләкәткә илтеүе ихтимал. Инде өлгәшелгән уңыштарҙың емешен татырға, тынысланырға ваҡыт. Балаларыңдың йәше хәҙер икенсе түңәрәктә: һин уларға тормош тәжрибәңде, күңел байлығыңды, аҡыл өлгөңдө тапшырырға, уларҙы юлға баҫтырырға бурыслы. Шулай булмаһа, ғүмер көҙөң ямғырлы булыуы, аңғыҙлыҡта үтеүе ихтимал... Онотма: себеште көҙ һанайҙар!

**49-60 йәш.** Ғүмерҙең алтын көҙө. Көҙ - өҙ! Байлыҡ, муллыҡ осоро - йыйып ҡына өлгөр! Быға тиклем уҙғарған ғүмереңдең һөҙөмтәһе: ни сәсһәң, шуны урыр мәл. Кеше инде олатай-өләсәй булған. Оло атай һәм оло әсәй! Фани донъя артынан ғына ҡыуып етеп булмаҫ, рухи ҡиммәттәр тураһында уйланырға күптән ваҡыт. Аллаһы Тәғәләгә һыйынып, мәңгелек әхирәт донъяһына, күңел аһәненә ынтылыу хас булырға тейеш был матур осорға. Шул саҡта кешелеккә, тәүфиҡлы, иманлы итеп тәрбиәләгән балаларыңдың балалары - хас та көҙгөләгә сағылышың! Һиңә тартылып, хөрмәт итеп торһалар үҙеңде - тимәк, бәхетле ҡартлыҡ бирелгән һиңә! Быға тиклем улар өсөн тир түкһәң, балаларың хәҙер үҙҙәре ярҙам итә һиңә.

**61-72 йәш.** Ғүмер көҙөнөң аҙағы. Көҙгә уңыштар йыйылған. Ҡоштар киткән, япраҡтар ҡойолған. Тәбиғәт ҡышҡы йоҡоға әҙерләнә. Кеше лә шулай: нимәнелер үҙгәртеү, яңынан башлау хәҙер инде мөмкин түгел. Һуң. Йәшлектә уҡыу - ташҡа яҙыу, ҡартлыкта уҡыу - боҙға яҙыу. Ләкин онотма: хәҙер инде һин тормош арбаһын һөйрәй-һөйрәй, аҡыл туплаған, фекер төйнәп, шуларҙы кешеләргә тарата алырҙай аҡһаҡал-ағинәй, ил атаһы-ил инәһе. Оло дәрәжәле кеше. Сәстәреңә яҡкан ҡырау менән бергә аҡлыҡ, паклыҡ хас һиңә, күңел киңлегенән, күңел тәрәнлегенән килгән аҡыл нурың барыһына ла етергә тейеш!

**73-84 йәш.** Ҡартлыҡ - ғүмер ҡышы. Үҙеңдең дә хәлең хәҙер ҡыштыр-ҡыштыр ғына...Тынлыҡ, сабырлыҡ, сафлыҡ бирелгән һиңә. Барыһына ла үҙең өлгәштең. Ҡартайғаныңды йәштәргә ҡарап бел.

**82-96 йәш.** Донъя бер беҙҙән генә ҡалмаған, тип йәшәр саҡ.

**96-108 йәш.** Ошо йәштәргә етеүселәр ҙә юҡ түгел халыҡтар араһында. Бигерәк тә япондар араһында күп икән улар. Сәбәбен уларҙың бик тырыш, һәр саҡ яҡшыға өмөтләнеп, ыңғай кәйефтә йәшәүсе, бер-береһенә ҡарата мәрхәмәтлелектә өлгө булырлыҡ милләт булыуы менән аңлата ғалимдар. Дөрөҫтөр, тим. Фән, техника, сәнғәт, мәҙәниәт һ.б. өлкәләрҙә лә алға китеүҙәре шунандыр. Беҙгә лә шундай аңлы, берҙәм, көслө халыҡ булып үҫешергә яҙһын!

Шулай итеп, ошо яҙмамды уҡыусы һәр ҡайһыбыҙға үрҙә һаналған тормош ҡулсаларының нисәнсеһендә булһа ла, үҙенә тәғәйенен имен-аман, рух күтәренкелегендә, иман байлығында үтергә яҙһын! Булғанды туҙҙырыу, ваҡытты әрәм-шәрәм итеү, өлөшөбөҙгә яҙғанды тотоноуҙа һаҡһыҙлыҡ күрһәтеү, иҫәпһеҙ тотоноу, барҙы юҡ итеү, бушҡа тәләф итеү, исраф итеү кеүек киҫәтеүҙәрҙе ишетеп кенә түгел, шуларҙан ғәмәлдә тыйылып йәшәргә насип итһен алдағы ғүмерҙәрҙә! Туған-ара, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә лә бер-беребеҙгә иттибарлы, һаҡсыл, ярҙамсыл булып, барҙың ҡәҙерен белеп йәшәйек! Изге Рамаҙан айында изге ғәмәлдәрҙә булайыҡ!

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 20-се идея Ғәҙелһеҙлектән өҫтөн бул

Әгәр һинең менән ғәҙелһеҙ ҡыланһалар, алдаһалар, ни эшләрһең? Бындай кешеләр менән дуҫтарса мөнәсәбәттә дауам итергә маташырһыңмы? Кисерергә һәм оноторға көс табырһыңмы? Асыуыңды баҫа алырһыңмы, әллә үҙ-үҙеңә: "Миңә үҙемде дуҫтарса тотоу оҡшай, ғәҙелһеҙлек арҡаһында кемделер ҡуралмайынса, рәнйеү һәм нәфрәт арҡаһында ауырыуға һабышыр хәлем юҡ. Ләкин бөтәһен дә кисереп, онотһам, был кешеләрҙең миңә ҡарата ғәҙел мөнәсәбәтенә өлгәшә алмаҫымды белдерә түгелме һуң?" - тиерһеңме?

Ошондай тойғо кисергәнең бармы? Проблеманы хәл итеүҙең берҙән-бер ысулы - үҙеңде ғәҙелһеҙлектән яҡлау өсөн асыу тоторға кәрәк, тип уйлайһыңмы? Уйлап ҡараһаң, бынан мәғәнә, фәтеүә юҡ. Үстең был төрө һәм "әжер комплексы" һинең менән ғәҙелһеҙ эш итеүҙән килгән зыяндан да күберәк зарар килтерәсәк.

Әгәр һин ғәҙеллек турaһында уйланһаң, ысын ғәҙеллектең Мөхәббәт Законына нигеҙләнеүен аңларһың, тип уйлайым. Беҙ үҙ-үҙебеҙҙе ошо Мөхәббәт Законына көйләргә ни тиклем һәләтле булһаҡ, ғәҙеллек буйынса йәшәйәсәгебеҙ шул тиклем ышаныслыраҡ. Йөрәгебеҙҙе үпкә-рәнйеүҙәрҙән ни тиклем яҡшыраҡ таҙарта алһаҡ, үҙебеҙҙең изгелеккә яҡынлығыбыҙҙы шул тиклем көслөрәк тойорбоҙ. Шуны беләбеҙ: беҙ ни тиклем күберәк һөйөү хисебеҙҙе бүлә, ни тиклем күберәк кисерә алһаҡ, беҙҙең эске азатлыҡ һәм көс тойғоһо шул тиклем көслөрәк булыр.

Үҙебеҙҙә асыу һәм нәфрәт һаҡлап, кисереүҙән баш тартып, беҙ Эске Көсөбөҙҙө яңылыш юлдан йүнәлтәбеҙ, күңел тыныслығына ирешә алмай күп нәмә юғалтабыҙ - был ғәҙелһеҙлек килтерер юғалтыуҙан да ҙурыраҡ.

Әйтәйек, һин асыуыңды аҡсаға әйләндерһәң, шулай тип әйтер инең: "Ғәҙелһеҙлек миңә ун долларға төшөр ине, ә асыу һәм нәфрәт арҡаһында миңдә ашҡаҙан яҙваһы барлыҡҡа киләсәк, уны дауалау миңә мең долларға төшәсәк".

Был хәл финанс күҙлегенән ғәмәлгә яраҡһыҙ, шулаймы? Әгәр үҙеңде ғәҙелһеҙлектән өҫтөн ҡуя алһаң, юғалтыуҙан бигерәк, табышҡа юлыҡыуыңды асыҡларһың. Ошо турала уйлан. Әгәр һин ысынлап та ғәҙелһеҙлектән өҫкә күтәрелеп, үҙеңдә: "Был тик күпер аҫтындағы һыу ғына, мин барыһын да оноттом һәм кисерҙем", - тип әйтерлек көс таба алһаң, ғәҙелһеҙлек арҡаһында юғалтҡандан күберәк көскә эйә булырһың һәм тормошоңдоң бухгалтер кенәгәһенең килемдәр графаһына яңы юл яҙып ҡуйырһың.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СОЦИАЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ғайса. Табағас. Йософ. Дауыт. Намаҙ. Уфылдау. Маршрут. Хәдис. Атайға. Әсхәл. Әсә. Умрау. Ниәт. Сүрә. Рикша. Акт. Муса. Ҡиәмәт. Утрау. Ибраһим. Әминбәк.

**Вертикаль буйынса:** Мөхәммәт. Дарыухана. Реалист. Тары. Ҡәбилә. Туташ. Ғөбәй. Әрәсә. Махаон. Сөләймән. Ут. Ми. Саф. Мәк. Нух. Утрау. Әҙәм. Имза. Ураҙа.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (18) дүшәмбе | 3:18 | 4:48 | 5:18 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 12 (19) шишәмбе | 3:17 | 4:47 | 5:17 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 13 (20) шаршамбы | 3:15 | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 14 (21) кесе йома | 3:13 | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |
| 15 (22) йома | 3:11 | 3:41 | 5:11 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |
| 16 (23) шәмбе | 3:10 | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 19:46 | 21:16 | 22:46 |
| 17 (24) йәкшәмбе | 3:08 | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 19:48 | 21:18 | 22:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ҠАРАҒАЙ ЭНӘҺЕ

Ҡарағай энәләрен баҡса ҡоротҡостарынан һаҡланыу өсөн ҡулланырға була. Бының өсөн 1 кг ылыҫты 5 литр һыуға һалып, бер аҙнаға ҡараңғы урынға ҡуйып торорға. Төнәтмәне көн һайын болғатырға онотмайбыҙ. Шунан уны һөҙөп, һиберҙән алда кире биш литрға еткәнсе өҫтәп һыу ҡойорға. Был 5 литрлыҡ төнәтмәгә 20 грамм шыйыҡ һабын ҡушҡанда һөҙөмтәлерәк була. Ҡарағай энәһе төнәтмәһен бет (кеблә), япраҡ бөрсәһенә ҡаршы ҡулланалар.

Төнәтмәне тиҙ генә әҙерләргә кәрәк булһа, ҡарағай энәләренә 1:1 нисбәтендә ҡайнар һыу ҡойоп, бер тәүлек төнәтергә кәрәк. Һөҙөп, шыйыҡ һабын өҫтәһәң, әҙер була. Был төнәтмә көслө, уны ҡулланырҙан алда 1:5 нисбәтендә һыу ҡушырға һәм кискә ҡарай һибергә кәрәк. Баҡсалылар 1 төп ҡарағатҡа 1,5 литр, крыжовникка - 1 литр, ҡурай еләгенә - 2 литр, еләктең бер квадрат метрына 0,2 литр, ҙур ағасҡа 10 литр төнәтмә һибергә кәңәш итә. Ҡарағат һәм крыжовникка күбәләк (огневка) баҫмаһын өсөн сәскә ата башлаған мәлендә үк һәр 5 көн һайын һибергә. Был төнәтмә еләкте сереүҙән һаҡлай.

ФИТОТЕРАПЕВТ КӘҢӘШЕ

# ҮЛӘНДӘР ЯРҘАМҒА КИЛӘ



**Донъя буйлап коронавирус атлай. Һуғыш йылдарындағы һымаҡ, көн һайын статистика күҙәтәбеҙ - күпме кеше сирләй, күпмеһе һауыҡҡан. Профилактика маҡсатында нимә генә тәҡдим итмәйҙәр: имберҙән алып һарымһаҡ менән лимонға тиклем барыһы ла бар!**

Әммә мине икенсе мәсьәлә борсой һәм аптырата: коронавирус үпкә сирен киҫкенләштерә, пневмония барлыҡҡа килтерә. Әлегә бер генә киң мәғлүмәт сараларында ла пневмония менән сирләгәндән һуң 3-4 аҙна мотлаҡ организмды тергеҙергә кәрәклеге тураһындағы мәғлүмәтте күрмәнем. Бөгөн был хаҡта яҙырға, ҡысҡырырға, һәр кемгә еткерергә кәрәк.

Үпкә туҡымаһы елһенгәндән һуң, ул элекке хәленә ҡайтһын өсөн уға ярҙам талап ителә. Бында үләндәр менән дауаланыуҙан да яҡшыһы юҡ. Бары тик үләндәр генә уны системалы тергеҙә һәм ялҡынһыныуын бөтөрә, поливитаминдар менән тәьмин итә, иммунитетты нығытыу һөҙөмтәһен бирә. Бының өсөн фитотерапияның текә белгесе булырға ла кәрәкмәй. Барыбыҙ ҙа витаминға бай үҫемлектәрҙе - гөлйемеш, миләш, ҡурай еләге, ҡара ҡарағат, мүк еләге, көртмәле - беләбеҙ. Туңдырылған еләктәрҙән морс йәки компот эшләгеҙ. Гөлйемеш менән миләште лә ҡушығыҙ. Был осраҡта бигерәк тә миләш яҡшы - ул гипоксияға ҡаршы тәьҫир итә, ә организмға пневмониянан һуң кислород етмәй. Елһенеүгә ҡаршы үҫемлектәр ҙә бар - юл япрағы, һары мәтрүш, андыҙ, тубылғы, тырнаҡ гөлө, аир үләне, ҡурай еләге япрағы. Ошо исемлектән бер нисәһен алырға мөмкин. Ауыр ялҡынһыныу процестарынан һуң туҡымаларҙы тергеҙеү өсөн кремний кәрәк. Ул кесерткәндә, күгүләндә (бәпкә үләне), күҙлутта (пикульник), биҫтау үләнендә (медуница), йәбешкәктә (репешок) бик күп. Әгәр интенсив медикаментоз курс үтелһә, һуңғыһы бигерәк тә файҙалы (көслө гепатопротектор).

Иммунитетты көсәйтеүсе үҫемлектәр ҙә бар - улар адаптогендар (элеутерококк, алтын тамыр (родиола розовая), левзея, аралия). Дарыуханала ҡайһыһын таба алаһығыҙ - барыһын бергә ҡушығыҙ. Ҡан баҫымы нормаль булған кешеләргә көнөнә иртән 15 тамсы, гипертониктарға - 3-5 тамсы, гипотониктарға 25-30 тамсы 2-3 аҙна ҡорт йәттәһе һеркәһе йәки ҡорт һитәһе (перга) менән аралаштырып эсергә кәрәк. Һеркәне ашағандан һуң көнөнә ике тапҡыр берәр ҡалаҡ ауыҙҙа имергә. Ҡорт һитәһен дә 2-3 аҙна ҡулланыу зарур (5-7 столбиклы).

Шулай уҡ иммунитетты бүрегүлән (шлемник), эхинацея, монарда, юл үләне, гөлйемеш, ылыҫ, көртмәле, төшөргән (астрагал), аҡтамыр, ҡайын, кукуруз емешлеге, кесерткән һәм башҡа бик күп үҫемлектәр күтәрә.

Әгәр бер курс антибиотиктар эскәндән һуң эсегеҙ йомшара икән, мотлаҡ һары мәтрүш һәм андыҙ эсергә кәрәк, әгәр, киреһенсә, эсегеҙ ҡатһа - бәпембә тамыры һәм меңъяпраҡ ярҙам итер.

Үҙегеҙгә 5-7 үҫемлектән йыйылма эшләп алығыҙ. Оло кеше өсөн уны ярты литр һыуға 2 ҡалаҡ иҫәбенән эшләргә кәрәк. Термосҡа һалып ҡайнар һыу ҡойоп, 1-3 сәғәт быҡтырып ултыртҡандан һуң көнөнә өс тапҡыр стакандың өстән бер өлөшөн эсегеҙ.

Әле йәш кесерткәнде йыйығыҙ һәм уны һыуытҡыста һаҡлағыҙ. Аш, бутҡа, картуф бешергәндә, салат эшләгәндә мул итеп ҡулланығыҙ. Кесерткән - витаминдар, көс һәм энергия сығанағы. 2-3 аҙна булһа ла көнөнә 2-4 ҡалаҡ ашағыҙ. Ә инде кем сир үткәргән (ковид ҡына түгел, башҡа сирҙәрҙе лә), ул йәншишмә урынына булаҫаҡ. Варикозлы кешеләргә һәм йөрәк сирлеләргә көнөнә 1-2 балғалаҡ та етә.

Ҡулланырҙан алда дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшергә онотмағыҙ.

Ольга ДАНИЛЮК, фитотерапевт.

РИЗЫҠ БҮЛМӘҺЕ

# АЯҠ АҪТЫНДА ҮҪӘ УЛАР

## Кесерткәндән кәтлиттәр

Быйылғы ураҙабыҙҙың яҙғы ризыҡлы мәлдәргә тура килеүе бигерәк ҡыуаныс әле ул. Бөгөнгө ифтарға, мәҫәлән, кесерткәндән кәтлиттәр әҙерләнем. Баҡсанан йыйып индергән бер тотам кесерткәнде яҡшы итеп йыуып, ҡоротоп, ваҡ ҡына итеп тураным. Бер баш һуған, бер теш һарымһаҡ та ҡушып ебәрҙем. 1 йомортҡа, 2 ҡалаҡ шыйыҡ май, 2 ҡалаҡ он, бер аҙ ғына тоҙ, үлән тәмләткестәре, ҡара борос өҫтәнем дә, яҡшы ғына итеп ҡул менән баҫтым. Әҙерләгән үлән массаһы шыйыҡ булып китмәһен өсөн 2 ҡалаҡ бешкән ҡарабойҙай өҫтәнем. Кәтлиттәр рәүешенә индереп әүәләгәс, ҡайнап сыҡҡан үҫемлек майына һалып, ике яҡлап табала ҡыҙҙырҙым. Ашҡаҙанға ит аштарынан ял итеү өсөн бынамын тигән мөмкинлек булды был.

## Топинамбур





Көҙ көнө баҡсалағы муллыҡ осоронда топинамбурға иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Мин дә уларҙы йыймай ҡалдырам. Сөнки иртә яҙҙан ошо әрһеҙ үҫемлектең ер аҫтында ҡышлаған бәрәңгеләренең тәмле һәм файҙалы ризыҡ икәнен күптән беләм. 18 проценты шәкәрҙе һәм крахмалды алмаштыра торған тәбиғи инулиндан, шулай уҡ органик магний, калий, кремний, витаминдарҙан һәм иммунитетты күтәреүсе бөтә аминокислоталарҙан ғына торған был аҙыҡты Америка индеецтары "йөҙйәшәрҙәр ризығы" тип атай икән. Ҡан тамырҙарын таҙартыусы булараҡ та ул билдәлелек яулаған. Топинамбурҙы нисек ҡулланырға?

Иң ябай һәм файҙалы ысул: ерҙән ҡаҙып алғас та, уны йыуып, таҙартып, шул килеш алма, кишер урынына шатырҙатып сәйнәп ашарға була. Топинамбурҙы йыуыу, таҙартыу менән шундуҡ тотоноу кәрәк, сөнки ул төҫөн үҙгәртә башлай. Уны ҡырғыстан ҡырып, йәш үләндәр менән бутап, үҫемлек майы, ҡаймаҡ, майонез ҡушаһыңмы, йәшел һуған, бешереп туралған йомортҡа өҫтәйһеңме, салат яһарға мөмкин. Ҡырғыстан үткәрелгән топинамбурға туңдырылған ашҡабаҡ, әле генә йыйып индергән фәрҙә үләнен (сныть) турап ҡушып, 1 йомортҡа, шыйыҡ май, он, тоҙ ҡушып, үтә шыйыҡ булмаған ҡамыр әҙерләнем һәм майһыҙ ҡыҙған табала ҡоймаҡ ҡойоп алдым.

## Бәпембә

Бөгөн көн иртәнән ямғырлы булғас, тышта ла әллә ни эш ҡыйратып булмаҫын уйланым да, ҡул етмәйерәк торған кәрәкле шөғөлөмә тотондом. Ул да булһа - бәпембә үләнен әҙерләү. Былтырғы түтәлдәрҙе баҫып алып, үрсеп тә баралар, юғиһә. Ямғыр яуа башлағансы, бер тас итеп тамырҙары менән ҡаҙып алып өлгөрҙөм тегеләрҙе. Ишек алдында һауыттарҙа йыйылып торған ямғыр һыуына сайҡатып алып керҙем дә, тупраҡтан, сүп-сарҙан таҙартып, арыуыҡ ҡыялдым. Тамырҙарын айырып алғас, ит турағыстан үткәреп, духовкаға иң һүрән утта киптерергә ҡуйҙым. Ит турағысҡа тамырҙарҙы тураҡлап төшөрһәң, эш еңеләйә. Резина перчаткалар кейеп алмай булмай, үҫемлектәге микроэлементтарҙан ҡул ҡарая. Тамырҙы киптергәндә, телефон/компьютер артында донъяғыҙҙы онотоп ултырып, көйҙөрөүҙән ҡурҡһағыҙ, мейес йылыһына ҡуйып, төн сыҡҡансы киптерергә була. Ҡыш көндәре термоста ғына бешереп сәй итеп эсергә була был ҡатышманы.

Ә бәпембәнең йәшел үләнен ҡайнар һыу менән бешекләп, ҡый-һайын тағы бер сүпләгәс, кискелеккә ифтарға салат әҙер булды. Уға бешкән йомортҡа турап өҫтәһәң, һуған, һарымһаҡ кеүек тәмләткестәр ҡушып, үҫемлек майына бутаһаң, бына тигән "витаминдар склады" тигән ризыҡ әҙер буласаҡ. Бәпембәне йыбанмай ғына шулай әҙерләп алһаң, күпме файҙа күрелә: баҡсалағы сүп үләненән ҡотолаһың, өҫтәүенә, уның файҙаһын күрәһең, шифалы ризыҡ итеп ҡулланаһың.

## Фәрҙә (сныть) үләне



Ураҙасыларға ярҙамға тағы бер файҙалы ризыҡ. Һыйыр ағынан әҙерләнгән эремсеккә әлеге мәлдә өлгөргән фәрҙә үләнен, бер баш һуған тураным. 1 ҡалаҡ иретелгән ҡаҙ майы, 1 йомортҡа, самалап тоҙ, ҡара борос һалып яҡшылап бутаным. Артабан 1 ҡалаҡ үҫемлек майы, 1 йомортҡаға саҡ ҡына һыу өҫтәп, йомшаҡ ҡамыр баҫтым һәм баяғы эслектәрҙән билмәндәр эшләп алдым.

Йәшел үҫемлектәрҙән ризыҡ әҙерләп күрһәтеүем бик күптәргә оҡшап ҡалды. Лайктар ҡуйыусыларҙан тыш, шәхси хәбәр менән дә, телефон аша ла бәйләнешкә сығыусылар бар, ентекле инструктаж һорайҙар. Ҡурҡынҡырайҙар, ахыры, ысынлап та шул беҙҙең аяҡ аҫтында үҫкән үҫемлектәрҙе ризыҡ итеп ҡулланып буламы икән ни, тип шикләнәләр, күрәһең. Ашап ҡаранылар инде. Бөтәһе лә имендәр, ҡәнәғәттәр, тағы яңы рецептар һорайҙар.

## Майонез

Грецияла отоп алған майонез рецебын тәҡдим итәм. 2 ҡыярҙы ваҡ ҡырғыстан ҡырып, һутын һығып ситкә алам. 1 баш һарымһаҡты ла ҡырғыстан үткәреп, ҡыярға өҫтәп, самалап тоҙ, ҡара борос һалам. 1 стакан магазин ҡаймағын ярты стакандан кәмерәк үҫемлек майы менән бутайым. Бер аҙ ғына йәшел япраҡтар ҡушып ебәрһәң дә артыҡ түгел. Ауыл ҡаймағы булһа, май өҫтәү кәрәкмәй. Шуларҙың бөтәһен бергә ҡушып, яҡшы итеп туғыйһың (блендер булһа, бигерәк шәп). Шул массаны быяла банкаға тултырып, һыуытҡыста һаҡлайым. Йылдың ҡайһы миҙгелендә лә, ниндәй аҙыҡҡа ҡушып ашаһаң да, яҡшы үтә торған майонез был. Кемдәр миндә ҡунаҡта булғаны бар, һәр береһе рецебын һорамай ҡалмай. Һығып алған ҡыяр һутын да әрәм итеү юҡ, һыуһынды ҡандырып, эсеп ебәрһәң дә була. Лосьон урынына һөртөп, бит тиреһен йәшәртеп ебәрергә лә ярай.

## Әйткәндәй...

Юғарыла телгә алынған фәрҙә үләне халыҡта төрлөсә аталып йөрөй. "Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге"ндә зәржә, сәрҙә варианттары бирелгән. Сәрәтә, сәрҙәкәй, фәрҙә, келән көпшә тигән варианттар ҙа бар. Башҡорт ҡолағы өсөн бик үк тәбиғи булмаған "ф"ға башланған атама ҡайҙан килеп сыҡҡандыр. Был үлән киң таралған. Ҡайҙа ғына үҫмәй зәржә: баҡсала, урман, һыу буйҙарында ла уның хуш еҫтәре әллә ҡайҙан аңҡып торған аҡ сатырбаш сәскәһен күрергә мөмкин. Сүп үләне тип баҡсасылар унан ҡотолорға тырыша. Уның һабағында һәм япраҡтарында С витамины, каротин, аҡһымдар, кальций һәм кобальт күп. Ҡан тамырҙарын, теш ҡаҙнаһын нығытыуы билдәле. Зәржәне сәскә атҡанға тиклем йыйылар һәм ҡулланалар. Уны һыҙлаған быуынға ябыуҙары ла билдәле. Сит-ситтәре семәрле ҡара-йәшел япраҡтарын ике-өс минут бешекләп турамаға ҡушалар. Бына бер рецепт:

**Фәрҙәле бәрәңге ашы өсөн:** бәрәңге - 0,5 кг; һыу - 1 л; кишер - уртаса ҙурлыҡта; башлы һуған - уртаса ҙурлыҡта; фәрҙә - 200 г; самалап тоҙ һәм ҡаймаҡ алабыҙ. Һыуға бәрәңге турап һалабыҙ ҙа, кишерҙе йыуып, таҙартып, эре ҡырғыстан үткәрәбеҙ. Уны туралған һуған менән ҡушып, майҙа ҡыҙҙырабыҙ. Быҡтырып ҡына ла алырға була. Бәрәңге бешеп етер саҡта уны төйгөс йә блендер менән иҙә алаһығыҙ, шул килеш тә ҡалдырырға мөмкин. Ярмалы бәрәңге үҙе лә иҙелеп барыусан була. Һуғанды, кишерҙе, туралған фәрҙәне ашҡа һалып, йәнә 10-15 минут тирәһе бешерәбеҙ. Табынға ҡаймаҡ йә ҡатыҡ менән бирәбеҙ.

**Рәшиҙә ХӘЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТ... көслөләргә кәрәгерәк

Күршем менән ыҙғышһам, өйгә керермен, өйөм менән ыҙғышһам, ҡайҙа керермен?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хозурланырға яратыуҙы тамуҡ ғазаптары исемлегенә индерергә кәрәк ине, ә уны, киреһенсә, ожмах шатлыҡтары исемлегенә индергәндәр...

**(М. Монтень).**

Бәхет көсһөҙҙәргә ҡарағанда көслөләргә кәрәгерәк, сөнки көслөләр йыраҡ-ҡараҡ һәм оҙаҡҡараҡ китә.

**(М. Вовчок).**

Маҡсатҡа ынтылған кеше уны тормошҡа ашырыу сараларын да таба, ул саралар булмағанда уларҙы үҙе барлыҡҡа килтерә.

**(У. Чэннинг).**

Тормоштоң бар серҙәренә төшөнөп бөткәс кенә кеше үлемгә ынтыла, сөнки үлем - тормоштоң тағы бер сере.

**(Д. Джебран).**

Байлығы булып та уны башҡалар менән бүлешмәгәндәр һәм үҙе өсөн тотонмағандар бай түгел - сит баҫыуҙы һаҡлаған ҡараҫҡыһын да үҙенең байлығы юҡ бит.

**(Һинд мәҡәле).**

Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система төҙөп була.

**(Иоганн Гете).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ишәк ике тау араһындағы һуҡмаҡ буйлап теләнә ниндәй сүп-сар тейәлгән бәләкәй арбаны тартып бара. "Ҡалай ҡыҙыҡ был ишәк, - тип уйлай Тау, - ул ниңә был бер кемгә лә кәрәк булмаған сүп-сарҙы тартып китеп бара икән?". Шунан Тау ишәкте шаяртырға уйлап, уның арбаһына бер ташын ырғыта. Ә ишәк бер ни булмағандай алға барыуын белә. "Ҡалай ҡыҙыҡ был Ишәк..." - тип уйлай тағы ла Тау һәм уның арбаһына ҙурыраҡ таш өҫтәй. Ә ишәк ныҡышмалы рәүештә алға барыуын дауам итә. Ҡаршыһына осраған кешеләр унан: "Һин ниңә был бер кемгә лә кәрәкмәҫ таштарҙы һөйрәп китеп бараһың? Уларҙы ташлап ҡалдырһаң, булмаймы? Шунда уҡ йөгөң еңеләйәсәк бит..." - тип аптырап һорай. Әммә ишәк кешеләргә бер ни аңламаған кеүек аптырап ҡарай ҙа, тиргә батып, ныҡышмалы алға ынтылыуын дауам итә. Ә Тау, ҡыҙыҡ күреп һәм Ишәктең үҙһүҙле ахмаҡлығына аптырап, уның йөгөн арттыра бирә. Бына бер мәлдә ишәк: "Ҡалай йөгөм ауыр..." - тип уйлай һәм йөгөн артабан тартырға уҡтала ла... ҡапыл йән бирә".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
8 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 376/05